ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

29-5 июнь-июль (һөтәй-майай)

2019

№26 (860)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Ҡайһы саҡта етәксе поездан алда сапҡан кешегә оҡшап китә: барыһы ла уны поездың хәрәкәте менән идара итә, тип уйлай, ләкин етәксе бит шуны белә - туҡтаһа, поезд уны иҙеп китәсәк.*
*(Петр Таранов).*

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Беҙ ситтән килмәнек,**
беҙҙең тамырҙарыбыҙ Уралда!

2

**Ауылдарыбыҙ....**
"йәшел йылан" менән алышҡа сыға

6

**Ырыуҙарҙы - бер сафҡа!**
Был тормошҡа ашырырҙай хыял

8-9

**Гәләбәштә...**
йыраусылар һәм милли кейем осталары йыйыны

12-13

**ТВ-программа** 14

ШАҒИР ҺҮҘЕ

# БЕРЛӘШЕГЕҘ!

(28-29-сы июндә V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы уҙа)



*Ил тупланды бөгөн оло Ҡоролтайға,*
*Был байрамда бер туғандай гөрләшәйек.*
*Байраҡ булып ҡалҡһын оло маҡсатыбыҙ,*
*Бөтә донъя башҡорттары, берләшәйек!*

*Байрам тыныр, тик тынмаһын уртаҡ уйҙар,*
*Әйҙәп торһон алға хәләл көрәшебеҙ,*
*Ситкә ташлап ваҡсыллыҡты, көнсөллөктө,*
*Бөтә донъя башҡорттары, берләшегеҙ!*

*Кәрәк түгел милләтем тип тамаҡ ярыу,*
*Кәрәк бары милләт өсөн юлдар ярыу,*
*Кәрәк бары көн-төн тимәй алға барыу,*
*Берләшегеҙ, бөтә донъя башҡорттары!*

*Еребеҙ тип беҙ янмаһаҡ, кем һуң яныр?*
*Бәләләрҙән беҙ ҡотҡармай, кем ҡотҡарыр?*
*Көс-ҡеүәтте беҙ тапмаһаҡ, кем һуң табыр?*
*Берләшәйек, бөтә донъя башҡорттары!*

*Беҙгә бер кем ситтән килеп ярҙам ҡылмаҫ,*
*Үҙебеҙҙең иңебеҙҙә бар эшебеҙ,*
*Еңелмәйек ялҡаулыҡтан, тарҡаулыҡтан,*
*Бөтә донъя башҡорттары, берләшегеҙ!*

*Илгә, йортҡа ҡот-бәрәкәт килһен тиһәк,*
*Китһен хәсрәт, кипһен тиһәк күҙ йәшебеҙ,*
*Таяныстың иң ныҡлыһы - тоғролоҡта,*
*Бөтә донъя башҡорттары, берләшегеҙ!*

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ҺӨЙӨНДӨРӘ ЛӘ, КӨЙӨНДӨРӘ ЛӘ...

Әлеге рубрика булыуынан файҙаланып үҙемде ҡыуандырған һәм шулай уҡ борсоған ҡайһы бер мәсьәләләр тураһында әйтеп үтәйем әле. Ҡағыҙға баҫылған күҙгә лә бәрелә, ҡолаҡҡа ла эленә, мейегә инеп һеңеп тә ҡала.

Һуңғы ваҡытта Өфө урамдарында, ҡалаға яҡын трасса буйҙарында башҡортса яҙылған һәм төрлө сараларға саҡырып тороусы плакаттарҙың күбәйеүен күреү йөрәккә май кеүек ятты. Сит илдә йәшәгән һәм беҙҙең хаҡта белеп-күрмәгән ниндәйҙер моделдәр ҡарап торған плакаттар күптән маҙаға тейә ине. Ә хәҙер беҙгә үҙебеҙҙең егет һәм ҡыҙҙарыбыҙ йылмайып баға. Үтә лә һөйөнөслө хәл, йәмәғәт. Артабан да был башланғыс әүҙем дауам ителеренә ышанысым ҙур.

Ҙур ҡалаларға хас йәмһеҙ күренеш бар беҙҙә. Ул да булһа, оҙаҡ йылдар буйына сереп һәм тутығып ултырған автомобилдәрҙең күплеге. Хужаһыҙмы, әллә хужалары була тороп та "тимер ат"тарына ҡул һелтәгәндәрме, иллә мәгәр төрлө урында һибелеп ҡалған ошондай машиналар биткә сыҡҡан сөйәл ише. Шуға күрә уларҙы юҡ итергә бойороҡ булыуы тураһында ишетеп, ҡыуанып ҡуйҙым. Үҙенең хужалығында тәртип булыуына баҫым яһаусы кеше генә әлеге проблеманы күреп хәл итергә тотонор, тип күптән әйтә килдем. Ниһайәт, был көн килеп етте. Үҙебеҙ өйрәнеп бөтһәк тә, ситтән килеүселәрҙең күҙенә ошоноң кеүек сүп-сар бәрелеп бара ул.

Йыл да үткәрелеп килгән "Милли кейемдәр парады"н ҡалдырмаҫҡа тырышам. Ләкин "Беренсе ҡоймаҡ төйөрлө була" тиһәләр ҙә, тәүге ошондай парад иң оҡшағаны булды. Хәҙер был сараның сифатына иғтибарҙы икенсе планға күсереп, ҡатнашыусылар һанының әҙме-күпме булыуына ҡайтарып ҡалдыра баралар кеүек. Быйыл, мәҫәлән, амфитеатрға төшкән ҡатнашыусылар ҡәҙимге кейемдәге меңәрләгән кеше араһында юғалып ҡалды, костюмдарҙың матурлығы, сағыулығы бәҫһеҙләнде. Тәүге йылдағы кеүек өҫтә, Салуат Юлаев майҙанын тултырып милли кейемдә йөрөүселәр ҙә булманы тиерлек.

Баш ҡала халҡын ғына түгел, ә тотош республика һәм хатта сит илдән килеүселәрҙе үҙенә йыйған ҙур сараларҙа сәхнәгә сығасаҡ артистар халыҡ тарафынан хупланған булһын ине ул. Хәҙер социаль селтәрҙәр әүҙем эшләй, йәше-ҡарты интернет киңлектәрендә гиҙә. Шуға күрә ниндәй йырсы һәм төркөмдәрҙе күрергә теләүҙәре тураһында тамашалар алдынан һорауламалар алынһа, беҙ ҙә үҙебеҙҙең һүҙҙе әйтмәйенсә ҡалмаҫ инек.

Һуңғы йылдарҙа район һәм ҡала-ара маршруттарҙа елдереүсе таксистар күбәйҙе. Уларҙың эшмәкәрлеген, күп осраҡта, бер кем дә контролдә тотмай. "Юлдаш" һүҙе аҫтына йәшеренеп, ә ысынында такси булып йөрөүселәр юлда барғанда ҡулдарынан телефон төшөрмәйенсә кире ҡайтыуға пассажир эҙләү менән мәшғүл. Үҙҙәренең генә түгел, ә әллә нисә кешенең ғүмерен ҙур хәүеф аҫтына ҡуйыусыларға һүҙ ҙә әйтеп булмай, шул урында төшөрөп ҡалдырырға ла күп һорамаҫтар. Ошондай "эшҡыуарҙар"ҙың бизнесын күҙ уңынан ысҡындырмаһындар ине тейешле органдар. Элек беҙ райондан ике водителе булған автобустарҙа йөрөнөк. Улар бер-берeһен алмаштырып, ял итеп, бөтә иғтибарҙарын юлға төбәп кенә алып йөрөттө. Ошондай рейстарҙың тергеҙелеүе балаларыбыҙ өсөн хәүефләнеп ултырыуҙан азат итер ине беҙҙе.

Йәйҙәрен райондарҙа, ауылдарҙа "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар", "Шәжәрә" байрамдары кеүек осрашыуҙар, саралар үтеп тора. Эскеһеҙ үткән һабантуйҙарҙан өлгө алып, ошо байрамдар көнөндә лә спиртлы эсемлектәр һатыуҙы тыйыуҙы күптәр күтәреп алыр ине, моғайын. Ә магазин хужалары ниндәйҙер ҡарар көтөп ятмайынса, үҙҙәре ошондай инициативаны күтәреп сыҡһа, ниндәй шәп буласаҡ!

**Миңсара АБДУЛЛИНА.**
**Бөрйән районы.**

12+

✓ *Беҙ кешелеккә ирекле этник дәүләтселек һәм гуманлы этник империя өлгөһөн күрһәтеүсе милләт. Башҡорт дәүләтселегә һәм башҡорт империяһы беҙҙең милләттең милләт булараҡ ойошоу рәүешендә һәм маҡсатында ята.*



УЯН, УЙЛАН...

# БЕҘ СИТТӘН КИЛМӘНЕК,

## беҙҙең тамырҙарыбыҙ Уралда!



Беҙ, башҡорттар, был ергә ҡайҙандыр ситтән килмәнек. Тамырыбыҙ - ошонда. Йәнебеҙ, "Урал батыр" эпосында бәйән ителгәнсә, кешелек барлыҡҡа килгән мәлдә үк ошо ерҙә яралған. Ошо ерҙән моң, тел, һут, ҡот, бәрәкәт, ырыҫ алғанбыҙ. Ҡайһы берәүҙәр беҙҙе "ситтән килтерергә", ошо ерҙең килмешәге итеп күрергә теләй. Әйтергә кәрәк, был фараз еребеҙгә, йәнебеҙгә, тарихыбыҙға дәғүә итеүселәрҙең уйҙырмаһы, ҡотҡоһо, аҫтыртын уй-ниәте. Был, үҙенә күрә, һыбайлы һәм йәйәүле мөнәсәбәте сағылышы. Тарихы шулайыраҡ: бер мәл һыбайлы үҙ юлында йәйәүлене осратҡан, ти. Арыған һәм талсыҡҡан йәйәүле һыбайлынан үҙен атҡа менгәштереп алыуын үтенгән. Һыбайлы уны йәлләгән һәм эйәренән урын биргән, үҙенә ризыҡ биреп әүҡәтләндергән. Улар бергилке барғас, эйәрҙә иреккән элекке йәйәүле ат хужаһына: "Һин эйәрҙән төшөп, артабан йәйәү атла ла ҡуй, артабан мин бер үҙем барайым", - тигән белдереү яһаған. Кеше күңелле һыбайлы атынан төшөп, йәйәү атлаған һәм йәйәүлегә әүерелгән. Беҙҙе "ситтән килгән" тип иҫбатларға тырышыусы ла шул уҡ йәйәүле бит...

Беҙ, башҡорттар, халҡыбыҙ төрлө ырыуҙарҙан баш ҡорға ойошҡандан алып, үҙ дәүләтселегебеҙ булған милләт. Әммә беҙҙеңсә дәүләтселек төшөнсәһе үҙ дәүләтселеген төҙөгән башҡа ҡәүемдәрҙекенән ныҡ айырыла. Ни өсөн тигәндә, меңәр йылдар һуҙымында башҡорт милләте ике ҡитғаның төрлө төбәктәрендә йәшәүсе ҡәүемдәр һәм ҡәбиләләр вәкилдәренең Уралтауға, ундағы милләт ядроһын тәшкил итеүсе төп ырыуҙарға килеп ҡушылыуынан барлыҡҡа килгән. Ситтән килеүселәрҙе төрлө тәбиғәт катаклизмдары (Туфан һыуы ҡалҡыуы, боҙлоҡтар шыуышыуы, ҡара ҡыштар, йотлоҡтар), донъя һуғыштары Уралтауға, унда йәшәүсе боронғо көслө ҡәүемгә килеп һыйынырға мәжбүр иткән. Урындағылар уларға йәшәргә урын, ут-һыу бүлеп биргән. Үҙҙәрен һәләкәттән һаҡлап ҡалған ҡәүемгә рәхмәт йөҙөнән ситтән килеүселәр был ҡәүемдең телен, динен, йолаларын ҡабул иткән. Был процесс бик оҙайлы йылдар барған һәм һөҙөмтәлә башҡорт милләте формалашҡан, уның эсендә йөҙҙән ашыу ырыу барлыҡҡа килгән. Тағы ла шуныһы: милләт составына ингән һәр бер ырыуҙың ике ҡитғаның ҡайһылыр төбәгендә үҙ тамырҙары, дәүләте һәм милләте бар. Нисек кенә булмаһын, милләтебеҙ барлыҡҡа килеүенең нигеҙендә ҡасандыр кешелеккә янаған дөйөм бәлә ятыуын аңлауы ауыр түгел. Шулай булмаһа, ҡырылмаһа ҡырҡ төрлө ерҙән, ҡырҡ холоҡло ҡәүем, ҡәбилә вәкилдәре, үҙ ерҙәрен ташлап, нисек итеп Уралтауҙағы төп ҡәүемгә килеп һыйына һуң? Башҡорт (баш ҡор) һәм дәүләт һүҙҙәре бер үк мәғәнәгә эйә, уның һәр бер ырыуы - дәүләткә буйһоноусы субъект, кәрәк саҡта тиҙ генә ғәскәр туплап (ғәскәр төҙөү һәм уны үҙ иҫәбенә тотоу - дәүләтселек күрһәткесе), баш ҡорға ебәрә алыусы берәмек, дәүләттең айырым бер өлөшө, заманса итеп әйткәндә, штаты, өлкәһе...

Беҙ, башҡорттар, кешелеккә ирекле этник дәүләтселек һәм гуманлы этник империя өлгөһөн күрһәтеүсе милләт. Башҡорт дәүләтселегә һәм башҡорт империяһы, әйткәнебеҙсә, беҙҙең милләттең милләт булараҡ ойошоу рәүешендә һәм маҡсатында ята. Беҙ ике ҡитғаның әле был, әле икенсе еренән беҙгә килеп һыйыныусы ҡәүемдәрҙең береһен дә көслөк менән, янап йә ҡурҡытып үҙебеҙгә буйһондормағанбыҙ, үҙебеҙҙең милләттең бер өлөшө итмәгәнбеҙ. Башҡорт империяһы - кешелектең бер ҡорға ойошоуының идеаль этник империяһы өлгөһө. Был - кешелек тарихының үҙенсәлекле башҡорт империяһы феномены. Башҡорттоң бер ваҡытта ла ситтәрҙең еренә дәғүә итмәүен, баҫып алмауын да тап ошо фактор менән аңлатып булалыр. Беҙ кешелектең киләсәген тап шулай, милләттәрҙең ирекле рәүештә бер дәүләткә ҡушылыуы, империяға берләшеүе рәүешендә күрергә теләгәйнек. Дәүләтселектең һәм империяның был формалары кешелекте яҡты киләсәккә алып килер тип хыялландыҡ, әммә беҙ теләгәнсә килеп сыҡманы, кешелек бөтөнләй икенсе юлдан китеп, дәүләтселектең һәм империяның ҡоралды, ҡанлы юлын һайланы. Кем белә, бәлки, шуның өсөн дә беҙ башҡалар күҙлегенән бер ҡатлы булып күренәбеҙҙер...

Беҙ, башҡорттар, һаман да Аллаһы Тәғәлә беҙгә ошо бурыстарҙы йөкмәтеп яралтҡан асылыбыҙға тоғробоҙ. Үҙебеҙгә зыян килтерһә лә, шарран асыҡбыҙ, ихласбыҙ, иманға вә әхлаҡҡа хыянат итмәнек. Милләтебеҙ барлыҡҡа килеүенең төп маҡсаты - ирекле дәүләтселек һәм гуманлы империя сифатыбыҙға тоғробоҙ. Шуның өсөн дә беҙҙең башҡаларға ҡарата толерантлы булыуыбыҙға донъя һөмһөҙҙәре тарафынан бер ҡатлылыҡ йә сараһыҙлыҡ тигән ярлыҡ тағылалыр. Дөрөҫ әйтте Владимир Владимирович Путин, беҙҙә Рәсәй "бер тамсыла" кеүек сағыла, әммә ул һүҙен әйтеп бөтмәне: беҙҙә Рәсәй генә түгел, кешелектәге милләттәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтенең идеаль формаһы бер тамсыла кеүек сағыла. Шуның өсөн дә Аллаһы Тәғәлә беҙҙе ошо ерҙә яралтып, ошо ерҙең генә түгел, кешелектең яҙмышы өсөн оло яуаплылыҡ тойғоһо ла һалған. Американы азатлыҡ иле тиҙәр, тик унда бәхет эҙләп барып, үҙ асылын юғалтыусы "американлылар" бәхетлеме икән? Ай-һай...

Беҙ, башҡорттар, башҡа дәүләттәр һәм милләттәр менән һәр саҡ килешеү нигеҙендә мөнәсәбәт ҡорҙоҡ, Рус дәүләте менән төҙөгән килешеүгә һәр саҡ тоғро ҡалдыҡ. Улай ғына ла түгел, Рәсәй именлегенә ситтәр ҡурҡыныс менән янағанда һәр ваҡыт башҡорт һыбайлыһы алғы сафта барҙы. Был беҙҙең берҡатлылыҡҡа яҡын антҡа тоғролоҡ сифатыбыҙ түгел. Ғөмүмән, башҡорттар һундар, Туран дәүләте, Дәште Ҡыпсаҡ, Алтын Урҙа, Рус батшалығы, Рәсәй, Советтар Союзы ғәскәрҙәре сафында һуғышып, иң беренсе нәүбәттә үҙ милләтен, Уралтауҙы һаҡлауҙы маҡсат итеп ҡуйған...

Беҙ, башҡорттар, донъя һөмһөҙҙәренең үҙ именлегебеҙгә хаяһыҙ мөнәсәбәтен күтәрә алмайынса, күп тапҡырҙар ихтилалдарға күтәрелеп, һуңғы сиктә XX быуат башында тағы ла ҡулыбыҙға ҡорал алып, донъяның рәсми даирәләре талап иткән формалағы дәүләтселегебеҙҙе төҙөргә мәжбүр булдыҡ һәм бының Рус дәүләтселегендәге күп кенә халыҡтарға үҙ автономияһын төҙөүгә, һуңғы сиктә Рәсәй Федерализмына юл һалдыҡ. Башҡорт милләтенең һәм ул халыҡтарҙың ирке өсөн миллионлап башҡорт аҫылдары башын һалды. Аллаһы Тәғәлә беҙгә ошо бурыстарҙы йөкмәтеп яралтҡан асылыбыҙға әле лә тоғробоҙ, беҙҙең өҫтән ошо ер һәм кешелек өсөн яуаплылыҡ төшмәгән. Төшмәҫ тә. Шуның өсөн дә Башҡортостаныбыҙҙың һәм кешелектең яҡты киләсәге хаҡында һөйләшер өсөн донъя башҡорттарының Бишенсе ҡорона йыйылдыҡ...

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Австрияла Башҡортостан Республикаһы көндәре уҙҙы. Рәсми делегацияны Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров етәкләне. Сәфәрҙең эшлекле программаһында Австрияның власть һәм бизнес вәкилдәре менән эшлекле осрашыуҙар, төбәктең инвестиция ҡеүәте менән таныштырыу, шулай уҡ уңайлы ҡала мөхитен булдырыу өлкәһендә тәжрибә алмашыу ҡаралғайны. Австрия баш ҡалаһының Музей кварталында һабантуй үтте, байрам этно-шоу һәм Башҡортостандың сәнғәт оҫталары концерты менән тамамланды.

✓Башҡортостанда республика Башлығы гранттары конкурсы иғлан ителде. 2019 йылдың 1 июленән 12-һенә тиклем гранттар конкурсының һанлы платформаһында ҡатнашыуға ғаризалар ҡабул ителә. Субсидиялар формаһындағы грант граждандлыҡ йәмғиәтен үҫтереү өсөн бирелә. 2019 йылдың 15 июленән 19-ына тиклем конкурс комиссияһы ғаризаларҙың конкурс шарттарына тап килеү-килмәүен тикшерә. Тулыраҡ мәғлүмәт - Башҡортостандың Йәмғәт палатаһы сайтында.

✓Республика етәксеһе Радий Хәбиров Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетына Өфө тимер юл вокзалын төҙөкләндереү өсөн республика ҡаҙнаһынан 94,8 миллион һум бүлергә ҡушты. Йыл аҙағына тиклем вокзалдың иҫке бинаһының нигеҙен һәм конструкцияларын нығытыу, лифттарҙы, елләтеү һәм электр менән тәьмин итеү системаларын монтажлау күҙаллана. Өфө вокзалын төҙөкләндереү 2004 йылда башланды. 2021 йылда баш ҡаланың тимер юл вокзалын тулыһынса ремонтлау планлаштырыла.

✓Өфөлә Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының элекке рәйесе Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллин 73-сө йәшендә арабыҙҙан китте. Ул 1992 йылдан алып Башҡортостан мосолмандарының Диниә назаратына етәкселек итте. Быйыл 29 апрелдә Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты президиумы ултырышында Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллин рәсми рәүештә мөфтиәт башлығы вәкәләттәрен һалды. Хәҙер республикала 1 300 мосолман мәхәлләһенең 737-һе Башҡортостан мосолмандарының Диниә назаратына ҡарай.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*БЫЛ АЙҘА…*

# ТӘБИҒӘТТЕҢ ЯМАН КӨНӨ ЮҠ

**Йәй уртаһы июль, йәки боронғо атамаһы буйынса майай, ямғырлы, ләкин йылы килер, тип фаразлай метеорология хеҙмәте. Уртаса һауа температураһы 25-27 градус тирәһендә тирбәләсәк, тип вәғәҙәләй улар.**



Һөтайҙың (июнь) берсә көҙгө һыуыҡтарҙы хәтерләтеп, берсә селлә "табаһында" ҡыҙҙырғылап, тотороҡһоҙлоғо менән аптыратыуына ҡарағанда, ғөмүмән, быйылғы йәйҙең холоҡ-фиғелен алдан фаразлау ышанысһыҙ ғәмәл булыр ине. Былтырғы ҡоролоҡ арҡаһында тиҫтә ярым районда уңыштың юҡҡа сығыуынан килгән зыян хаҡында иҫтә тотоп, унан ҡала быйыл да ҡайһы бер районларҙың ямғырһыҙ ҡорғаҡһыған ерҙәрен күҙҙә тотоп, июлдең ямғырлы булыуына һөйөнөргә кәрәк тә һымаҡ, тик был осорҙа яуын-төшөмдөң мал аҙығы әҙерләү, бесән сабыу кеүек көнүҙәк ауыл хужалығы эштәренә аяҡ салыуын шулай уҡ аҡыл ҡабул итә алмай. Үкенескә, "һауа кәнсәләре" беҙҙең теләккә ҡарап тормай, уның үҙ тәртибе, үҙ фәлсәфәһе. Билдәле бер йырҙа йырланғанса, "тәбиғәттең яман көнө юҡ", ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, һәр көнөбеҙҙе рәхмәтле ҡабул ҡылайыҡ. Боронғо атамаһына ғына иғтибар итәйексе: майай тыуа бит. Ауылдарыбыҙҙың уңған хужабикәләре тәпән-тәпән май йыйыр, ҡышҡылыҡҡа бол туплар мәл генә.

Был айҙың иҫтәлекле көндәрен барлағанда ла һәр бер айға хас булғанса, байтаҡ матур ваҡиғалар, теге йәки был һөнәр эйәләре көндәре күҙгә салына. Хәрби хәрәкәттәр ветерандары (**1**) көнө менән башланып китә лә айыбыҙ. Башҡорт эскадроны ойоштороу хаҡында 1874 йылғы батша указының 145 йыллығы (**6**) датаһына иғтибарыбыҙҙы килтереп ялғай. Хәйер, Рәсәй хәүефһеҙлеген һәм иркен яҡлап һәр дайым яуға күтәрелер булған башҡорттарҙың үҙ атлы ғәскәре даны был датанан күпкә элегерәк тә яҡшы мәғлүм. Мәле, яйы сыҡҡанда ғына түгел, ә даими рәүештә башҡорт тарихы менән ҡыҙыҡһыныуға, уның һәр бер тарихи датаһын өйрәнеүгә ынтылыш тыуҙырһа ине был дата. Артабан ай календарындағы Ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнө (**8**) беҙҙең иғтибарҙы йәлеп итә. Ошо уҡ көндә "Герой Әсә" исеме менән "Әсәлек даны" ордены, шулай уҡ әсәлек даны миҙалдары булдырылыуҙың 75 йыллыҡ юбилейы билдәләнә. Әйткәндәй, беҙҙең республикала 25 Герой Әсә йәшәгән бер ауыл барлығы хаҡында интернет-гәзиттә хәбәр ителгәйне. Ейәнсура районы Иҙәш ауылы хаҡында булып сыҡты ул хәбәр. Ысынлап та, был ауылда элек-электән татыу һәм ҙур ғаилә традицияһы һаҡланып килә. Унда өсәүҙән дә кәмерәк бала тәрбиәләгән ғаиләләр бик һирәк, тиҙәр. Иҙәш халҡының ғаилә ҡиммәттәрен Башҡортостаныбыҙҙың башҡа ауылдарына ла таратыу бик маҡтаулы эш булыр ине. Был айҙа шулай уҡ ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре (**3**), Кооперация (**6**), Башҡорт авиацияһы (**7**), Рәсәй почтаһы, шулай уҡ Балыҡсы (**14**), Этнограф (**17**), Халыҡ-ара шахмат (**20**), Сауҙа хеҙмәткәрҙәре (**27**), Халыҡ-ара дуҫлыҡ (**30**) һәм башҡа байтаҡ иҫтәлекле көндәр билдәләнә.

**Июлдә тыуғандар:**

**3** - юрист, 2000-2003 йылдарҙа БР прокуроры, Башҡортостандың атҡаҙанған юрисы **Йәүҙәт Торомтаев**ҡа **- 70 йәш** (1949).

**16** - табип-офтальмолог, "РИА "Медоптик" офтальмология үҙәге директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы **Рәшит Искәндәров**ҡа - **60 йәш** (1959).

**16** - хирург, медицина фәндәре кандидаты, Ғ.Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының ҡан тамырҙары бүлеге мөдире, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы **Әмир Хәмитов**ҡа - **60 йәш** (1959).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*БАШ ҠАЛАМ*



**Республикабыҙҙың баш ҡалаһына көн дә ситтән меңәрләгән кеше килә. Уларҙың Өфө тураһындағы фекере күп төрлөлөгө менән айырыла. Бөгөн баш ҡалабыҙ тураһындағы уй-фекерҙәре менән Удмурт Республикаһының Ижевск ҡалаһынан Гөлнара Сафиуллина бүлешә.**

# ТАҒЫ ЛА БЕР КИЛӘСӘКМЕН!

- Мин Өфөгә башҡорт милли аш-һыуы менән танышырға, урындағы белгестәрҙән уларҙы әҙерләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре алырға килдем. Үҙем руль артында булғас, тәү сиратта ҡалалағы юлдарҙың торошона иғтибар иттем. Беҙҙән айырмалы рәүештә, машина юлдары һәйбәт кенә. Ләкин йәйәүлеләр өсөн тәғәйен тротуарҙарҙың күбеһе тиҙ арала йүнәтеү эштәрен көтөүен күрмәйенсә мөмкин түгел. Үҙәк урамдарҙа тротуарҙың асфальт түшәме ҡупмаған, биҙәкле плиталар ҙа шылмаған, йәғни атлап йөрөү өсөн яйлы. Ә ҡала ситендә йәшәүселәр өсөн бындай уңайлыҡтар юҡ дәрәжәһендә. "Өфө кордоны" биҫтәһендә булырға тура килде. Унда иһә автобус туҡталышынан һуң өйҙәргә илткән юл автомобиль өсөн дә, йәйәүлеләр өсөн дә - бер. Ҡойоп яуған ямғырҙар ваҡытына тура килеү сәбәпле, бында йәшәгән һәм йәйәү йөрөгәндәр өсөн ни тиклем михнәтле икәнен үҙ күҙем менән күрҙем. Машина юлынан барырға мәжбүр булыуҙары, беренсенән, хәүеф тыуҙыра. Икенсенән, автомобиль тәгәрмәсе аҫтынан сәсрәгән һыуға ҡойоноп тороп ҡалалар. Был хәл, моғайын да, ҡала хакимиәте тарафынан контролгә алынғандыр, тип уйлайым, сөнки үҙенең кешеләре тураһында ҡайғыртмаған ҡала ҡунаҡтар өсөн дә күркәмлеген юғалта ул.

Урамдар киң, матур, ләкин күп урында урамдың исемен һәм йорттоң һанын күрһәтеүсе билдәләр юҡлығы аптыратты. Миллионлаған ҡала өсөн был ҙур хата, минеңсә, сөнки улар төрлө йомош менән килеүселәргә аҙашмайынса йөрөргә мөмкинлек бирә. Белеүемсә, республикала ике дәүләт теле. Ләкин исемдәре күрһәтелгән күпселек урамдарҙың башҡортса атамаһын күрмәнем.

Дим биҫтәһендә үҙемде совет заманы осорона барып эләккән кеүек тойҙом. Ундағы ҡайһы бер магазиндарҙың, башҡа төрлө объекттарҙың исемдәре нәҡ элекке осорҙағы биҙәлештә ҡалған. Йәшлек саҡтарыма ҡайтып әйләнгәндәй булдым был биҫтәлә. Айырыуса, Маяковский урамындағы биналарҙың үткән быуатта тороп "ҡалыуы" ап-асыҡ күренеп тора. Был, бәлки, кемгәлер оҡшамайҙыр, ә миңә урындағы етәкселектең заманса ялтыр-йолторға үҙгәртмәйенсә, йорт фасадтарын элеккесә ҡалдырыуы оҡшаны.

Милли аш-һыу менән ҡыҙыҡһынған кеше буларaҡ, ошо йүнәлештә эшләүсе ашхана, кафе һәм рестарандарҙың бик әҙ булыуын билдәләр инем. Шаурма, ҡамыр эсендәге сосиска һәм башҡа ошондай сит-ят ашамлыҡ тәҡдим иткән урындар йыш осрай, ә урындағы халыҡтың ҡамырҙан эшләнгән аш-һыуын һатыусылар булһа ла, бик әҙ күренде миңә. Ҡымыҙ һәм буҙа кеүек милли эсемлектәрҙе тәмләттеләр. Магазин кәштәләрендә ҡымыҙҙы ғына күрҙем. Ә буҙаны бөтөнләй һатмайҙар ҙа икән. Уны етештереп тәҡдим итеүсе үҙенең һатып алыусыһын табыр ине, тип уйлайым.

Ғөмүмән алғанда, Өфө миндә бик яҡшы тәьҫораттар ҡалдырҙы. Дуҫтарыма һәм туғандарыма был ҡалаға һәм республикаға килеп, күреп ҡайтыуҙарын мотлаҡ кәңәш итәсәкмен. Өфөнө генә түгел, ә тотош республиканы яйлап йөрөп сығыр өсөн тағы ла юлым төшөр, тип өмөт итәм. Башҡортостан халҡына именлек теләйем.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Төбәк Үҙәк һайлау комиссияһына Башҡортостан башлығы вазифаһына кандидаттарҙан документтар тапшырылды: "Берҙәм Рәсәй"ҙән - Радий Хәбиров, "Рәсәй пенсионерҙары партияһы"нан - Владимир Кобзев, КПРФ-тан - Юнир Ҡотлоғужин, ЛДПР-ҙан - Иван Сухарев, "Ғәҙел Рәсәй"ҙән - Юрий Игнатьев, "Яблоко" партияһынан - Зөлфиә Ғайсина, "Рәсәй патриоттары"нан - Рәфис Ҡадиров, "Йәшелдәр" партияһынан - Сания Тимасова.

✓Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһы ултырышында "Башинформ" акционерҙар йәмғиәтенең директорҙар советы рәйесе Ростислав Мырҙағолов йәшерен тауыш биреү юлы менән Башҡортостан Республикаһының Рәсәйҙең Йәмәғәт палатаһы ағзаһы итеп һайланды.

✓Яңғын йәнәтенән хәүефле миҙгел башланғандан алып Башҡортостанда бөтәһе 1664,7 гектарҙан ашыу майҙанда 123 урман яңғыны теркәлгән. Башҡортостандың 11 районында - Әбйәлилдә, Баймаҡта, Бәләбәйҙә, Бөрйәндә, Йылайырҙа, Күгәрсендә, Көйөргәҙелә, Мәләүездә, Стәрлебаша, Учалыла һәм Федоровкала юғары, дүртенсе класлы яңғын хәүефе көтөлә.

✓5 июндән 60 йәштән өлкән пассажирҙарға алыҫ араға йөрөгән поездарҙа биш процент ташлама менән юл йөрөү документтары һатыла башлай. Купе вагондарына махсус тариф буйынса билет алырға мөмкин, тип хәбәр иттеләр компанияның матбуғат хеҙмәтенән. Ташламалы билет 2 сентябрҙән 25 декабргә тиклем дәүләт эсендә йөрөгән поездарға һатыла. Электрон билет һатып алғанда пассажирҙың паспорт мәғлүмәттәрен һәм тыуған көнөн яҙғандан һуң автоматик рәүештә ташлама яһала.

✓Башҡортостандан ер һөрөү буйынса VIII Асыҡ Рәсәй чемпионатында Мәләүез районынан Илдар Ишекәев, шулай уҡ Стәрлетамаҡ районынан Римир Ғиззәтуллин, Бәләбәй механизациялау һәм электрлаштырыу колледжын тамамлаған Дарья Тураева ҡатнаша. Ер һөрөү буйынса Асыҡ Рәсәй чемпионаты һөҙөмтәләре 29 июндә енеүселәрҙе бүләкләү тантанаһында иғлан ителә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

**"Ҡыҙым, һин гәзиттә эшләйһең бит әле? Бер йомош бар ине..." Ҡырҡмаһа ҡырҡ эшемдә ҡуйып, бөтөн иғтибарымды һорау биргән ағайға йүнәлттем: "Тыңлайым". "Бына мин сүп реформаһы буйынса уйланып, уйҙарымдың осона сыға алмайым: сүп йыйыу һауыттарын ауылдың бер осона ғына урынлаштыралар, тиҙәр. Мин уның бер осонан икенсе осона сүп күтәреп йөрөргә тейеш буламмы инде? Шуға балаларҙан ҡалған иҫке коляскаға тейәп, ауыл буйлап этеп алып китеп барғанымды гәзиткә төшөрөп ебәрәйемме икән тигәйнем..."**

# БУЛМАНЫ БЫЛ...

Май байрамдарына ҡайтҡанда тыуған ауылымда шундай һөйләшеү булды. Властар үҙҙәре үк белдереүенсә, сүп-сар реформаһы аҙағынаса уйлап еткерелмәгән сара булып тора һәм әле үк халыҡ алдына бер-бер артлы башваткыстарын өйә генә. Эйе, ҡала халҡы өсөн ул проблема тыуҙырмай, сөнки бында ихата һайын контейнерҙар ҡуйыла һәм улар көн һайын түгелеп тора. Ә ауылда контейнер майҙаны бер урамдың бер осона ғына ҡуйылһа, ауылдың оҙонлоғо 2,5 - 3 километр тәшкил итһә, ололар сүпсар һөйрәп, шунда йөрөргә йәки арба этергә тейеш буламы? Хәйер, ауылда әлләни артыҡ сүп-сар ҙа юҡ инде ул, шуға ҡарамаҫтан, ай һайын 35 һумыңды сығарып һалырға тейеш булаһың, түләмәйһең икән - ике мең штраф!

Реформа тыуҙырған икенсе проблема - квитанцияларҙа күптән инде мәрхүм булған кешеләрҙең дә иҫәпкә алыныуы. Нәҡ Николай Гоголдең "Үле йәндәр" әҫәрендәгесә килеп сыға! "Экологик һалым алғас, бәлки, пенсияларын да бирәләрҙер?" - тием, бынан 9 йыл самаһы элек вафат булған атайым өсөн түләү килгәнен белгәс. "Эйе, бирҙеләр, ти. Минутысекунды менән компьютерға индереп ҡуялар!" "Хәҙер квитанцияла күрһәтелгән сумманы түләйһегеҙме инде?" - тип ҡыҙыҡһынам. "Юҡ. Һорауҙар, аңлашылмаусылыҡтар килеп тыуһа, ҡайҙа мөрәжәғәт итергә адрес күрһәтелгән, шунда барҙым, - ти инәйем. - Унда, исемлекте беҙ тәҙөмәйбеҙ, ауыл советтары төҙөй, әлегә түләмәй торoғоҙ, тип яҙып алып ҡалдылар. Ауылға ҡайтҡас, ауыл советына барып, "Кем тере, кем үле икәнен дә белмәйһегеҙме әллә?" тип дәғүәмде белдерҙем. Ауыл хакимиәтендә аңлатыуҙарынса, исемлекте Өфөнән ебәрәләр икән..." Ҡыҫҡаһы, эт - эткә, эт ҡойроҡҡа япһара, әммә берәү ҙә ғәйепле түгел. Ә ауыл халҡы, гәҙәттә, мәсьәләне хәл итеү юлында йөрөп-йөрөп ҡарай ҙа, һуынан ҡул һелтәп ҡуя. Даими юлда йөрөү ҙә кеҫәгә һуға, ошо 35 һумдан әллә нисәмә тапҡыр артыҡ аҡса сығып китә... Ә был "үле йәндәрҙе" исемлеккә индереүселәргә ҡулай, юҡҡа ғына был хаҡта һүҙ сығыу менән ошо эштең башында тороусыларҙы "сүп-сар королдәре" тип нарыҡламанылар. Уйлап ҡараһаң, 35 һум ҙур сумма түгел, әммә бер йылда 420 һум йыйыла. Республика буйынса 1000 "үле йән"дән ай һайын 35 һум килеп торһа, йылына был сумма 420 мең һумға барып баҫа! Исемлеккә инеп тә түләмәгән өсөн 2 мең һум штраф түләүгә ҡарағанда, әлбиттә, 420 һум түләү уңайыраҡ, әммә ил кимәлендә уйлап ҡараһаң, ул миллиондарға әйләнә...

Шулай уҡ сүп-сарҙы полигондарға алып барыу графигы буйынса ла һорауҙары күп ауыл халҡының: машиналар аҙнаһына нисә көн килергә тейеш? Урынлы һорау, сөнки Өфө районы Шамонино ауылында йәшәүселәр, баш ҡалаға яҡын булһалар ҙа, был проблеманы һаман хәл итә алмай. Сүп-сар йыйыу майҙансығы башта ауылға ингән урындағы юл сатында булып, ундағы сүп-сар тирә-яҡҡа туҙып, халыҡ дәғүә белдерә башлағас, хәҙер машиналар урамдар буйлап йөрөп, өй алдарындағы һауыттарҙан (шулай итмәһәң, урамда ҡалдырылған сүп-сар тоғон эт-ҡош туҙҙыра) йыйып алырға тейеш. Ләкин күп осраҡта улар алынмай. Ә инде ошо юлдар авторы шәхсән ундай машинаның үткәнен дә күргәне юҡ, аҡсаһын түләнә лә, сүп тә түккәне юҡ, шулай ҙа ай һайын 70 һум китеп тора...

Шундай етешһеҙлектәр булыуға ҡарамаҫтан, реформаторҙар тағы ла сумманың бәләкәй булыуы һәм уның арттырылырға тейешлеге хаҡында һүҙ башланы. Әлбиттә, ауылдарға сүп-сар артынан йыш йөрөй башлаһан, яғыулыҡ материалдарына сығымдар ҙа арта, ә уны кемдер ҡапларға тейеш һәм таяҡтың ауыр башы тағы ла халыҡ елкәһенә төшә. Ҡыҫҡаһы, һәр ваҡыттағыса, алдан планлаштырылмаған һәм уйланылмаған эш башланды, ә уны нисек хәл итергә - әлегә аныҡ ҡына берәү ҙә белмәй. Черномырдин әйтмешләй, яҡшыраҡ булыуын теләгәйнек, һәр ваҡыттағыса килеп сыҡты...

Шәрифә САЛАУАТОВА.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КӨРӘШСЕГӘ - АВТОМОБИЛЬ



**22 июндә инвестиция һабантуйының эшлекле өлөшө Сибайҙа уҙҙы. Сараның төп маҡсаты - төбәккә инвестициялар йәлеп итеү. Унда 11 илдең вәкиле, дөйөм алғанда, 1,5 мең самаһы кеше ҡатнашты.**

23 июндә күләмле форумда ҡатнашыусылар Башҡортостан халыҡтарының йолалары һәм гөрөф-ғәҙәттәре менән яҡындан танышыу өсөн Әбйәлил районына һабантуйға юлланды. Республика Башлығы призына милли көрәш буйынса турнир сағыу байрамдың төп биҙәге булды. Башҡортостандан тыш, Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән, шулай уҡ Ҡырғыҙстандан һәм Тажикстандан иң көслө көрәшселәр Әбйәлил еренә йыйылды. Еңеүсегә республика Башлығынан төп бүләк - "Лада Веста" автомобиле.

Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Һабантуйҙа танылған Голливуд актеры, хәрби сәнғәт мастеры Стивен Сигалға милли көрәш буйынса оҫталыҡ дәресе күрһәтте. Актер һүҙҙәренсә, был "уның элек таныш булмаған берҙән-бер көрәш төрө". Радий Хәбиров уға милли көрәштең бер нисә алымын күрһәтте.

Турнирҙың баш судьяһы, көрәш буйынса Башҡортостандың баш тренеры Ирәндек Байназаров билдәләүенсә, бәхәсле мәлдәр, судьяларҙың эшенә ҡәнәғәтһеҙлек белдергән спортсылар булманы. Барыһы ла юғары кимәлдә үтте. Республика Башлығы призына турнирҙа 60, 70, 80, 90, 100 килограмға тиклемге һәм унан ашыуыраҡ ауырлыҡ категорияларында алты кеше еңеүсе булды. Улар араһында автомобилде лотереяләғы кеүек уйнаттылар. Ауырлыҡ категорияһы яҙылған кубиктарҙы лототронға һалып әйләндерҙеләр. Радий Хәбировтан аҡ "Лада Веста" Өфөләге 14-се спорт мәктәбенең грек-рим көрәше буйынса тренеры Илфаҡ Ибәтуллинға тапшырылды.

# ӘЙҘӘГЕҘ, КОНКУРСҠА!

**Республикала рәсми рәүештә "Башҡортостан лидерҙары" кадрҙар проекты старт алды. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ошо хаҡтағы Указға ҡул ҡуйҙы.**

Документта әйтелгәнсә, проект "граждандарҙың идара итеү ҡеүәтен асыҡлау һәм үҫтереү, шулай уҡ дәүләт власы һәм урындағы үҙидара органдарын, ойошмаларҙы, предприятиеларҙы кадрҙар менән тәьмин итеү сифатын арттырыу маҡсатында" булдырыла. Проект ике бүлектән тора. "Идара итеү командаһы 2020-2025" конкурсы идара итеү тәжрибәһенә эйә булған 25-45 йәшлектәргә йүнәлтелгән. Был конкурс 17 июндән 5 сентябргә тиклем бара, проекттың сайтында 11 июлгәсә теркәлергә мөмкин. Икенсеһе - "Башҡортостан Республикаһының йәш лидерҙары" конкурсы 18-35 йәшлек кадрҙарҙы табыуҙы маҡсат итеп ҡуя, ул 17 декабргә тиклем бара, теркәлеү ваҡыты - 12 июлдән 1 августҡа ҡәҙәр. Ҡатнашыусылар алдында ситтән тороп тарих, география, рус теле, шулай уҡ мәҙәниәт һәм урындағы гөрөф-ғәҙәттәргә бәйле һорауҙарға яуап биреү бурысы тора.

Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте етәксеһе, ошо конкурстың күҙәтеү советы башлығы Александр Сидякин хәбәр итеүенсә, "Башҡортостан лидерҙары" конкурсына бер аҙнала 3500 кеше теркәлгән дә инде. Анкета биреүселәрҙең күпселеге - 97 проценты - Башҡортостанда йәшәүселәр. Башҡа ҡалалар, шул иҫәптән Мәскәү вәкилдәре лә бар. Әлеге ваҡытта ҡатнашыусыларҙың 85 проценты - ир-егеттәр. Республика Башлығы Хакимиәте етәксеһе ҡатын-ҡыҙҙарҙы конкурста әүҙемерәк ҡатнашырға саҡыра. "Конкурс асыҡ булырға тейеш, - ти Александр Сидякин. - Финал тура эфирҙа була. Ләкин иң мөһиме - еңеүселәр, 100 кеше, етәксе эштәргә тәҡдимдәр алырға тейеш".

# АЙЫҠ БАЙРАМДАР

**Башҡортостанда һабантуйҙарҙың күпселеге уҙып бөттө, быйылдан улар республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың тәҡдиме менән хәмерһеҙ үткәрелде. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай спиртлы продукцияны көйләү тураһындағы законға тейешле төҙәтмәләр индерҙе.**

"Коро" һабантуйҙарға тәүге йомғаҡ яһап, республика парламенты спикеры Константин Толкачев хәмер һатыуҙан баш тартыу байрамдарҙың күңелле үтеүенә йоғонто яһамауын билдәләне. "Унан тыш, Өфөлә, мәҫәлән, яңы сикләүҙәргә ҡарамаҫтан, һабантуй көнөндә Ҡала көнө һәм "Евразия йөрәге" фестивале киң ҡолас менән үтте, - тип яҙҙы Константин Толкачев "Фейсбук"тағы сәхифәһендә. - Республика халҡы яңы норманы ыңғай ҡабул итте. Ул хәүефһеҙлеккә яҡшы сағылыш тапты. Һабантуй көндәрендә ниндәйҙер хәл-ваҡиғалар, йәмәғәт тәртибен боҙоуҙар теркәлмәне. Бәлки, ошо тәжрибәне күмәк халыҡ ҡатнашлығындағы башҡа байрамдарға, шул уҡ ҡалалар һәм ауылдар көндәренә таратыу тураһында ла уйларбыҙ". Дәүләт Йыйылышы рәйесе билдәләүенсә, Башҡортостанда шулай уҡ Йәштәр көнөндә, Белем көнөндә, Һунгы ҡыңғырау байрамында һәм көн һайын киске сәғәт 10-дан иртәнге 10-ға тиклем спиртлы эсемлектәр һатыу тыйыла.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓53-сө йәйге Халыҡ-ара балалар уйындары башланырҙан ике аҙна элек Өфөнөң "Ватан" этно-паркында заманса скалодром ҡуйҙылар. Ул тиҙлеккә, ҡатмарлылыҡҡа үрмәләү өсөн 15 һәм 16-метрлыҡ диуарҙан тора. Тәүге ярыштар, теҙмәгә ярашлы, 11 июлгә билдәләнгән. Өфөлә Йәйге Халыҡ-ара балалар уйындары 9 июлдә башлана һәм 14 июлгә тиклем дауам итә. Башҡортостандың баш ҡалаһына Австралия, Канада, АҠШ, Ҡытай Халыҡ Республикаһы, Мексика, Бөйөк Британия, Швейцария һәм башҡа илдәрҙең ҡалаларынан 1500-ҙән ашыу йәш спортсы килә. Уйындар Халыҡ-ара Олимпия комитеты булышлығында уҙғарыла.

✓Мәғариф министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, рус теленән Берҙәм дәүләт имтиханын йөҙ балға яҙыусылар алтау. Әлеге ваҡытта бер нисә имтихан йомғаҡтары буйынса Башҡортостанда йөҙ балға яҙылған 88 эш иҫәпләнә. Географиянан - 3 кеше, әҙәбиәттән - 2, профилле математиканан - 18, химиянан - 29, тарихтан - 5, рус теленән - 6, физиканан - 25. Улар араһында ике тапҡыр йөҙ балл алыусылар бар.

✓2019 йылда Башҡортостанда 230 табип эшкә йәлеп ителгән, уларҙың 80-е - беренсел звено табиптары. Медицина хеҙмәткәрҙәрен йәлеп итеү өсөн Башҡортостан райондарында торлаҡ бирелә. Иң яҡшы тәжрибәләр араһында Һаулыҡ һаҡлау министрлығы Бөрө һәм Дәүләкән (етешәр табип), Ғафури (6), Баҡалы (4), Балтас, Мишкә райондарын һәм Октябрьский ҡалаһын (3) билдәләне. Шулай уҡ Бөрйән һәм Әлшәй райондарында ер участкалары бирелгән (өсөшәр белгес).

✓Өфөлә "Башнефть" компанияһының яғыулыҡ ҡойоу станцияларында бензин һәм дизель яғыулығы йәнә ҡимәтләнде. Әйтәйек, АИ-92 маркалы бензиндың бер литры 25 тингә артты һәм бөгөндән 41,40 һум тора. Atum-92 15 тингә ҡиммәтләнде - бер литры 42 һум. Atum-95 маркалы бензиндың хаҡы 25 тингә күтәрелеп, 44,45 һумға етте. Дизель яғыулығының хаҡы 15 тингә артты. Хәҙер автомобиль хужаларына дизель яғыулығының бер литры 45,10 һумға төшә.

✓Республиканың Көйөргәҙе районында 29-30 июндә Хәрби хәрәкәт ветерандары көнөнә арналған "Хәрби батырлыҡ" дуҫтарын йыя - 2019" фестивале уҙғарыла.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# КАРТА ҺАТЫП АЛ ДА...

**Башҡортостанда 24 июндә "Алға" бирҙәм транспорт карталары һатыуға сыкты. Улар 1 июлдән "Башавтотранс" һәм шәхси компанияларҙың, шул иҫәптән ҡала яңы автобустарында, трамвайҙарҙа һәм троллейбустарҙа ҡабул ителә.**

"Транспорт сәғәте"ндә Башҡортостандың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты етәксеһе Тимур Мөхәмәтйәнов хәбәр итеүенсә, 1 июлгә - 2 мең, 1 авгусҡа - 3,5 мең, 1 сентябргә 5,5 мең автобус һәм маршрутка карталарҙы хеҙмәтләндереү терминалдары менән йыһазландырыла. Дөйөм республика паркында бөтәһе 7,1 мең пасссажир транспорты бар. "Алға" картаһын автобустарҙа, "Өфө-Матбуғат" киосктарында, Һаҡлыҡ банкы бүлексәләрендә, түкталыштарҙағы хеҙмәтләндереү пункттарында, "Байрам", "Башспирт", "Альдо", "Батыр" магазиндарында 50 һумға һатып алырға мөмкин. 1 сентябрҙән "сәғәтлек" тариф тип аталған тариф селтәре индерелә, уның буйынса бер сәғәт эсендә яңы билет һатып алмайынса, бер нисә тапҡыр күсеп ултырырға мөмкин. Өфөнөң үҙенсәлеген иҫәпкә алып, был тариф "сәғәт ярымлыҡ" була. Бер тапҡыр ҡуллана торған, айлыҡ, йыллыҡ карталар ҡаралған. Карта тотош төбәктә ғәмәлдә була. Мәҫәлән, республикала йәшәүселәр, Өфөгә килгәс, үҙҙәренең картаһынан файҙалана ала, һәм - киреһенсә. "Алға" картаһы менән юл хаҡы ҡулаҡсаға ҡарағанда арзанырак төшә.

# ҠЫҪҠАРТЫЛМАЙ

**Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарына федераль бюджет иҫәбенә 10 191 абитуриент ҡабул ителә, ә киләһе уҡыу йылына бюджет урындары һаны 1073-кә арта. Иң күп өҫтәмә урындар Башҡорт дәүләт университетына - 574, Өфө дәүләт нефть техник университетына - 294, Өфө дәүләт авиация техник университетына бүленә - 185. Ҡыҫҡартыу хаҡында һүҙ бармай.**

Ошо көндәрҙә киң мәғлүмәт сараларында хөкүмәттең Федераль Йыйылышҡа докладына һылтанма менән мәғариф өлкәһендәге сәйәсәт тураһында мәғлүмәт баҫылды. Белдереүгә ярашлы, 2024 йылға бюджет урындары һаны быйылғы йыл менән сағыштырғанда 17 процентҡа ҡыҫҡартылырға тейеш (бөгөн улар 518,4 мең). Дәүләт Думаһының мәғариф һәм фән буйынса комитет башлығы Вячеслав Никонов был мәғлүмәтте кире ҡаҡты. Бөгөн илдә 17-нән 30 йәшкә тиклемге 10 мең кешегә 800 урын формулаһы эшләй. Сығарылыш уҡыусыларының артыуы сәбәпле Федераль Йыйылыштың түбәнге палатаһында был һанды арттырырға ниәтләйҙәр. Алдан хәбәр ителгәнсә, Башҡортостанда был киләһе уҡыу йылында була.

# ХАҠТАР АРТА

**Өфөлә коммуналь хеҙмәттәрҙең хаҡы уртаса 46,65 һумға арта, тип хәбәр итте Тарифтар буйынса дәүләт комитеты рәйесе Светлана Бурдюк Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә.**

1 июлдән республикала тариф 2 процентҡа ҡиммәтләнә. Волга буйы федераль округының тағы һигеҙ төбәгендә хаҡ арта. Башҡортостанда фатир өсөн түләүҙең 47,2 проценты йылытыуға тура килә. Хеҙмәттең был төрө 1,85 процентҡа арта. Электр энергияһына тариф 3,6 процентҡа артып, 1 КВт сәғәт уртаса 3,17 һум була. Газға тариф йыл башында бер кубометры 7,1 һум тәшкил итте. 1 июлдән тариф 1,4 процентҡа индексацияланa - һәҙәмтәлә 7,2 һум. Һыу менән тәьмин итеү 1,85 процентҡа арта - бер кубометры 25,57 һумдан 25,96-ға тиклем. Һыу бүлеү - 1,4 процент: бер кубометры 25,91 һумдан 26,28 һумғаса. Хеҙмәттең ошо төрөнөң хаҡы буйынса Башҡортостан Волга буйы федераль округында дүртенсе урында.

*ФИНАНС ӘЛИФБАҺЫ*

# КРЕДИТ ОСҺОҘЛАНДЫ, ТИП...

## башыбыҙҙы юғалтмайыҡ

**Рәсәйҙең Үҙәк банкы төп ставкаһын (ключевая ставка) кәметте. Быйыл төп ставка беренсе тапҡыр үҙгәрҙе һәм әлеге ваҡытта ул 7,5 процент тәшкил итә. Нимә һуң ул төп ставка һәм уның күтәрелеүе йәки кәмеүе ил иҡтисадына, халыҡҡа нимә бирә?**

Үҙәк банк нәҡ ошо ставка менән коммерция банктарына кредит бирә йәки уларҙан депозит ала. Ә улары, үҙ сиратында, үҙҙәренең процентын өҫтәп, халыҡҡа, эшҡыуар һәм фермерҙарға кредит "тарата". Мәҫәлән, ниндәйҙер коммерция банкы үҙе 7 процент менән кредит ала ла, шуға тағы ла 6 процент өҫтәп, үҙенә кредит һорап килеүселәргә бирә. Шул рәүешле, уның йыллыҡ таҙа килеме 5 процент тәшкил итәсәк. Әгәр ҙә ул Үҙәк банктан бәләкәй процент менән кредит алһа, үҙе биргән займдың күләме лә әҙерәк буласаҡ. Ә төп банк уға юғары процентлы кредит тәҡдим итһә, тәбиғи, уның тарафынан халыҡҡа бирелгән кредиттың проценты ла ҙур буласаҡ. Шулай итеп, төп ставканың түбән йәки юғары булыуы кредит һәм депозиттарҙың хаҡына туранан-тура йоғонто яһай.

Әгәр ҙә төп ставка күтәрелһә, халыҡҡа кредит алыу ауырлаша йәки алған халдә үтә лә ҡиммәткә төшә. Мәҫәлән, 12 менән 22 процентлы кредит алып ҡайтарыуҙың ни тиклем айырмаһы ҙур икәнен математиканан алыҫ булғандар ҙа яҡшы аңлай. Ә халыҡтың, эшҡыуарҙарҙың кредит алмауы илдәге тауар-ара әйләнештең кәмеүенә, күсемһеҙ милек баҙарында торғонлоҡҡа килтерә. Кредитһыҙ ҡалған эшҡыуарлыҡ үҙенең инвестицион проекттарын "туңдыра". Был иһә ил иҡтисадының түбәнһәйеүенә килтерә. Ләкин ҡулында "ирекле" аҡсаһы булғандар өсөн төп ставканың юғары булыуы ҡулай, сөнки улар банкка аҡсаларын ҙур процент менән һалып, килем ала. Төп ставканың төшөүе иһә кредит баҙарын йәнләндереп ебәрә, сөнки аҡсаны депозит иҫәптәрҙә һаҡлауға ҡарағанда, кредит алып, аҡсаны әйләнешкә индереү төшөмлөрәк булa. Кредиттарҙың осһоҙланыуы халыҡ тарафынан тауар һәм хеҙмәткә аҡсаны күберәк бүлергә мөмкинлек бирә. Ә инвестицион проекттарын тормошҡа ашырыу өсөн кредит алған эшҡыуарҙар яңы эш урындары булдыра һәм ил ҡаҙнаһына өҫтәмә һалым түләй. Ғөмүмән алғанда, илдә аҡса әүҙем "эшләй" башлай. Тәү ҡарашҡа, быны яҡшы күренеш итеп ҡарарға була, ләкин осһоҙ кредитҡа ҡыҙығып, кешенең тағы ла нығыраҡ бурыс һаҙлығына батыуы бар. Ә быны иһә бер нисек тә ил халҡы өсөн һәйбәт тип иҫәпләп булмай. Хәйер, һәр кем "Юрғаныңа ҡарап аяғыңды һуҙ", тигән мәҡәлде онотмаһа, хәүефле эҙемтеләрҙән ҡотолоп ҡаласаҡ.

Әлеге ставканың теге йәки был яҡҡа үҙгәреүе һәр ваҡыт булып тора һәм киләсәктә лә буласаҡ. Уның 0,25 - 0,5 процентҡа тирбәлеүе норма һанала. Ә төп ставканың ҡапыл үҙгәреүе илдә иҡтисади көрсөктөң башланыуы тураһында һөйләй. Шуға күрә был күрһәткескә иҡтисадсы, ошо өлкәлә эшләүсе белгестәрҙең генә түгел, ә халыҡтың да иғтибарлы булыуы мөһим. Эксперттар фекеренсә, төп ставканың түбән булыуы ил иҡтисадының ҡеүәтле булыуы тураһында һөйләй. Бөгөн, әйтеп үтеүебеҙсә, төп ставка күрһәткесе - 7,5 процент, ә унан алдағыһы (17.12.2018 - 13.06.2019 арауыҡта) 7,75 процент ине. Күреүебеҙсә, ул 0,25 процентҡа төшкән, тимәк, Рәсәй иҡтисады әлеге ваҡытта үҙен яҡшы тоя, тип иҫәпләргә була.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# БАЛАЛАР ХӘСТӘРЛӘНӘ

✓ **1 июлдән Рәсәй Федерацияһы Президенты указына ярашлы инвалид баланың йәки бала саҡтан I төркөм инвалидтың ата-әсәһенә (уллыҡҡа-ҡыҙ итеп алыусыға) йә иһә опекунына (попечителгә) айлыҡ түләүҙең суммаһы ҡул ҡуйылған документҡа ярашлы 5500 һумдан 10 000 һумға тиклем арттырыла.** Ғариза бирергә кәрәкмәй, тип белдерҙеләр Рәсәй Пенсия фондының республика бүлексәһендә. Республикала ошо түләүҙе 11 806 ата-әсә һәм опекун алырға тейеш. Төбәктә уның суммаһы 11 500 һум була. Аҡса бер эшләмәгән хеҙмәткә һәләтле ата-әсәгә (уллыҡҡа-ҡыҙ итеп алыусыға) йәки опекунға (попечителгә) бөтә тәрбиәләү осорона тәғәйенләнә. Тәрбиәләү осоро страховка стажына индерелә һәм йыл һайын 1,8 пенсия балы өҫтәлә. Был эшләмәгән кешегә страховка пенсияһын алыу өсөн үҙенең пенсия хоҡуҡтарын формалаштырырға мөмкинлек бирә. Инвалид бала йәки бала саҡтан I төркөм инвалид тәрбиәләгән башҡа кешеләргә лә айлыҡ түләү билдәләнергә мөмкин. Был осраҡта түләүҙең күләме 1 380 һум була.

✓ **2020 йылдың 1 ғинуарынан балаға уртаса 10-11 мең һумлыҡ түләүҙәр уртаса килеме ике йәшәү минимумы булған ғаиләләргә ҡағыла, тип белдерҙе Рәсәй Президенты Владимир Путин тура бәйләнеш барышында. Яҡын арала йәш ярымдан 3 йәшкә тиклем бала тәрбиәләгән ғаиләләрҙең дә ошондай социаль ярҙам алыу мөмкинлеге була.** "Әгәр беҙ 2020 йылдың 1 ғинуарынан килеме ике йәшәү минимумы булған ғаиләләргә нулдән йәш ярымға тиклем бирә башлаһаҡ (төбәк буйынса бер йәшәү минимумы күләмендәге балалар пособиеһы), ғаиләләрҙең 70 проценты ошо ярҙам сараһына эләгә, - тине Президент. - Әлбиттә, бала йәш ярымға еткәс, 1,5 йәшәү минимумына күсеү, йәғни шунда уҡ ошо ярҙамды алған ғаиләләр һаның кәметеү сәйер булыр ине. Шуға күрә быны килеме ике йәшәү минимумы булған бөтә ғаиләләргә таратырға тейешбеҙ, тип иҫәпләйем һәм үҙем өсөн күптән ошо ҡарарҙы ҡабул иткәнмен". 2018 йылда Президенттың башланғысы менән 1,5 йәшкәсә бала тәрбиәләгән ғаиләләр өсөн яңы ярҙам сараһы индерелде. Был пособиелар федераль бюджеттан түләнә. Айлыҡ түләүҙәргә тәүге балаһы 2018 йылдың 1 ғинуарынан һуң тыуған ғаиләләр дәғүә итә ала. Ике ата-әсәнең дә Рәсәй гражданлығы булырға тейеш.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Быума йүтәл

❖ Эмаль һауытҡа 5 литр һыу, 2 кг һоло ярмаһы һалып, 50-60 градус ҡыҙыулыҡтағы мейестә 3 сәғәт тоторға, һөҙөргә һәм 200 грамм бал, 200 мл коньяк һалып, ут өҫтөнә ҡуйырға. Ҡайнатып сығаргас, уттан алырға, һөҙөргә һәм эсергә.

## Баш ауыртыуы

❖ Баш ныҡ ауыртҡанда, ҡан баҫымы күтәрелгәндә һарымһаҡлы лимон төнәтмәһе файҙалы, ул тәндәге төрлө кәрәкмәгән ултырмаларҙы, тоҙҙо сығарасаҡ.

**Төнәтмә өсөн:** 1 лимон менән 1 һарымһаҡты ит турағыстан үткәреп, 1 литрлы быяла һауытҡа һалырға ла, өҫтөнә һауыт тулғансы ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойорға. 3 көн төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ эсергә. 1 литр төнәтмәне эсеп бөткәс, кәрәк тиһәгеҙ, тағы ла дауам итегеҙ.

## Аҡ әнис

(тмин)

❖ Аҡ әнистә аҡһым күп, һабағы менән сәскәһе С витаминына бай. Унан яһалған дарыуҙар микробтарға ҡаршы тора, ҡаҡырыкты ҡыуҙырыуға ярҙам итә, йүтәлде баҫа, ауыртыуҙы ла бөтәрә, үт ҡыуығы, тын юлдары сирҙәрендә, һалҡын тейгәндә файҙаланыла. Ошо ауырыуҙарҙы булдырмау өсөн алдан профилактика өсөн эсһәң дә була.

**Төнәтмәне яһау:** 1 ҡалаҡ аҡ әнис орлоғон 2 стакан һыуға һалып, ҡайнатып сығарырға, өҫтөн ябып 5-7 минут талғын утта тоторға. Һыуынғас һөҙөргә һәм көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 15-20 минут алда 1/3 стакан эсергә.

❖ Хәтерҙе нытығытыу өсөн был төнәтмәгә бал ҡушалар.

❖ Аҡ әнис төнәтмәһен 1:1 күләмендә әфлисун һуты менән ҡушып эсеү төшөнкөлөккә бирелеүҙән, хәлһеҙлек тойғоһонан ҡотолорға ярҙам итә. Тиҙ ярһып, ҡыҙып барыусыларға тәҡдим ителмәй.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ ***Конкурсҡа йомғаҡ 30 ноябрҙә яһаласаҡ. Еңеүселәр Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең дипломдарына һәм аҡсалата призлдарға эйә буласаҡ: беренсе урын - 500 мең һум; икенсе урын - 250 мең һум; өсөнсө урын - 150 мең һум.***



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*

# БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

**Кәзә күпләп үрсетелгән Урал алдының көньяғында балаҫты ҡара епкә ҡушылған кәзә ҡылынан да һуҡҡандар. Ҡара-көрән йәки ҡара фон йышыраҡ осраған. Тар ғына төҫлө буйҙар (һары, зәңгәр, алһыу, аҡһыл һ.б) ошо фонға иреклe рәүештә һуғылған, шулай уҡ төҫтәр бер-береһенә "көҙгөләрә сағылыш" кеүек итеп һуғылған киң буйҙар ҙа осраған.**

Шулай уҡ "йүгереп килгән тулҡын" биҙәге булған. Унда төҫлө буйҙарҙың киңлеге балаҫтың бер ягына ҡарай артып йә кәмеп барған, төҫтәрҙе ҡулланғанда уларҙы тоны буйынса бер-береһенә яҡы-нын һайлағандар. Аҙаҡтан тар балаҫты бер-береһенә ҡушып теккәндән һуң раппорт киңәйгән һәм биҙәк матур сағылыш алған.



*Буялған кәзә ҡылынан һуғылған балаҫ. Күгәрсен районы Бикбулат ауылы. Автор фотоһы. 1981*

Күгәрсен районы Бикбулат ауылында осраған балаҫҡа иғтибар итәйек. Ҡара фонды 3-әр һары, йәшел, аҡһыл, алһыу төҫлө буй һуғылған һәм күпмелер интервалдан һуң улар киреһенә тағы ла ҡабатланған. Һары төҫтәге буйҙың киңерәге орнаменттың сиген билдәләй, ҡара фон да яҡшы беленеп тора һәм төҫтәрҙе көсәйтә. Композицияның уртаһына ҡарай буйҙарҙың киңлеге кәмей һәм алһыу төҫ бары тик бер буй ғына булып ҡалә.

Көньяҡ-көнбайыштың иң алыҫ ерҙәрендәге балаҫтар (Дим йылғаһы үҙе) йышыраҡ фон бөтөнләй күренмәй, шул уҡ ваҡытта төҫтәң ритмын ҡуйыраҡ буяуҙар бирә. Ошо рәүешле интервалдарҙы билдәләнгәндә ҡуйы төҫтән уға ярашлы ярым тондағы төҫтәргә күсәләр һәм яйлап баштағы төҫкә ҡайталар. Күберәк ҡара көрән, шәмәхә, сирень, алһыу төҫтәр ҡулланылған. 1969 йылдағы экспедиция мәлендә осраған бер балаҫта шәмәхә төҫөндәге буйҙарҙың араһын алһыу, асыҡ зәңгәр, асыҡ көрән, һары, аҡһыл, сирень төҫтәре тултырған, улар тап ошо рәүешле бер-береһен алыштырған. Икенсе вариантта шәмәхәнән һуң сирень, һары, зәңгәр, ҡурай еләге төҫө һәм ҡабаттан шәмәхә буй килә; раппорт 5 тапҡыр ҡабатлана. Орнамент төҙәгәндә симметрия юғала, әммә талғын ғына динамика барлыҡҡа килә.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМҒӘТ!*

**Бынан бер нисә йыл элек республикала "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт ойошмаһы эш башлағайны. Өлкәндәр күҙлегенән бала-сағa кеүек кенә күренгән йәш егеттәрҙең шул уҡ ололар тыуҙырған яһалма кәртәләрҙе үтә-үтә, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә милләттәштәребеҙҙе айыҡтырыу йүнәлешендәге эшмәкәрлеге тиҙҙән цунамиҙай тотош дәүләтебеҙҙе ҡаплап алып, "Айыҡ ауыл" конкурсына башланғыс һалынғайны. Был конкурс яйлап Башҡортостан сиктәрен үтеп, тотош Рәсәй киңлегенә таралды.**

# АУЫЛДАРЫБЫҘ...

## "йәшел йылан" менән алышҡа сыға




Статистика күрһәтеүенсә, ошо хәрәкәт башланғас, республикала һуңғы ике-өс йылда хәмер ҡулланыу, уға бәйле төрлө ауырыуҙар яйлап ҡына кәмеүе күҙәтелә. Әгәр артабан да шундай темптар менән барһаҡ, биш-ун йыл эсендә ыңғай күренештәр һиҙелерлек булырға тейеш ине. Әммә ул ваҡытта республика етәкселеге лә, урындағы чиновниктар ҙа был сараның әһәмиәтен ысын күңелдән аңлау кимәленә етмәгәнлеге асыҡланды. Эйе, "Айыҡ ауыл" конкурсын Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты күтәреп алды һәм дәррәү алып барҙы, дөйөм тырышлыҡ менән был сара республика кимәленә сығарылды, Хөкүмәттә махсус ойоштороу комитеты булдырылды. Әммә 2014 йылда ойоштороу комитеты Баймаҡ районы Ярат ауылын, Учалы районы Баттал ауылын, Федоровка районы Яңы Яуыш ауылын еңеүсе итеп танып, конкурсҡа матур итеп йомғаҡ яһаһа ла, Хөкүмәттә ул протоколға ҡул ҡуйыусы ла, вәғәҙә ителгән аҡсаны бүлеүсе лә булманы. Еңеүсе ауылдар бөгөн дә үҙҙәренең тырышлыҡ емешен баһалауҙарын көтә.

Ни өсөн власть ул ваҡытта халыҡты айыҡтырыуға ҡаршы булды һуң? Уйлап ҡараһаң, донъяға, тормошҡа айыҡ ҡараш менән баҡҡас, халыҡтың социаль әүҙемлеге арта һәм улар тирә-яҡта барған ваҡиғалар, күршеләрҙә нимә барыуы менән ҡыҙыҡһына башлай. Ә был етәкселеккә оҡшамай, сөнки уларға эшбурыс арта: халыҡ төрлө проблемаларҙы хәл итеүҙәрен талап итеп хаттар яҙа, властарға уларҙың эшендәге етешһеҙлектәрҙе төртөп күрһәтә, артыҡ һорауҙар яуҙыра башлар ине. Әлбиттә, бөгөн халыҡ властарға асыҡтан-асыҡ әйтеп, төртөп күрһәтеп биргән эштәр былай ҙа эшләнергә тейеш, әммә власть креслоһына аҡса һәм дан өсөн генә килеп ултырыусылар был мәсьәләләргә тотонғоһо килмәне.

Шөкөр тиәйекмә, был хәрәкәт ҡабат йәнләнде. "Берҙәм Рәсәй" партияһы "Айыҡ Башҡортостан" проектын башланы. Уның етәксеһе - БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Рөстәм Ишмөхәмәтов. Проект йүнәлештәргә бүленгән. Законлар сығарыу өлөшөндә ул алкоголь һатыуҙы сикләү сараларын үҙ эсенә алһа, йәмәғәт контроле сауҙа үҙәктәре буйынса рейдтар үткәреүҙе күҙаллай. Өсөнсө йүнәлеш - сәләмәт йәшәү рәүешен модаға индереү. Ул спорт, сәнғәт һәм башҡа киң күләмле сараларҙы үҙ эсенә ала. Проектты тормошҡа ашырыу буйынса тәүге аҙымдар яһалды ла инде: 30 майҙа БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары Йәштәр көнөндә, Белем көнөндә һәм һабантуйҙар ваҡытында спиртлы эсемлектәрҙе һатыуҙы тыйыу тураһында закон ҡабул итте. Шулай уҡ алкоголь һатыуҙы тыйыу ваҡытын да үҙгәртте: элек ул киске сәғәт 11-ҙән иртәнге 8-гә тиклем һатылһа, хәҙер киске 10-дан иртәнге 10-ға тиклем һатыла. "Граждандарҙан алкоголь һатыуҙы сикләүгә бәйле тәкдимдәр күп килә. Уларҙың иң төплөләрен генә һайлап алдыҡ, - ти Константин Толкачев. - Ғөмүмән, республика парламенты алкоголдe ваҡлап һатыуға ҡәтғи сикләүҙәр ҡуйыу яҡлы түгел, сөнки һәр ғәмәл кире ғәмәл тыуҙыра һәм күләгәләге баҙарҙың үҫешенә килтерә. Яңы закон бизнесҡа йоғонто яһамаҫ, киң ҡатлам халыҡтың мәнфәғәтен боҙмаҫ, шул уҡ ваҡытта ул ҙур байрамдарҙа йәмәғәт тәртибен тәьмин итергә, йәштәр араһында алкоголь ҡулланыуҙы кәметеүгә ярҙам итәсәк".

Республика етәксеһе Радий Хәбиров был сикләүҙәрҙең барыһына ла: халыҡҡа ла, чиновниктарға ла, етәкселәргә лә берҙәй ҡағылыуын белдерҙе. "Юҡһа, беҙ халыҡтың сәләмәтлеген һәм именлеген һаҡлауҙы ҡуҙаллаған изге идеяға зыян килтерәсәкбеҙ", - тине ул.

Быйыл Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ла "Айыҡ ауыл" республика конкурсын ҡабаттан тергеҙҙе. Конкурс ике этаптан тора: беренсеһе 10 апрелдән 31 августа тиклем райондарҙа үтә, икенсе этапҡа муниципаль райондар араһындағы еңеүселәр сыға. Конкурсҡа йомғаҡ 30 ноябрҙә яһаласаҡ. Еңеүселәр Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең дипломдарына һәм аҡсалата призлдарға эйә буласаҡ: беренсе урын - 500 мең һум; икенсе урын - 250 мең һум; өсөнсө урын - 150 мең һум. Был сумма ауыл биләмәләрен үҫтереүгә йүнәлтеләсәк. Финалға эләккән 10 ауыл 30-ар мең күләмендә матди ярҙам аласаҡ, бынан тыш, икенсе этаптың 20 активисы БР Хөкүмәтенең дипломына һәм 10-ар мең һум аҡсалата премияға лайыҡ буласаҡ. 30 майҙа Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте "Айыҡ ауыл 2019" конкурсын үткәреү, конкурстың ойоштороу комитетын булдырыу тураһында положение эшләү тураһында ҡарар сығарҙы. Тимәк, был хәрәкәт тағы ла юғары кимәлдә хуплау тапты, әммә элекке кеүек, ярты юлда туҡтап ҡалмаһын ине.

Сауҙа нөктәләренә рейдтар үткәреү буйынса ла ыңғай миҫалдар бар. Айыҡ тормош өсөн көрәштә республиканың Әбйәлил районы элек-электән әүҙемлеге менән айырылып торһа, әле уларҙа был хәрәкәт яңы һулыш алды: былтырҙан башлап иҫкәртеү эштәре киң йәйелдерелде, даими рәүештә рейдтар үткәрелә. Быйыл беренсе кварталда ғына район буйынса 248 рейд уҙғарылған. Спиртлы эсемлектәрҙең 73 өлгөһөнә экспертиза үткәрелеп, уларҙың һөҙөмтәләре алынған. 20 майға ҡарата судтарҙа 27 эш ҡаралып, дөйөм 525 мең һумлыҡ административ штраф һалыу тураһында ҡарар сығарылған. Әйткәндәй, граждандар өсөн административ штрафтың күләме 30-50 мең тәшкил итә. 57 эш - судтарға, 4 эш - тикшереү органдарына, 2-һе Арбитраж судҡа ебәрелгән. Әлбиттә, ҡул һелтәп, булмай, бер нәмә лә барып сыҡмай ул, тиеү менән даими эш алып барыу араһында ҙур айырма бар. Тамсы тама-тама таш тишә, тигәндәй, айыҡлыҡ яҡлылар, властың барлыҡ тармаҡтары (закондар сығарыу, башҡарма, хоҡуҡ һаҡлау һәм киң мәғлүмәт саралары) бер төптән булып даими эшмәкәрлек алып барғанда ғына һөҙөмтәгә өлгәшергә мөмкин.

Һәм, ышанаһығыҙмы, юҡмы, ошо ыңғай күренештәрҙең ҡапыл таралыуына һәм тиҙ арала һиҙелерлек һөҙөмтәгә өлгәшеүендә интернет селтәренең дә өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Был хаҡта бер аңғәмәләшкән ваҡытта "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәтенең рәйестәше Ренат Зәйнуллин былай тигәйне: "Тап интернет уҙған быуаттың 80-се, 90-сы йылдарында күҙәтелгән хәл-торошто, йәғни власҡа төрлө юлдар менән үрләгән һәм айыҡлыҡ идеяһын дискредитациялаған, уны үҙ файҙаһына ҡулланған, халыҡты эскесегә әйләндергән хәл-тороштан арынырға ярҙам итәсәк тә инде. Хәҙер киң мәғлүмәт саралары аша алкоголдe, тәмәкене пропагандалауға тап интернет ярҙамында сик ҡуйырға мөмкин. Интернет - ошо йүнәлештә эшмәкәрлек алып барырға һәләтле ҙур көс. Ул - бер кешенең икенсеһенә туранан-тура, аралашсыһыҙ, төрлө структуралар аша түгел, туранан-тура мөрәжәғәт итеүе. Бары тик интернетта ғына ҡайһы бер сараларҙы, ҡайһы бер мәғлүмәтте киң һәм объектив яҡтыртып була. Улар рәсми киң мәғлүмәт саралары менән параллель бара, әммә айырма шунда - рәсми киң мәғлүмәт сараларына ҡаты цензура ҡуйып булһа, интернетты ауыҙлыҡлау мөмкин түгел". Дөрөҫөн әйткәндә, ысынлап та, күңелендә халыҡты айыҡтырыу теләгән йөрәткән егеттәр, шул иҫәптән Әбйәлил районының "Бөркөт" ойошмаһы ла, тап ошо интернет селтәре аша һөйләшеп, берләшеп, ҡабат айыҡлыҡ хәрәкәтен тергеҙеп ебәрҙе. Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Фәрит улының командаһы булдырған Инцидент системаһы ла быға булышлыҡ итте, сөнки халыҡ проблемалары менән туранан-тура башлыҡҡа мөрәжәғәт итеү һәм хәл итеһе мәсьәләләргә төртөп күрһәтеү мөмкинлеген алды. Улар араһында, әлбиттә, алкоголь һәр суррогат алкоголь һатыу темаһы ла бар ине.

Эйе, Мәскәү бер көндә төҙөлмәгәндәй, ныҡлы тамыр йәйгән эскелек проблемаһын юҡҡа сығарыу өсөн ваҡыт та, берҙәмлек тә һәм унда дөрөҫ юлды табыу ҙа зарур. Ә быны өсөн властарҙың халыҡ фекеренә ҡолаҡ һалыуы һәм уларҙың инициативаһына ҡушылыу, инициатив төркөмдәр эшмәкәрлеген мөмкин тиклем хуплауы кәрәк. Ни тиһәң дә, эскелек проблемаһынан бөгөн эшһеҙлектән, аҡсаһыҙлыҡтан һәм перспективаһыҙлыҡтан миктәгән ауыл халҡы йонсой.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*✓ Әгәр башҡорттарҙың һаны һуңғы 100 йыл эсендә уларҙың XIX быуат башындағы иҫәбенән яҡынса 30 процентҡа тиклем артыуын иғтибарға алһаҡ, бөгөн сама менән 170 меңләп табын башҡорто бар, тип фараз итергә була.*

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# БӨРКӨТ ҠОШЛО ТАБЫНДАР БЕҘ!

Табын ырыуының килеп сығышы буйынса ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр байтаҡ. Иң тәүҙә риүәйәттәр, шәжәрә материалдарын иҫләп үтәйек. Ошо риүәйәттәрҙең береһендә табындарҙың ата-бабалары борон замандарҙа Алтай тауҙарында, уйғырҙар менән аралашып йәшәгән, тип әйтелә. Табын атамаһы ла Алтай тауҙары исеменән килеп сыҡҡан, имеш. Күрәһең, бында монгол Алтайындағы Табын-Боғҙо-Ола (Биш алла) тауы тураһында һүҙ бара. Шулай уҡ ырыу исеменең монгол телендәге табун (5 һаны) һүҙенә ярашлы барлыҡҡа килеүе тураһында ла фараз бар. Йәнә, монгол хандарының юғары вазифалы илсеһе лә "табин" тип аталған, табын атамаһы шуға бәйлелер, тигән фекер ҙә осрай. Әммә ниндәйҙер вазифаны белдергән һүҙҙең тотош төрки ҡәүеме исеменә нигеҙ итеп алыныуына ышаныуы ҡыйын. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр табын атамаһын монгол-бүрәттең табунут йәки табунғут ҡәбиләһе исеменә бәйләп аңлата. Әммә был осраҡта, боронғо төрки телендә табин, тапин һүҙҙәре булып, башҡорт телендәге табыныу мәғәнәһендә ҡулланылыуын миҫал итеп алырға була. Әйткәндәй, башҡорт телендә табын аш мәжлесен дә белдерә, был осраҡта бер ҡорға йыйылған кешеләр тураһында һүҙ бара.

Р.Ғ. Кузеев табын ырыуының боронғо төркиҙәрҙән булыуын тарихи-этнографик материалдар нигеҙендә ышаныслыраҡ аңлатып була, тип иҫәпләй. Табын ырыуы шәжәрәләре үҙҙәренең генеалогияһын легендар шәхес - Уйшын Майҡы бейҙән башлай. Ошо шәжәрәләрҙең береһендә Майҡы бейҙең бабаһының Төмән бей булыуы теркәлгән. Ҡарағалпаҡтарҙың бер риүәйәтендә лә Майҡы бейҙең Тумэн нәҫеленән булыуы хаҡында мәғлүмәт бар. Тумэн (Бумын), легендар Ангиндың ейәне, төрки тарихының билдәле шәхесе. Ул беҙҙең эраның VI быуатында боронғо төрки-тюкю дәүләтен төҙөүсе ил башлығы - ҡаған булған. Бумын ҡағандың исеме билдәле Орхон таш яҙмалы ҡомартҡыла ла телгә алына. Ҡара табын һәм Ирәкте башҡорттары шәжәрәләрендә лә Майҡы бейҙең Сыңғыҙ ханға бүләктәр менән барыуы, уның юлдашы булып, бөйөк хан менән бер арбала йөрөүе хаҡында яҙыла. "Ҡысса-и Сыңғыҙхан" риүәйәтендә әйтелгәнсә, Майҡы бейгә түрәлек символдарын Сыңғыҙ хан үҙе бүләк итә: "Эй, Уйшин Майҡы бей, һинең ағасың ҡарағас, ҡошоң - бөркөт, оранның - "Салауат!", тамғаң - һырға булһын".

Майҡы бейҙең реаль тарихи шәхес булыуын раҫлаусы дәлилдәр ҙә бар. XIV быуатта йәшәгән фарсы тарихсыһы Рәшид ад-дин яҙмаларында уның исеме лә телгә алына: "Хушидай Байку исемле икенсе бер өлкән әмир бар ине. Сыңғыҙхан уны ғәскәре менән бергә Джочиға бирҙе; ул Бату ғәскәренең уң ҡанаты менән командалыҡ итте". Тарихсы С. Хәмиҙуллин табин һүҙенең монгол ғәскәрендә хәрби вазифаны белдереп, артабан ошондай хеҙмәтте башҡарыусы ғәскәри төркөм исеменең табын ырыуы атамаһына нигеҙ булып китеүен фараз итә. Шулай уҡ Майҡы бейҙең Уйшин ҡушаматы уның ата-бабаларының уйшын - уйсин ҡәбиләһенән булыуын белдерә. Тарихсы-ғалимдар был ҡәбиләнең сак-скиф сығышлы боронғо усунь халҡының вариҫы булыу мөмкинлегенә лә иғтибар итә.

Майҡы бей ҡаҙаҡ, ҡараҡалпаҡ, үзбәк һәм нуғай халыҡтарының генеалогияһында ла урын алған, уны ошо төрки телле ҡәүемдәрҙең уртаҡ ата-бабалары рәтенә индерәләр. Әммә табын этнонимын йөрөткән ырыу, башҡорттарҙан башҡа, бары ҡаҙаҡтарҙа ғына бар. Шул уҡ ваҡытта үзбәктәрҙең уйшун, ҡараҡалпаҡтарҙың уйшун-митән, ҡырғыҙҙарҙың һары уйсунь, ҡаҙаҡтарҙың һары усунь ырыуҙары булыуы билдәле. Был факт сак ҡәбиләләренең, шул тарихи осорҙа йәшәгән усундәрҙең төрки халыҡтары этногенезында мөһим урын алып тороуына ла ишара.

Табын ырыуының килеп сығышы буйынса алып барылған тикшеренеүҙәр башҡорт ырыуҙары тарихында монгол-төрки этник бәйләнештәренең ролен асыҡ күрһәтә. Этнограф Р.Ғ.Кузеев ошо фекерҙе раҫлаусы дәлилдәр килтерә: "Ҡара табындарҙың этномәҙәни характеристикаһында күҙгә ташланып торған монгол һыҙаттары бар: табындарҙың ырыу бүлемдәре тик аймаҡ тигән монгол һүҙе менән билдәләнә; уларҙың рәшәткәле кейеҙ тирмәләре (ҡатайҙарҙағы кеүек үк) монгол тибында, осло башлы (көньяҡ-көнсығыш Башҡортостандағы сферик "ҡаҙаҡ" йәки төрки тирмәләрҙән айырмалы рәүештә). Табындарға хас орнамент биҙәктәре - Үҙәк Азия һәм Алтай сығышлы. Улар Көньяҡ Себерҙәге монгол халыҡтарының хәҙерге орнаментына яҡын".

Табындарҙың тарих төпкөлөндә монголдар менән тығыҙ бәйләнештә йәшәүен ҡеүәтләүсе дәлил - ырыу составына барын-табындарҙың инеүе. Монголдарҙың баарин атамалы ырыуы булып, улар монгол-нирундар төркөмөнә ҡарай. Монголдарҙың боронғо легендаларына ярашлы, уларҙың тәү инәһе Алан-Гоа тоҡомдары нирун тип аталған. Уның "Бер ҡатлы Бодончар" исемле улынан Барын, Барлас, Манғыт, Борджигин ырыуҙары, икенсе улы Бухату Салжинан Салжиут (Салъют йәки Салйоғот) ырыуы бар булған. Борджигин ырыуы Сыңғыҙ ханды, Барлас - Аҡһаҡ Тимерҙе, Манғыт - Иҙеүкәй кенәзде бирһә, Барын һәм Салжиут ырыуҙары чингизидтар дәүләтенең ғәскәр башлыҡтарын һәм әмирҙәрен тыуҙырған. XII - XIII быуаттарҙа барған тарихи ваҡиғалар һөҙөмтәһендә барындар Ете йылға (Семиречье) арауығында көсәйә барған табын берләшмәһенә ерегеп, артабан улар менән бергә башҡа тарафтарға барып юлыға. Бында беҙ монгол сығышлы ҡәүемдең тулыһынса төркиләшеүен күрәбеҙ.

Табын ырыуҙары монгол яуына тиклем үк Дәште Ҡыпсаҡта ҡеүәтле берләшмәләрҙән һанала. Монголдар ҡулы аҫтында, уларға союздаш булараҡ, артыҡ юғалтыуҙар кисермәй йәшәй. XIII быуат урталарында улар тарихи Башҡортостан ерҙәренә үтеп инә башлай. Әммә Алтын Урҙала барлыҡҡа килгән сәйәси шарттар табындар берләшмәһен тарҡата. Төрлө низағтарҙан, үҙ-ара тоҡанып торған һуғыш-ҡырылыштан ситкәрәк китеп йәшәргә теләүсе ҡәүемдәр төньяҡҡа табан йүнәлә. Табындар тәүҙә Бөгөлмә ҡалҡыулығының көнсығышында йәшәй. Ҡара табын, күбәләк ырыуы башҡорттары хәтерендә ата-бабаларының Һамар, Ыҡ йылғалары үҙәндәрен, Асылыкүл буйын төйәк итеүе хаҡында риүәйәттәр ҡалған. Улар Асылыкүлде заманында Ҡара табын күле, тип тә атағандар. XIV быуат аҙаҡтарында улар Урал аръяғына күсенеп, Миәс, Уй йылғаларының үрге ағымындағы таулы зонала йәшәй башлай, бында күпкә элегерәк көн иткән әйлеләр менән бәйләнешкә инеп, туғанлыҡ мөнәсәбәттәре булдыра. Яйыҡ йылғаһы үрендәге ерҙәр һарт-әйлеләр һәм табындарҙың уртаҡ биләмәһенә әүерелә. Табындар әйлеләрҙе "үҙебеҙҙең ҡоҙалар", тип йөрөтә.

Көнбайыш табын ырыуҙары Ағиҙел йылғаһының һул яғындағы ерҙәрҙе биләй, артабан, инйәр-ҡатайҙарҙы ҡыҫырыҡлап, Инйәр, Эҫем, Елем йылғаларының түбәнге ағымындағы таулы зонаға үтеп инә. Ҡаҙан ханлығы нығынған осорҙа табындарҙың бер өлөшө яңынан көнбайышҡа - Ыҡ йылғаһы буйына килеп, хан хеҙмәтен үтәй башлай. Тап шуның эҙемтәһе булып, XVIII быуат башында Ыҡ үҙәнендәге табын ырыуына ҡараған олоҫтар рус яҙма документтарына инеп ҡалған.

Шулай итеп, табын ырыуы башҡорттарының боронғо тарихы уларҙың төрки сығышлы булып, монгол, шул иҫәптән, кидань һәм уларҙың ҡара ҡытай ҡәбиләләре менән аралашып, усунь һәм ҡыпсаҡ мөхитендә үҫешеп, урта быуаттарҙа киң танылыу тапҡан табын берләшмәһе ырыуҙарының вариҫтары икәнен раҫлай.

Һуңғы йылдарҙа алып барылған этногенетик тикшеренеүҙәр табын шәжәрәләрендә күрһәтелгән уртаҡ баба - Майҡы бей нәҫеленән таралған ырыуҙар туғанлығын раҫлай. Ошо ырыуҙар вәкилдәренең күпселеге R1a - M198 гаплогруппаһына ҡарай. 12 Y-STR-маркерлы тикшереү һөҙөмтәһе буйынса ла ҡара табын, барын-табын, кесе табын, кәлсер-табын, бишултабын, йомран-табын, ҡумрыҡ-күрпәс-табын һәм дыуан-табын ырыуҙары вәкилдәренең бер генетик линияға ҡарағанлығы раҫланды.

Тарихи сығанаҡтарға ярашлы, XVIII быуат башында табын ырыуҙары башҡорттарының дөйөм һаны 60 мең самаһы булған, тип әйтергә була. XX быуат башында уҙғарылған халыҡ иҫәбен алыу материалдарына ярашлы, төп табын ырыуҙары башҡорттарының (ирәкте-табын, танып, балыҡсы һәм унларҙарҙан башҡа) 1917 - 1920 йылдарҙа дөйөм һаны 70 мең самаһы була. Әгәр һуңғыларын да табын тармаҡтары итеп таныһаң, был һан 130 меңгә етә. Әгәр башҡорттарҙың һаны һуңғы 100 йыл эсендә уларҙың XIX быуат башындағы иҫәбенән яҡынса 30 процентҡа тиклем артыуын иғтибарға алһаҡ, бөгөн сама менән 170 меңләп табын башҡорто бар, тип фараз итергә була. Ошо һанды ла бер ни тиклем символик мәғәнәлә аңлау фарыз. Әлбиттә, был осраҡта төрлө башҡорт ырыуҙары вәкилдәренең, быуаттар буйына барған яҡын аралашыуы-туғанлашыуы һөҙөмтәһендә, күптән инде бер этник бөтөнлөктө - башҡорт милләтен булдырыуын һис онотороға ярамайҙыр.

Табын ырыуы үҙ милләтен үҫтереүгә тос өлөш индергән күренекле ул-ҡыҙҙары менән ғорурлана ала. Ғарифулла Кейеков, Ғәли Соҡорой, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Мәжит Ғафури, Дауыт Юлтый, Мөхәмәтша Буранғолов, Хафиз Ҡушаев, Жәлил Кейекбаев, Сәғит Агиш, Шәриф Биҡкол, Халиҡ Заимов, Кәтибә Кинйәбулатова, Нияз Мәжитов кеүек арҙаҡлы заттарыбыҙҙың исемдәре башҡорт тарихында, халыҡ хәтерендә лайыҡлы урын алды. Яҡын һәм алыҫ киләсәктә ошо ҡеүәтле башҡорт ырыуы вариҫтары ла, барса милләттәштәребеҙ менән бергәләшеп, боронғо башҡорт иле тарихының яңы биттәрен асыр, тип ышанайыҡ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әҙерләне.**
**(Аҙағы).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ТУПРАҠ АЛҺАҠ, ҠАЛАБЫҘ...

**Башҡорттоң тарихи үткәне менән күптән ҡыҙыҡһынған һәм был тарихтың ергә ҡағылышлы фажиғәле мәлдәре менән хәбәрҙар кеше булараҡ, мине ҡайһы бер милләттәштәребеҙҙең ергә битараф мөнәсәбәте күптән борсой. Ә былдай битарафлыҡтың эҙемтәләре ҡот осҡос булырға мөмкин. Ер менән бәйле һабаҡтар, фекерҙәрем менән уртаҡлашырға тип, ҡулға ҡәләм алдым.**

## Әзериҙәрҙең һабаҡ алғаны

Һүҙемде әзербайжан милләтенең фажиғәһенә әйләнгән Таулы Карабахтан башлағым килә. Билдәле булыуынса, хәҙер бөтә халҡын тип әйтерлек әрмәндәр тәшкил иткән Таулы Карабах автономиялы өлкәһе совет власы йылдарында Әзербайжан республикаһы составында ине. Был ерҙәр Рәсәй империяһына ҡушылғанға тиклем Иран дәүләтенә буйһонған әзербайжан хандарының ере була. Рәсәй империяһы 1826-1828 йылдарҙа Иранға ҡарата алып барған һуғышта еңгәндән һуң был ике дәүләт 1828 йылда Туркманчай килешеүе төҙөй һәм Төньяҡ Әзербайжан, шул иҫәптән уның составындағы Таулы Карабах ерҙәре лә Рәсәй дәүләтенә ҡушыла. Был мәлдә ул ерҙәрҙә тулыһынса әзериҙәр йәшәгән була. Рәсәйгә ҡушҡандан һуң бай әрмән сауҙәгәрҙәре үтенесе буйынса батшаның рөхсәте менән ул ерҙәргә ике йөҙгә яҡын әрмән ғаиләһе күсерелә. Бына ошонан башлана ла инде ул ерҙәрҙә әрмәндәр тарихы. Был турала мин хәҙерге заман тарихсылары яҙғандарҙан түгел, ә XX быуаттың 80-се йылдарында хәҙер мәрхүм шағирыбыҙ Вил Ғүмәровтың шәхси китапханаһында һаҡланған XIX быуат энциклопедияһынан уҡығайным.

XIX быуат тарихсылары әле генә булып үткән ваҡиғалар менән беҙгә ҡарағанда яҡшыраҡ таныш булғандарҙыр, тип уйлайым. "Кем ере булған?" тигәндә, мин совет тарихсыларына түгел, ә элекке XIX быуат тарихсыларына ышанырға мәжбүрмен. Уларҙы әзериҙәр яғын ҡайғыртҡан, тип ғәйепләп булмай, сөнки әзериҙәр - мосолман, ә христиан урыҫтарҙың симпатияһы үҙҙәренә диндәш, тимәк, рухташ та булған әрмәндәр яғында булғаны бөтәбеҙгә лә мәғлүм. Был әле лә шулай. Һәм әрмәндәр үҙҙәренең сәйәси уйындарында бының менән әле булһа оҫта файҙалана. Шуға күрә, әгәр ҙә урыҫ тарихсылары баяғы Таулы Карабах ерҙәрен "әзериҙәр ере", тип яҙған икән, был мәғлүмәтте ысынға тап килә тип ҡабул итергә кәрәк. Әлбиттә, әрмән тарихсылары: "Ул ерҙәр борон-борондан әрмән ере булған. Төркиҙәр, тимәк әзериҙәр ҙа, был ерҙәргә бик һуң, әрмәндәрҙе ҡыҫырыҡлап килеп ултырған", - тип яҙа. Бынығы инде совет власы йылдарында барлыҡҡа килгән "тарих".

Батша властары Иран менән Төркиә кеүек мосолман дәүләттәренә ҡарата алып барған колониаль сәйәсәтендә христиан әрмәндәрҙе тәбиғи союздашы һанай. Шуға күрә лә, әрмәндәрҙе үҙ мәнфәғәттәрендә файҙаланыу өсөн ерҙәр биреү кеүек ымһындырыу саралары ҡуллана. Һөҙөмтәлә, XIX быуат башында тулыһынса әзериҙәр йәшәгән Карабах йөҙ йыл эсендә әзери ерҙәренән әрмән ерҙәренә әйләнә. "СССР" тигән дәүләт юҡҡа сығыу менән Әзербайжан республикаһы уртаһындағы Карабах менән Әрмәнстанды айырып торған аралағы бер нисә районды баҫып алып, әрмәндәр Таулы Карабахты үҙ ерҙәренә ҡушалар. Хәҙер тиҫтә йылдан ашыу Таулы Карабах Әзербайжан халҡының һәм дәүләтенең иң оло фажиғәһенә әйләнде. Әзербайжан нисек итеп ерҙәрен кире ҡайтарып алыу тураһында уйлай. Ярар, был турала етеп торор.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ**
**(Дауамы бар).**

✓ *Был осраҡта беҙ хан сәйәсәтененең башҡорттарҙың йәшәү һәм хужалыҡ итеү рәүешенә тап килеүен күрәбеҙ. Тап шул осорҙан башлап аҫабалыҡ хоҡуҡи статус ала.*



**Тарих фәндәре кандидаты, зыялыларыбыҙ араһында үҙенең башҡорт ырыуҙары тарихы, популяцион этногенетика буйынса яҙылған ғилми эштәре, социаль селтәрҙәрҙәге мәҡәләләре менән танылыу тапҡан ғалим, БР Стратегик Тикшеренеүҙәр Институтының Ижтимағи-мәҙәни анализ үҙәге етәксеһе Юлдаш Мөхәммәт улы ЙОСОПОВ менән сираттағы әңгәмәбеҙ үтә ҡыҙыҡлы темаға - Башҡортостандың яңы этник брендын булдырыуға арналды. Йәш башҡорт ғалимының яңы хыял-пландары уҡыусыларыбыҙ күңеленә хуш килер, тип уйлайбыҙ.**

# ЫРЫУҘАРҘЫ -

## Был тормошҡа

**Юлдаш Мөхәммәт улы, һеҙ замандаштарыбыҙ өсөн яңы һәм үтә ҡыҙыҡлы булған башланғыс - Өфө ҡалаһында Башҡорт ырыуҙары парады тип аталған оригиналь сара уҙғарыу мөмкинлеге тураһында уйланып, ошо идеяны ғәмәлгә ашырыуға булышлыҡ итерҙәй, терәк булырҙай фекерҙәштәр, арҡаҙаштар эҙләйһегеҙ, тип ишеткәйнек. Бығаса башыбыҙға ла инеп сыҡмаған хыял-идея нисек тыуҙы, бындай башланғыстың ниндәйҙер нигеҙе барҙыр бит?**

- Һүҙемде бер аҙ ситтәнерәк башлайым. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында Башҡорт халҡының үҫеш стратегияһын булдырыу маҡсатында ошо документтың концепцияһы иғлан ителгәйне. Унда бәғзе бер идеялар, принциптар рәтендә тик башҡорт милләтенә генә хас булған, уны ҡылыҡһырлап торған һыҙат-сифаттар атап кителә. Мәҫәлән, ярҙамсыллыҡ, йәнә традицияларға тоғролоҡ. Мин үҙем шул уҡ ярҙамсыллыҡты беҙҙең барыбыҙға ла хас булған милли сифат итеп һанамайым, хәҙерге заманда йыш ҡына уның киреһен дә күрәбеҙ. Минеңсә, башҡорттарға элек-электән икенсе бер феномен хас - ниндәй ҙә булһа уртаҡ маҡсат булғанда, берләшеү, бер күскә ойошоу, ниндәйҙер бер төркөмгә тупланыу ынтылышы үтә көслө була. Быны фән телендә консорциумға (ойошоуға) әүәҫлек, тип тә атап булыр ине. Икенсерәк итеп әйткәндә, башҡорт кешеһенә үҙ-үҙен таныттыр, күрһәтер өсөн башҡалар менән бер төптән булып, кемгәлер ҡаршы көрәш-алышҡа сығырға һәр ваҡыт әҙер булыу хас. Бындай ижтимағи сифатты уларҙың үҙбилдәләнеш ысулы итеп тә ҡарап була.

**Хужалыҡта ла, ил-ерҙе һаҡлау яғынан да, йола-байрамдар уҙғарғанда ла башҡорттар ырыу берлегенән ситкә тайпылмаған, тиҙ арала туплана, ойоша алыу мөмкинлегенә эйә булған. Тимәк, тарихи ҡорыыу берләшмәләренең халҡыбыҙ йәшәйеше өсөн үтә мөһим булып, һәр кемебеҙҙең үҙ ырыуын әле лә белеүе һәм иҫәпкә алыуы ошондай милли үҙенсәлек эҙемтәһе, тиһегеҙ инде?**

- Тап шулай. Ул хәҙерге заманға ла хас күренеш: башҡорт йәштәренең 90-сы йылдарҙан бирле үҙаллы йәмәғәт ойошмаларына тупланырға әүәҫ булыуын миҫалға алып була. Беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа ғына әллә нисәмә ойошма барлыҡҡа килде бит. Дини берләшмәләрҙә лә тап башҡорт йәштәре төп урын биләй. Сыуаш, татар халҡы ерлегендә лә ойошмалар бар, әммә тик башҡорттарҙа ғына ошо сифат башҡаларға хас булмаған төҫ ала: сәбәбе генә булһын, бергә йыйылып, ниҙелер талап итер өсөн, йә иһә кемгәлер ҡаршы сығыр өсөн, халыҡ әйтмешләй, бер һыҙғырыу етә.

**Әйткәндәй, совет осорондағы күмәк бейеүҙәргә йөрөү, хәҙерге флеш-мобтар ҙа ошо фекерҙе ҡеүәтләй. Шулай ҙа ошо күркәм этник һыҙаттың тарихи ерлеге барҙыр бит?**

- Минеңсә, был күренеш аҫабалыҡ менән бермә-бер бәйле. Башҡорттар боронғо замандарҙан Көньяҡ Уралға ереккән, был ерҙәр үҙаныбыҙҙа изге Ватаныбыҙ образын һынландыра. Алтын Урҙа осоронда, бигерәк тә Туҡтамыш ханлыҡ иткән заманда ғәскәри хеҙмәттәре өсөн махсус суярғалдар - ер биләмәләре хан бүләге рәүешендә тапшырылған. Бындай бүләктәргә айырым яугирҙәр түгел, ә тотош ырыуҙар лайыҡ була. Ғәскәри башҡорттар ҙа үҙ ер биләмәләренең хан тарафынан раҫланыуына, теркәлеүенә өлгәшә. Был осраҡта беҙ хан сәйәсәтененең башҡорттарҙың йәшәү һәм хужалыҡ итеү рәүешенә тап килеүен күрәбеҙ. Тап шул осорҙан башлап аҫабалыҡ хоҡуҡи статус ала. Әлбиттә, ерен, аҫабалыҡ хоҡуғын юғалтмаҫ өсөн аҫаба башҡортҡа ырыу берлеген дә күҙ ҡараһындай һаҡлау зарурлығы тыуа. Ул замандарҙағы рус йәмғиәтендә бөтөнләй икенсе күренеш күҙаллана: берәүҙәре (крәҫтиәндәр) хужалыҡ эштәре менән мәшғүл, икенселәре (дружинниктар) яугирлыҡ хеҙмәтендә, һәм уларҙың хоҡуҡи статустары ла һис тап килмәй. Ә башҡорттарҙың көнкүреше лә, хәрби хеҙмәте лә, ғөрөф-йола башҡарыуҙары ла бер хоҡуҡи ерлектә башҡарыла. Шулай итеп, аҫабалыҡ хоҡуғын башҡорттарҙың ырыу берлеген нығытыусы фактор рәүешендә ҡарау ысынбарлыҡҡа тап килә.

Әйтергә кәрәк, ырыуҙар тормошо, уларға бәйле мәғлүмәт халҡыбыҙҙың эпос-риүәйәттәрендә, йырҙарында, ғөмүмән, ауыҙ-тел ижадында ла киң сағылыш таба. Ырыуҙар феномены башҡорттоң рухи донъяһына ла ыңғай йоғонто яһаған, халыҡ аңында уларҙың айырымлығына баҫым яһалмай, ә башҡорт исеме аҫтында формалашҡан берҙәмлеге данлана.

**Һәр милләттең үҙ йөҙө, милли асылы бар. Һиндтар булһынмы, курдтармы, индеецтармы, Латин Америкаһы халыҡтарымы, йә булмаһа, ниндәйҙер башҡа этник төркөмдәрме - беҙ уларҙың этник-мәҙәни үҙенсәлектәрен телевидение, матбуғат баҫмалары аша күрәбелә алабыҙ. Ә бына ижтимағи ҡоролошо башҡорттарҙыҡына оҡшаған халыҡтар бармы икән?**

- Мин ошо хаҡта байтаҡ ваҡыт уйланып йөрөнөм. Тарихсы буларaҡ, мине шотландтарҙың XVIII - XIX быуаттарҙа йәшәгән мәғрифәтселәре эшмәкәрлеге ҡыҙыҡһындырҙы. Улар шотланд халҡы кландары хаҡында яҙа. Мине ғәжәпләндергәне лә шул булды: шотланд кландарының ижтимағи ҡоролошо башҡорт ырыуҙарыныҡы менән ныҡ оҡшаш. Ошо хаҡта яҙған мәҡәләләрем дә бар. Шотландтар бер уртаҡ ата-бабаларынан үрсеп ойошҡан төркөм-кландарға бүленеп йәшәй, һәр береһенең үҙ юлбашсыһы булып, үҙҙәре биләгән территорияла көн итә. Шотланд кландары, бигерәк тә уларҙың таулы өлкәләрҙә йәшәүселәре, ирек һөйөүсән булып, ҡоралы яугирҙары менән дан тота, үҙ хоҡуҡтары өсөн сюзерендарына - Бөйөк Британия хакимлығына ҡаршы XVIII урталарына тиклем хәрби көс ҡулланып, көрәш алып бара. Уларҙың тик үҙҙәренә генә хас милли кейемдәре, йыр-бейеүҙәре, музыка ҡоралдары була.

Башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғы уларға үҙ ерендә үҙаллы йәшәү мөмкинлеген биргән кеүек, шотланд кландары ла үҙҙәренә хас йәшәү рәүешен һаҡлау хоҡуғына эйә була. Башҡорттарҙың хакимы һәр саҡта ла уларҙың еренән ситтә - Сарайҙа, Мәскәүҙә булған кеүек, шотландтарҙың монархы лы улар ерендә йәшәмәй - ул Эдинбургта, йә Лондонда. Башҡорт та, таулы шотланд та үҙ ерендә үҙенсә йәшәүҙе хуп күрә, хоҡуҡтарын боҙоусыға йән аямай ҡаршы тора. Башҡорт һәм шотланд ихтилалдары бер үк заманда һәм, башлыса, бер үк сәбәптәр арҡаһында тоҡанып китә. Батша властарына алдында башҡорт проблемаһы нисек киҫкен торһа, Бөйөк Британия королдәре лә шотландтарҙы империя составына ни рәүешле тулыһынса интеграциялау хаҡында баш вата.

1746 йылдағы һуңғы якобит ихтилалы баҫтырылыуы менән Бөйөк Британия хөкүмәте "Тыйыу тураһында Акт" тип аталған закон ҡабул итеп, шотландтарға ҡорал йөрөтөүҙе, таулы шотландтарҙың традицион милли кейемен, символикаһын, музыкаһын һәм волынкала уйнауҙы, урындағы гаэль телендә уҡытыуҙы һәм аралашыуҙы ҡәтғи тыя. Батша хөкүмәтенең башҡорттарҙы бойһондороп тотоу маҡсатында шулай уҡ махсус закондар ҡабул итеүе, тимерлектәрен юҡ итеп, һуғыш ҡоралдарын эшләүҙе тыйыуы, йыйындар уҙғарыуҙы рөхсәт итмәүе шотланд һәм башҡорттарҙың ижтимағи тормошонда һәм яҙмышында уртаҡлыҡтар булыуын раҫлай. Әйткәндәй, шотландтарҙың яугирлыҡ маһирлығын иҫәпкә алып, Бөйөк Британия армияһында уларҙың айырым ғәскәри берәмектәре булдырыла (шотланд полктары), улар һуғыштарҙа ҡатнашып, дан ҡаҙана.

**Ырыу ҡоролошоноң хоҡуҡи нығыныуы башҡорттарҙың артабанғы йәшәйешенә лә хәл иткес йоғонто яһанымы икән?**

- Башҡорттарҙың Алтын Урҙа осоронан бирле һаҡлана килгән йәшәйеш ысулы Мәскәү дәүләтенә ҡушылғас та, Рәсәй империяһында ла артыҡ үҙгәреш кисермәй ҡала бирә. Аҫабалыҡ хоҡуғы менән бер рәттән, ырыуҙарға ғына хас идара итеү ысулдары рус батшалығы яғынан тыйылмай, административ-территориаль бүленеш тә, ғәскәри хеҙмәтте ойоштороу ҙа ырыу ҡоролошо ҡанундарына ярашлы башҡарыла. Оҙайлы башҡорт ихтилалдарына ҡарамаҫтан, Рәсәй империяһы башҡорттарҙың ырыуҙар системаһын да, аҫабалыҡ статусын да юҡ итеүгә баҙнат итмәй.








**✓ *Ҡылыс, уҡ-һаҙаҡ, һөңгө кеүек яу ҡоралдарының ысын булыуы мотлаҡ. Һәр ырыу үҙенең гербын эшләтә ала, бының өсөн геральдик материал да бар: һәр ырыуҙың ҡошон, ағасын, оранын, тамғаһын ҡулланып була.***

# БЕР САФҠА!

## ашырырҙай хыял



### ЮЛДАШ ЙОСОПОВ:

*Башҡорттар боронғо замандарҙан Көньяҡ Уралға ереккән, был ерҙәр үҙаңыбыҙҙа изге Ватаныбыҙ образын һынландыра. Алтын Урҙа осоронда, бигерәк тә Туҡтамыш ханлыҡ иткән заманда ғәскәри хеҙмәттәре өсөн махсус суярғалдар - ер биләмәләре хан бүләге рәүешендә тапшырылған. Бындай бүләктәргә айырым яугирҙәр түгел, ә тотош ырыуҙар лайыҡ була.*

Башҡорттар өсөн кантон системаһы булдырылып, уларҙың хәрби сословиеға күсерелеүен шул уҡ тарихи параллель итеп ҡарап була.

Короллектә башбирмәҫ шотланд кландары мәҙәниәте, уларҙың милли атрибутикаһы ул заман законлары нигеҙендә тыйылыуға ҡарамаҫтан, әлегә тиклем һаҡланып ҡалған. Ул ғына ла түгел, бөгөнгө Англияла тик шотланд кландарының милли мираҫынан хасил булған этник байрамдар уҙғарыла, ә Скотланд Тату тип нарыҡланған хәрби оркестрҙар байрамы тамашаһында йыл һайын королева ғаиләһе лә ҡатнаша. Бындай байрам-парадтарҙа махсус әҙерләнгән шотланд кешеләре боронғо милли кейемдәрен кейеп, хәрби ҡоралдарын тағып, волынкаларында милли көймарштарын уйнап, тамаша ҡылып торған халыҡ алдында сығыш яһай. Бындай этник тамаша меңәрләгән сит ил туристарын да йәлеп итә, видеороликтар бөтөн донъяға тарала. Был осраҡта шотландтарҙың боронғо мәҙәниәте хәҙерге Англия дәүләте тарафынан танылып, барыһын да һоҡландыра алған тышҡы сағылышын таба ла инде. Бына нисек бит ул: бер тамаша аша шотландтар үҙ мәҙәниәтен бар донъяға белдерә!

**Тарих күҙлегенән ҡарағанда, ырыуҙарыбыҙҙы беҙҙең милли йөҙөбөҙҙө билдәләүсе саф башҡорт күренеше тип әйтеп буламы? Билдәле булыуынса, ҡайһы бер зыялыларыбыҙ ырыуҙар хәрәкәтен һис хупламай, уны архаик күренеш, трайбализм, йәғни милли тарҡаулыҡ хәүефен тыуҙырыуы ихтимал, тип, кире ҡаға.**

- Башҡорт менталитетын, уның милли булмышын ырыуҙарҙан башҡа күҙ алдына килтереүе лә мөмкин булмаҫ ине. Башҡорттар берҙәм этнос кимәленә лә ырыу ҡоролошо аша килә. Йәнә, шул уҡ шотландтарҙы миҫалға алайыҡ. Шотланд кландары мәҙәниәте бөтөн Британия кимәленә уны пропагандалаусы зыялы мәғрифәтселәр эшмәкәрлеге аша күтәрелә. Ә бит ҡасандыр был тыйылған мәҙәниәт була! Уға бер кемгә лә кәрәге булмаған архаика, иҫкелек ҡалдығы, тип ҡараусылар Британияла ла етерлек була. Әммә тап шотланд мәғрифәтселәре боронғо шотланд кейемдәрен, шул уҡ юбкаларҙы, тире бүректәрҙе, волынканы, кландар символикаһын бөтөн ил өсөн мөһим тарихи ҡомартҡы итеп баһалатыуға өлгәшә. Кландарҙың мәҙәни мираҫы дәүләт брендына әүерелә. Бына уларҙың "Тартан көнө" байрамын ғына алып ҡарайыҡ. Ул халыҡ-ара байрамға әйләнгән: Шотландиянан башҡа, Канадала, АҠШ-та, Австралияла, Яңы Зеландияла, Аргентинала уҙғарыла. Тартан - шотландтарҙың шаҡмаҡ биҙәкле туҡымаһы, унан киң билдәле ирҙәр юбкаһы - килт тегелә. Һәр кландың тик үҙенә генә хас биҙәкле тартаны була. Ошо көндә улар милли кейемдәрен кейеп, волынкаларҙа уйнап, клан гербтары һүрәтләнгән плакаттарын тотоп, ҡала урамдарына йөрөш-парадтарға сыға. Был байрам шотланд мәҙәниәтенең ҡабатланмаҫ брендды рәүешендә нығынған.

Беҙҙә лә үҙенең ырыуын белмәгән, йә иһә һанламаған башҡорт юҡтыр ул. Шул уҡ көнбайыш башҡорттары менән аралашҡанда уларҙың ниндәй ырыуға ҡарауҙары, ошо ырыу вәкилдәре нигеҙләгән ауылдары тураһында тарихи сығанаҡтарҙы дәлил итеп килтереү ҙә етә - ырыуын белгән һәм таныған кеше башҡортлоғон инҡар итмәй.

Шәжәрәләребеҙҙе тергеҙеү ҙә киң ҡолас алды, ә ырыуҙар тарихын өйрәнеү, ошо юҫыҡта ғилми тикшеренеүҙәр алып барыу, китаптар сығарыу кеүек ғәмәлдәребеҙҙе иҫкегә ҡайтыу түгел, ә боронғо мәҙәниәтебеҙҙе заманса кимәлгә күтәреү, тип аңларға кәрәк. Шуның өсөн дә башҡорт халҡының милли йөҙөн, уның булмышына хас һыҙаттарын беҙ ҙә бөтөн донъяға ырыуҙарыбыҙҙы презентациялау, йәғни махсус әҙерләнгән этномузыкаль тамаша, марш-парад аша күрһәтә алыр инек.

**Ысынлап та, һеҙ тәҡдим иткән этник проект Башҡортостандың киң билдәле брендына, башҡортсалап әйткәндә, милләтебеҙҙең йөҙөк ҡашына әйләнер ине. Әммә бындай милли тамашаға нигеҙ булырҙай өлгө Рәсәйҙә юҡ, барыһын да өр-яңынан башлап ҡоророға тура киләсәк, һәм был башланғысты ғәмәлгә ашырыу өсөн бихисап әҙерлек эштәре талап ителәсәк. Һеҙ ошо ырыуҙар парадын нисегерәк күҙаллайһығыҙ?**

- Парад баш ҡалабыҙҙа, Өфө майҙандарының йә урамдарының береһендә үткәрелергә тейеш. Парад составына атлы һәм йәйәүле ҡатнашыусылар инә. Һәр ырыу үҙ вәкилдәрен әҙерләй. Ырыуҙарыбыҙ дүрт тиҫтәнән ашыу булғас, тәүге парадҡа эрерәк ырыуҙарҙы ғына йәлеп итеү зарур, сөнки парад кейеме, аттар, башҡа амуниция барыһына ла етерлек булмаясаҡ. Парадта ҡатнашыусылар башҡорт яугирҙарының 1812 йылғы Ватан һуғышы осорондағы хәрби парад формаһында сығыш яһай, ул форма берҙәм өлгө буйынса тегелә. Ҡылыс, уҡ-һаҙаҡ, һөңгө кеүек яу ҡоралдарының ысын булыуы мотлаҡ. Һәр ырыу үҙенең гербын эшләтә ала, бының өсөн геральдик материал да бар: һәр ырыуҙың ҡошон, ағасын, оранын, тамғаһын ҡулланып була. Парадта ҡатнашыусылар һәм уларҙың аттары оҙайлы махсус әҙерлек үтә. Бының өсөн республикала джигитовка үҙәге булдырылып, унда һайланма юртаҡ аттарҙы аҫырау һәм парадҡа әҙерләү юлға һалына. Иң кәмендә 100-ҙән ашыу һыбайлы егет, 85-ләп ат кәрәк буласаҡ. Әле мин Йоматауҙағы ташландыҡ ат һарайҙарын тергеҙеү мөмкинлеген дә күҙ уңында тотам. Бындай махсус үҙәк республикабыҙҙа ат спортын үҫтереүҙе, уның килем килтерерлек тамашауи формаларын да ғәмәлгә ашырыуҙы тәьмин итер ине.

Яҡынса, парад стройын бына нисек күҙаллайым. Иң алдан парад командующийы - генерал килә. Уның артынан - ырыу башлыҡтары, старшиналар. Һәр ырыу вәкилдәре 1 линияға теҙелеп, 15 кешенән - 5 һыбайлы ҡурайсынан, 7 һыбайлы яугирҙан, йәйәүле 3 барабансынан тора. Сафта 7-нән 12-гә тиклем линия булыуы мөмкин. Парад барышында башҡорттарҙың хәрби марштары башҡарыла, барабан ҡағыу сафтарға берҙәм ритм биреп тора. Әлбиттә, парад сценарийы буйынса, яугирҙар тамашасыларға ҡорал ҡулланыу оҫталығын, төрлө джигитовка алымдарын күрһәтәсәк.

**Һеҙ тәҡдим иткән проект ғәмәлгә ашһын өсөн байтаҡ ҡына финанс сығымдары талап ителәсәк. Был эште атҡарып сығыу өсөн республика етәкселегенә мөрәжәғәт итеп, уның ризалығын алыу, финанс ярҙамына өмөт итеү урынлылыр, тип уйлайым.**

- Уныһы шулай. Халҡыбыҙҙың мәҙәни имиджын халыҡ-ара кимәлгә сығарырлыҡ, республикабыҙ бренды итеп ҡабул итерлек эште дәүләттән башҡа башҡарып булмай. Мәҫәлән, башҡорттарҙың боронғо хәрби формаһын, ҡорал-ҡорамалдарын, менге аттарға эйәр, йүгән кеүек әйберҙәрҙе эшләтеү өсөн 10 миллион һум тирәһе кәрәк булһа, унан башҡа аттарҙы өйрәтеү, һыбайлыларҙы әҙерләү, джигитовка үҙәген төҙөү һәм тотоу, башҡа кәрәкле эштәрҙе башҡарыу өсөн сығымдар талап ителәсәк. Әлбиттә, мөмкин булғанса, был башланғысҡа эшҡыуарҙарҙы, бизнес өлкәһе әһелдәрен йәлеп итеп булыр ине. Әгәр ошо проект ғәмәлгә ашһа, Башҡортостанда ваҡиғалы туризм мәсьәләһен хәл итеү өсөн яңы канал барлыҡҡа киләсәк. Башҡорт ырыуҙары парады тураһында видеороликтар эшләп, интернет селтәре аша реклама кампанияһын йәйелдереп, сит ил туристарын күпләп йәлеп итеп буласаҡ. Ул саҡта туризмдан алынған килем дә бермә-бер артасаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тарихсы Юлдаш Йосопов менән фәһемле әңгәмәбеҙ матур хыялдар менән генә түгел, аныҡ пландар тураһында һөйләшеү менән тамамланды. Иң тәүҙә ошо проектты аҡҡа төшөрөп, визуаль яҡтан һүрәтләп, алда торған эш документын булдырыу фарыҙ. Унан һуң, проектта ҡатнашырға теләүсе энтузиастарҙы, тарихсыларҙы, рәссамдарҙы, башҡа белгестәрҙе, эшҡыуарҙарҙы, республика һәм ҡала етәкселегенә вәкилдәрен, журналистарҙы саҡырып, проекттың презентацияһын уҙғарыу ошо яңы эште ғәмәлгә ашырыу йәһәтенән тәүге аҙым булыр ине. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, уҡыусыларыбыҙ?**

**Бәҙри ӘХМӘТОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**









***✓ "Ул ине! Тап үҙе, бары аяҡтары ғына юҡ ине. Мин вагондан сығып еткәнсе ҡайҙалыр китеп барҙы, тапманым", - тип һөйләй аҙаҡ әсәһенә барып. Был хәбәрҙән әсә ҡабаттан дәртләнеп китеп улын эҙләй башлай...***



Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА

# ЕҢЕҮҘӘН ҺУҢ

ПОВЕСТЬ

- Барыҫ булыу өсөн аяҡ та, ҡул да кәрәкмәй. Барыҫ булыу өсөн барыҫ йөрәге кәрәк! Һәм шакал булыу өсөн дә шулай.

- Улайһа, үҙегеҙгә ҡарап упкәләгеҙ, дуҫтар! Беҙ, бурҙар, һеҙҙең кеүек ғорур түгел, беҙ бары рәхәтлектә йәшәргә генә теләйбеҙ! - тигәненән һуң тағы ла ут асты Сергей. Уның автоматынан сәселгән пулялар мәмерйә таштарына бәрелеп, сарт-сорт килде. Эстәгеләр ҙә "телгә" килде. Тағы атыш тоҡанды. Ян-яғында унда-бында ут асыусы нөктәләрҙең тынып ҡалғанынан иптәштәре араһында ла юғалтыуҙар барлығын самалап ята Рамаҙан. Тик уларҙың кемдәр икәнлеген аңғарырлыҡ форсаты юҡ. Уға мәмерйә төбөнән килеүселәрҙе юҡ итергә, һис юғы, тотҡарларға кәрәк...

Атыштың иң ҡыҙыу мәлендә тышта ниндәйҙер тауыш ҡупты ла, тора-бара ҡысҡырыуҙар айырым-асыҡ ишетелде:

- Ура-а-а!

- Ур-р-ра-ааа!

Быны ишеткән Рамаҙан һикереп торҙо:

- Беҙҙекеләр! Егеттәр, атакаға-а! - Үҙе алыҫ түгел генә таш артында ятҡандың өҫтөнә һикерҙе. Уны атырға тип пистолетын тоҫҡағандың яурынына Батал ҡарттың ҡулынан ысҡынған хәнйәр осоп килеп тә ҡаҙалды. Китте ҡул һуғышы!

Тыштағы банда төркөмө эскә ҡысырыҡланды. Улар хәҙер мәмерйә стеналарына ышыҡланып атышты. Бындағыларҙың осона сыҡҡан Рамаҙан тыштан ҡасып ингәндәргә һөжүм итергә ынтылғайны ғына, ҡаршыһына Серый баҫты ла:

- Һәр хәлдә, минән оҙаҡ йәшәмәйәсәкһең! - тип тереп тигәндәй эсенә атып та ебәрҙе. Егет ауып барған ыңғайға Сергейҙың түшенән маткып тотоп, уны үҙ өҫтөнә ауҙарҙы ла, ике уртаға тура килеп ҡыҫылған автоматының тәтеһенә баҫты. Бурҙың эйәк аҫтына терәлгән көбәктән сыҡҡан ут шәлкеме бисараның түбәһен алып та китте. Яңы төркөм менән килеп еткән Василий уларҙы шулай ҡан эсендә бер-береһенә сат йәбешеп ятҡан килеш тапты.

Эңер төшөүгә йөк машиналары пансионатҡа аҙыҡ-түлек, йылы кейемдәр, әсирҙәр һәм... яралылар һәм үлгәндәрҙе тейәп ҡайтты.

### Зәлифә

–Йә-йә... Ас күҙеңде, ас... - Тарас Соломоновичтың бәрхәт тауышы алыҫтан ишетелгәндәй, ҙур усы ла маңлайына ауыр булып ятҡандай. Әйелеп төбәлгән йөҙө лә бер урында ғына тора алмай шылып йөрөгәндәй...

- Ромка... улым! Бирешмә, давай, бирешмә! Ромка, ишетәһеңме мине? - Табип егеттең ҡабаттан күҙҙәрен йомоуына ризаһыҙлығын белдереп, ҡәтғи өндәшә: - Ас күҙеңде, был - бойороҡ!

Рамаҙан бойороҡҡа буйһонорға итеп тырыша ла, күҙ ҡабаҡтарын баҫып килгән ауырлыҡҡа көсө етмәй, ҡабат упҡынға сума...

Мәле еткәс, күҙҙәре лә еңел генә асылды. Әйтерһең, йоҡоһо туйып уянып китте. Ҡайҙалығын шундуҡ аңланы - лазаретта. Тәҙрәгә текәлеп уйланып ултырған санитарка уның керфеге елпенгәнде ишеткәндәй булып әйләнеп ҡараны:

- Уяндыңмы?

Унан килеп йөҙөн һәм ҡалын итеп уралған күкрәк-эс тәңгәлен ентекле ҡарап сыҡты ла, күрше бүлмәләгеләргә өндәште:

- Яралы иҫенә килде!

Ул яҡтан ашығып ике-өс медсестра һәм аҙаҡтан битен-башын һыпырғылап табип инде. Тарас Соломонович ятып торған булған, күрәһең, өҫтө тәпәрләнгән, йөҙө йонсоу.

- Йә, батыр, хәлдәр нисек? - тип йылмайҙы ул уйынлы-ысынлы итеп.

Яуап биреүгә Рамаҙандың ирендәре лә, теле лә ҡыбырламаны. Был хәлен аңлаған егеттең күҙҙәре ҙур асылды. Аяҡтары булмауы ғына етмәгән, хәҙер һөйләшә лә алмаймы? Уның был хафаһын аңлап өлгөргән табип тынысландырырға ашыҡты:

- Борсолма, телең урынында, һөйләшерһең. Бер-ике урында эсәктәреңде генә көпшә менән ялғаным, башҡа нәмәләреңә теймәнем.

Рамаҙан уға рәхмәтле ҡарап ята ғына ала.

- Ысынын ғына әйтәм, ҡотҡара алыуыма ышанманым. Ҡаның да китеп бөткән, яраң да ауыр ине... Был ғүмеремдә бына инде нисәнсе тапҡыр әҙәм балаһының ғүмере кеше ҡулында түгел икәненә инанам... - Тарас Соломонович, биш тиҫтә йылдарҙан ашыу хирург хеҙмәтен башҡарған табип, донъя мөғжизәләрен бер бөгөн белә башлағандай булып аптырап баш сайҡай. - Бына шулай, улым... Артабан санитарҙарҙы тыңлап ҡына ятһаң, ай тирәһендә аяҡҡа... - тине лә, яралының аяҡһыҙлығын иҫләп, төҙәтеп ҡуйҙы, - арбаңа баҫырһың.

Ай һынлы айҙы ҡалайтып бында бикле ятып үткәрергә тип бошонғайны, иптәштәре күңелһеҙләнеп ятырға бирмәне. Медсестраларҙы бурылдата-бурылдата инәлеп килеп инеүселәр, ингәндә лә әйтер һүҙҙәре булмай шым ғына текәлеп ултырыусылар Матростан да, Василийҙан башҡа ла етерлек ине.

- Йоҡлаған кешегә текәлеп ултырыуҙары ни икән? - тип көлөп ҡуя ахырҙа шәфҡәт туташы.

- Әҙәмдәр араһындағы яҡынлыҡ һөйләшеү йәки ҡосаҡлашыу ғына түгел ул, аҡыллым, хистәрҙе телһеҙ ҙә аңлатып була, бик алыҫтан да тойоп була, - тип фәлсәфәүи генә итеп яуаплай уға доктор Соломон. - Һәм, ахырҙа, ана шул һүҙ менән әйтелмәгәндәре иң ысыны булып сыға ла инде.

Хәле ярайһы уҡ яйланғас, тороп ултыра, үҙаллы ашай башлағас, Василий Зинаидаһын эйәртеп килеп инде. Дуҫының ҡатыны уға тип бәлеш бешергән. Башта сәй ҡайната һалып, бәлеше менән һыйланы. Унан өҫ-башын алыштыртып, ай-вайына ҡуймай, керҙәрен йыуыуға алды. Зинаиданың һый-хөрмәтен, иғтибарын ул быға саҡлы ла аҙ татыманы, тик бөгөнгө ҡыланыштарында, мәғәнәле ҡараштарында ниндәйҙер бер сер бар кеүек тойолдо Рамаҙанға. Ул үҙе лә ҡатынға һынаулы ҡарап-ҡарап ҡуйҙы, әммә тура һорарға, дөрөҫөрәге, атап ҡына ниндәй һорау бирергә икәнлекте белмәне. Шуға ла бар сабырлығын йыйып, һағайып көттө генә.

- Рома, туғанҡайым, - тип һүҙ башланы, ниһайәт, Зинаида, аш-һыуын йыйып алып, ире янына килеп ултырғас. - Һинең менән һөйләшер һүҙебеҙ бар.

Унының күптән аңлағайны инде Рамаҙан. Шуға, дуҫтарына ҡаш аҫтынан һораулы текәлеп ултыра.

- Һин минең төрлө гәзит-журналдар, эҙәрмән ойошмалар, кешеләр менән хатлашыуымды беләһең, - тип һәр бер һүҙен һаҡ ҡына һайлап ала ҡатын. - Бынан ике йыл элек миңә бер гәзиттән хат өлгөһөн һалдылар. Унда бер комсомолка ниндәйҙер оло ҡатындың ауыҙынан ишеткәндәрен яҙып сығара. Ҡатындың улы хәбәрһеҙ юғалған була. Әммә үлем хәбәре юҡ. Ул хеҙмәт иткән частан яуҙаштары һалдаттың ауыр яраланып госпиталгә оҙатылыуын ғына хәбәр итә. Инде өмөт өҙөлдө тигәндә, 1948 йылда хеҙмәттән ҡайтып килгән бер ауылдаш егете, әлеге юғалған һалдатты Сочи вокзалында күрә. "Ул ине! Тап үҙе, бары аяҡтары ғына юҡ ине. Мин вагондан сығып еткәнсе ҡайҙалыр китеп барҙы, тапманым", - тип һөйләй аҙаҡ әсәһенә барып. Был хәбәрҙән әсә ҡабаттан дәртләнеп китеп улын эҙләй башлай...

Рамаҙандың ҡарашы ауырайғандан-ауырайҙы. Танауы аша ауыр итеп тын алды. Зина бер аҙ хафаға төшһә лә, дауам итте:

- Был хатта улын эҙләүсе ҡатындың исеме Әсмә Абдулхаева һәм ул 1920 йылда тыуған һәм 1939 йылда хеҙмәткә алынған улы Рамаҙан Абдулхаевты эҙләй, тиелгән ине. Тик был хатҡа инде арыуыҡ йылдар үткән булған, миңә ул һуң ғына килеп эләкте. Шулай ҙа адресын һорап алдым һәм хат ебәрҙем. Күп тә үтмәй, яуап килде, тик ул Зәлифә исемле икенсе ҡатындан булды...

- Зә-ли-ффә?..

- Эйе. Мин Зәлифәне эҙләп таптым.

- Уны нимәгә эҙләргә? Мин Зәлифәнең ҡайҙалығын былай ҙа беләм! - Рамаҙан ярһып китмәҫкә тырышып, тештәрен ҡыҫты.

- Көтөп тор, Рома, ҡыҙма, тыңлап бөт, - тип беләгенә ҡағыла Василий.

- Шунан, - тип дауам итә уны яҙалаусы Зина, - Зәлифәгә бында, Валаамда йәшәүсе фронтовиктың ни хәлдә һәм ниндәй йөҙ-һыҙатлы, холоҡло булыуын һүрәтләп бирҙем. Ул яуап хатында һалдаттың армияға алына торған йылды әсәһе менән ҡушарлап төшкән карточкаһын һалды. Һәм ул һүрәттә... һин, Рома...

Ҡатынының һөйләгәндәрен дәлилләүгә Василий түш кеҫәһенән фото сығарып та һуҙҙы:

- Бына.

Танауына терәлгән карточкаға бер генә күҙ һирпте лә, ҡарашын ала алманы ла ҡуйҙы Рамаҙан. Был аҡ-ҡара кәртешкәләгеләрҙең һәр кейем биҙәген, йөҙ-төҫ һыҙатын ул ысын буяуҙарында, нурҙарында бөгөнгөләй итеп хәтерләй бит. Әсәһенең башындағы, ҡыҙыл менән һары араһындағы ҡояш ерлегенә ваҡ сәскәләр төшөрөлгән яулығы байрамдарҙа ғына сығарып ябына торған ҡәҙерле нәмәһе. Өҫтөндәге күлдәге көрән, бишмәте ҡара бәрхәт ине. Күҙҙәре йәшкелт, йөҙө һарыраҡ, төҫө уңған аҡһыл ирендәрен күгәрткәнсе ҡымтыған. Аҙаҡ "уңайһыҙланып ултырып, уҫал ҡараған да ҡуйғанмын" тип көлгән булғайны.

Уның артында баҫып торған буйсан ҡаҡса егеттең өҫтөндә ҡара костюм, эстән кейгән күлдәгенең яғалары сигелгән. Башында атаһынан һаҡланып ҡалған күн кепка. Әсәһе олатаһының эшләпәһен сығарғайны ла, Рамаҙан, ризалашмай, ошо кепканы кейгәне...

Фотоны күргәс, ҡапыл асыуы баҫылғандай булдымы, әллә ысынбарлыҡтан ҡаса алмаҫын аңланымы егет, дауам иткәнде көтөп, тағы ла Зинаға төбәлде.

- Әсәйең юҡ инде, Рома-туғаным... Дүрт йыл элек донъя ҡуйған... Һине Зәлифә эҙләй.

- Зәлифәгә мин нимәгә? - Үсеккән балалай булып йөҙөн ситкә борҙо яралы.

- Мин һинең ошолай ҡыланырыңды ла, киреләнереңде лә белдем. Быларҙы Зәлифәгә лә яҙғайным, бына, ул һиңә төбәлгән хат һалған. Ошоларҙы уҡығандан һуң үҙең хәл итерһең, беҙ һине ирекһеҙләмәбеҙ.

Ҡатындың иренә бер ҡарап алыуы булды, унһы әлеге түш кеҫәһенән хат килтереп сығарып, дуҫының түшенә һалды ла, ирле-ҡатынлы йәһәтләп сығып та киттеләр. Рамаҙан башта күкрәген бешереп барған ҡағыҙға тейергә лә баҙнат итмәй ятты. Унан бер аҙ тынысланғас, ҡалтыранған ҡулдары менән һәрмәп алып, йырта-йырта асты.

Хаттың эстәлеге былай ине: "Һаумы, Рамаҙан! ("Һаумы" тигән тәүге һүҙ үк тертләтте. Ундай мөрәжәғәтте ишетмәгәненә лә, туған телендә уҡымаған-һөйләшмәгәненә лә күп йылдар бит инде) Аллағыуаттың йылы елдәренә ҡайнар сәләмдәрен ҡушып хат яҙыусы Зәлифә тип уҡырһың. Һинең ауылды ла, беҙҙе лә онотorға теләгәнеңде лә, ҡайтмаҫҡа булғаныңды ла беләм. Зинаида барыһын да аңлатты. Шулай ҙа хәлдәребеҙҙе яҙам әле.

1944 йыл беҙҙең атайға ҡара ҡағыҙ килде. Шул уҡ йылды әсәй үпкә сиренән вафат булып ҡуйҙы. Һеңлем менән икебеҙ тороп ҡалдыҡ. Ҡыш ныҡ һыуыҡ булғас, һинең әсәйең, Әсмә инәй, беҙҙе үҙенә йәшәргә саҡырҙы, бер йортҡа утын әҙерләүе еңелерәк булыр, тине. 1946 йыл Әминә апайың ағас ҡырҡҡанда ҡазаланып ҡалғайны һәм ике йыл түшәктә ятып үлеп китте. Уның өс балаһы ла әсәйеңә тороп ҡалды, атайҙары әйләнеп ҡайтма алманы. Беҙ шулай ҙур ғаилә булып йәшәп киттек.

Әсмә инәй һине үлгәнсе көттө. Күршеһе Шәриф ағайҙың улы үҙенде Сочи ҡалаһында күргән булған. Тик һөйләшеп өлгөрмәгән. Был хәбәрҙән беҙ барыбыҙ ҙа өмөтләндек һәм тағы ла хаттар яҙырға, төрлө урындарға мөрәжәғәт итергә

**✓ Бер үк әйбергә ҡарата төрлө кешенең төрлө фекерҙә булыуы ғына түгел, хатта бер үк кешенең дә ике ҡапма-ҡаршы фекер йөрөтөүе мөмкин. Кешеләрҙең фекерҙәренең, һәр дәүергә ярашлы, үҙгәреп тороу ихтималлығы ла бар.**



тотондоҡ. Мин һине ҡырҡ дүртенсе йылдан, хаттарың туҡталғандан алып эҙләйем. Әсмә инәй менән бер-беребеҙҙе йыуатып, дәртләндереп йәшәнек. Тик ул инде дүрт йылдан ашыу юҡ...

Башта яҙғайным инде, минең ғаиләм ҙур тип. Һеңлем еткән ҡыҙ булды, быйыл егермеһе тула. Әминә апайҙың балалары ла үҫтеләр инде, өлкән улы мәктәп тамамлай, ике ҡыҙы үтә йәшләй ҡалып, мине әсәй итеп өйрәнгән, ҡул араһындалар. Мал тотабыҙ, ҡош-ҡорт аҫрайбыҙ. Һаман да Әсмә инәйҙә, йәғни һинең йортоңда йәшәйбеҙ.

Беҙҙең хәлдәр бына ошолай. Һинең хәлеңде лә яҡшы беләбеҙ һәм иҫән-һау булыуыңа сикһеҙ шатланабыҙ. Һуғыш ауылыбыҙҙа өй береңсә ҡайғы таратып сыҡты, күптәр атайһыҙ һәм ирһеҙ ҡалды, ә һин бар көйө беҙҙе зар-интизар итәһең. Әсәйең ҡасан да бер әйләнеп ҡайтырыңа ышанып китте. Һәм мин дә ышанам. Һине һағынып көтөп - Зәлифә. 2 октябрь 1955 йыл."

* * *

Зәлифәнең башындағы әсәһенең яулығын әллә ҡайҙан таныны Рамаҙан. Пароход палубаһында бер яҡ ситтәрәк баҫып торған һәм төшөүгә ыңғайлаған төркөмдән кейеме менән дә, баҙнатһыҙ ятһырауы менән дә айырылып торған ҡатыны Зинаида менән Василий ҙа аңғарҙы. Йылы бишмәте аҫтынан оҙон булып төшөп торған күлдәк итәген ел тартҡылай, бер ҡулы менән шуны иплләй, икенсеһенә иҙәндә ултырған оло ғына сумаҙан һабын ҡыҫып тотҡан. Башҡалар кеүек этешмәй-төртөшмәй, сабыр ғына сират көтә. Уның был ҡылығынан, күндәм баҫып тороуынан уҡ үҙ ауыл ҡатын-ҡыҙы фигелен таныны ла, эсе өҙөлөп китте Рамаҙандың. Шул ваҡыт ни тиклем һағынғанлығын һәм тәкәтһеҙ ҡәҙерле нәмәләрҙән мәхрүм булғанлығын бөтә тәрәнлегендә тойғандыр ул. Ҡулын күтәреп, башта шыбырлап өндәште:

- Зәлифә... - Унан күкрәк тултырып тын алды ла, көр тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе: - Зәлифә-ә!..

* * *

Алға китеп әйткәндә, Рамаҙан менән Зәлифә ҡырҡ йылға яҡын тиң ғүмер итеп, бәхейлылыҡҡа ла бер-бер артлы ҡусәләр. Алты балалары булып, уларҙан таралған затырыуы ялбыр шәжәрә ағасын төҙөй. Валаамдағы дуҫтары менән беҙҙең билдәле геройҙарыбыҙ был ғүмерҙә бер генә күрешмәйҙәр әле. Ә утрауҙағы гәрип фронтовиктар пансионаты 1974 йылға тиклем эшләй. Уның кеүек лагерҙар ил буйынса ла биш-алтау була. Валаамдағын аҙаҡ ҡабаттан монастырь итеп тергеҙәләр, сиркәүе лә бар. Гәрип фронтовиктар хәтирәһен утрауҙа иҫке зыярат та, сиркәү эсендәге музей ғына һаҡлай. Улар шәһит булып ҡалған. Улар онотмай. Нисек булғанлығын. Енеүҙән һуң...

**(Аҙағы. Башы 18-25-се һандарҙа).**

ШАҢДАУ



**Әле яҙыша башларҙан алда уҡ "Ағиҙел" журналының "Әҙәби тәнҡит" рубрикаһына игтибар итә торғайным. "Тәнҡит" һүҙенең мәғәнәһен, уның урыҫ телендә "критика" тип яңғырағынын, әлбиттә, беләә инем. Фәлән яҙыусының берәй әҫәрен уҡып сығып, унда бер ниндәй ҙә етешһеҙлек тоймағас, "Уның нимәһен тәнҡитләргә йыйыналар икән?", тигән һорау тыуа ине һәр саҡ. Әлеге "әҙәби тәнҡит"те уҡый башлайым. Әммә, күпме генә тырышһам да, яҙыусының хикәйә йә китабы хаҡында уның фәҡәт яҡшы яҡтарын яҡтыртыуҙарынан башҡа нәмә таба алмайым. "Дөрөҫ, мин дә уны тик маҡтар ғына инем", тип уйлайым. Һуңғы осорҙа ул рубрикаға әллә ни әһәмиәт биргәнем юҡ. Әле "Киске Өфө"лә Таңһылыу Басированың ҡайһы бер йәш яҙыусыларҙы тәнҡитләүен, унан һуң гәзиттең киләһе һандарында Миләүшә Ҡаһарманова, Фәнил Күзбәковтарҙың шул темаға әйәреп яҙғандарын уҡып сыҡҡас, мин дә ошо хаҡта үҙемдең һүҙемде әйтеп ҡалырға булдым.**

# ӘЛЕГЕ ЛӘ БАЯҒЫ...

## тәнҡит хаҡында




Эйе, бар хисеңде, оҫталығыңды туплап, тырыша-тырыша яҙған ниндәйҙер бер әҫәреңә хаҡында башҡаларҙан тәнҡит һүҙе ишетеү еңелдән түгелдер. Хатта әле генә яҙыша башлаған йәш яҙыусы булыуыңа ла ҡарамаҫтан. Бөтә кеше лә бер иш фекерләмәй, әлбиттә. Бер үк нәмәгә төрлө кешенең ҡапма-ҡаршы фекере булыуы - тәбиғи. Ҡасандыр тәүге тапҡыр ҡәләмгә тотоноп, үҙемдең ҡарамаҡҡа "бик шәп" булған бер әҫәремде мөхәрририәттәребеҙҙең береһенә алып килгәс, баш мөхәррирҙең уны тотоп ҡына ҡарап: "Хәлил ағай, был әҫәрең бигерәк оҙон яҙылған, һин уны фәлән редакцияға алып барып ҡара", - тип, уҡып та тормай, кире ҡайтарып биргәне хәтеремдә. Ул яҙмаларымды "Фәлән" мөхәрририәттә ҡалдырып киттем. Уҡыныларымы-юҡмы уны унда, әммә яуап булмағас, минән яҙыусы сыҡмаҫ, ахырыһы, тип уйланым да, ҡулъяҙмаларымды башҡаса бер ҡайҙа ла ебәрмәй, һалып ҡуйҙым. Унда-бында таныштарымдың йә береһенә, йә икенсеһенә уҡытҡылайым. "Нишләп "Шоңҡар"ға бирмәйһең, һәйбәт бит", - тине бер яҙыусым яҙғандарымды уҡыны ла. Өфө ҡалаһына командировкаға барған бер мәлдә әлеге "Шоңҡар" редакцияһына инеп сыҡтым. Ул саҡта журнал редакцияһын етәкләгән Әмир Әминев ағайға дүрт хикәйәмде ҡалдырып киттем дә, тағы онотһом. Дөрөҫөн генә әйткәндә, әҙәбиәттән бөтөнләйгә алыҫ торған подполковниктың ҡулъяҙмаһын шундай абруйлы яҙыусы ағай уҡыр тигән өмөтөм дә юҡ ине. Әммә, күп тә үтмәй, хеҙмәт итеп йөрөгән гарнизонға Әмир ағайҙан хат килеп төштө. Бик игтибар менән уҡып, һәр яҙмама әҙип күҙлегенән сығып баһа биргән. Етешһеҙлектәрен дә күрһәткән, шул уҡ ваҡытта яҡшы яҡтарын да иғтибарһыҙ ҡалдырмаған. Шулар араһынан "Тау тотҡоно" тип аталған ҙур ғына әҫәремде журналда баҫып сығарасағы хаҡында ла әйткән. Был хәбәрҙе ишетеүемә балаларса шатланғаным да хәтеремдә. Ә инде ана шул әҫәремде хатта "повесть" тип атап, журналада баҫып сығарып (ул арала Әмир ағайҙың урынын Иршат Теләүембәтов алыштырғайны), шул йылда уҡ мине "йыл лауреаты" тип билдәләүҙәре артабан да ҡәләм тирбәтеүгә "канат ҡуйҙы", тиһәм дә хаталанмаҫмын. Ә "Шәүрә", "Робин бабай", "Балтатау мажараһы" исемле ҡалған өс әҫәремә "Киске Өфө", "Аманат" баҫмаларында "донъя күрһәттеләр".

Бының менән нимә әйтмәксемен? Бер үк әйбергә ҡарата төрлө кешенең төрлө фекерҙә булыуы ғына түгел, хатта бер үк кешенең дә ике ҡапма-ҡаршы фекер йөрөтөүе мөмкин бит. "Заман башҡа - заң башҡа" тигәндәй, кешеләрҙең фекерҙәренең, һәр дәүергә ярашлы, үҙгәреп тороу ихтималлығы ла бар. Мәҫәлән, күп кенә абруйлы яҙыусыларыбыҙҙың ҡасандыр совет ҡоролошон, коммунизмды, Ленин бабайҙы маҡтап яҙған әҫәрҙәрен үҙгәртеп ҡороу мәлендә бер килке "сәйнәп", хәҙер бөтөнләйгә онотток. Ә ҡасандыр Рәми ағай Ғариповтың "милләтселек рухы менән һуғарылған, хөкүмәт сәйәсәтенә тап килеп етмәгән" әҫәрҙәрен, киреһенсә, хәҙер яратабыҙ, данлайбыҙ.

Ошо хаҡта уйлана башлаһам, бер лаҡап иҫемә төшә. Бер ир ҡатынына:

- Ҡорот иҙеп бир әле. Бик файҙалы бит ул, аш һеңдереүгә лә яҡшы... - тигән имеш.

- Әй, өйҙә бөтөнләй ҡорот ҡалмаған бит, - ти икән ҡатыны.

- Ә, улай икән. Ҡорот булмауы - бигерәк тә яҡшы, - тигән хужа һис кенә лә бошонмайынса, - тешне ҡамаштыра бит ул, етмәһә, ашҡаҙанды асыттыра.

- Һине нисек аңларға, - тип аптырай хужабикә, - ҡайһы һүҙенә ышанырға һуң?

- Икеһенә лә. Береһе - ҡорот булған саҡта кәрәк. Икенсеһе - өйҙә ҡорот бөткән осраҡта...

Күптәрҙең тағы ошондай проблема менән осрашҡаны ла барҙыр. Әйтәйек, ситтән ҡарағанда матур ғына булып тойолған бер ғаиләлә аңлашылмаусанлыҡ килеп тыуа. Хатта улар айырылышыу хәленә барып етә. Һин уларҙың был хәлгә тарыуын бер ҙә генә теләмәйһең, был парҙарҙың икеһе менән дә яҡшы мөнәсәбәттәһең. Уларҙы татыулаштырыу ниәтендә һәр кемеһе менән айырым-айырым әңгәмәләшеп алырға уйлайһың. Шулай, бәхәстәге ғаилә башлыҡтарының береһе үҙенең хәләл ефетенең етешһеҙлектәре хаҡында һиңә эс серен аса. "Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ", тигән ҡарарға киләһен. Шул уҡ көндө был парҙың икенсе яртыһы менән осрашып, уның да проблемаһын һөйләтеп алаһың. Быныһы ла хаҡ һүҙ һөйләй бит, ауыҙыңа май булғыры! Нәтижәлә: икеһендә лә дөрөҫлөк, ә аралар боҙола, унан балалар зыян күрә... Ошондай осраҡтарҙа, бер-береңдең етешһеҙлектәренә күҙ йомоп, әлеге "тәнҡит" тигән нәмәне ситкә ҡуйып тороп, ҡырын яҡтарҙы "күрмәү" генә ғаиләне һаҡлап алып ҡаласағы хаҡында уларға кәңәш бирергә генә ҡала...

Шулай уҡ күп йәштәрҙең күңеленә ятҡан нәмәләр ололарға оҡшамауы һәм киреһенсә лә булыуы мөмкин. Кешеләрҙең психологияһы бихисап күп төрлө бит. Кемдер ниндәйҙер етешһеҙлекте тиҙ генә күрә һалып барыусан, әммә мин үҙем ундай һәләткә эйә түгелмендер, тимәксемен. Әлеге автор тарафынан тәнҡитләнгән Бануу Ҡаһарманова, Гөлнара Мостафина һәм башҡа әҙиптәрҙең һәр әҫәрен мин үҙем шәхсән яратып уҡыйым. Уларҙы тәнҡитләү тигән уй хатта башыма ла инеп сыҡмай. Ҡасандыр үҙен тәнҡитләүҙәре хаҡында яҙған Миләүшә Ҡаһармановаға килгәндә, был яҙыусының үҙ әҫәрҙәренә ҡарата айырыуса талапсан булыуы тойомлана. Хикәйәләрендә милләттәштәребеҙҙең ябай ғына итеп "ауылса" һөйләшкәндәрен шундай матур итеп күрһәтә белгән, шуның менән һинең ҡасандыр бала сағың үткән ауылыңды, әсәйеңде иҫләп, күҙҙәргә йәш килтерерлек итеп яҙған был ҡәләм оҫтаһының үҙен нисек итеп кенә тәнҡитләйһең инде. Яҙыусы Фәнил Күзбәков ағайҙың "ҡәләмдәштәрҙең туҡһан биш процентына әҙәби тәнҡиттең кәрәге юҡ" тигәне менән дә килешәм. Бәлки, башҡорт теле буйынса махсус белемем булмағанғамылыр (һөнәрем буйынса - хәрби табипмын), яҙыусылар араһындағы тәнҡитте бөтөнләйгә тиерлек аңлап етә алмайым. Шулай ҙа, күптән түгел яҙыша башлаған бәгзе авторҙарға (баштараҡ иҫкә алынған Әмир Әминев ағай һымаҡ), йыбанмай, үҙенә генә хат ебәреп, төҙәткеләп алыу кәрәктер, тип уйлайым. Нисек кенә гәзәл һәм хаҡ булмаһын, гәзит, журнал биттәрендә үҙе хаҡында тәнҡит һүҙҙәре ишетһә, һәр кемдең дә "һеркәһе һыу күтәрә алмауы" бар. Тәнҡитсегә ҡарата, Миләүшә һылыу әйтмешләй, дошманлыҡ хисе уянмаған хәлдә лә, эстән генә "ҡылтаяһың" инде ул...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӘЙ - ЙӘШЕЛСӘ МӘЛЕ

■ Статистика күрһәтеүенсә, донъялағы үлемдең күпселек осрағы йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән. Был сирҙәргә килтереүсе сәбәптәр араһында тейешле кимәлдә йәшелсә һәм емеш-еләк ашамау ҙа тора. Америка ғалимдары билдәләүенсә, йөрәк ауырыуынан үлеү осрағының һәр етенсеһе емеш-еләкте аҙ ашау, ә һәр ун икенсеһе йәшелсә ҡытлығы менән бәйле. Быны ир-егеттәр миҫалында асыҡ күрергә була. Ҡатын-ҡыҙҙар үҫемлек ризыҡтарын яратып ашай ул, ә бына көслө зат уны аҙыҡҡа ла иҫәпләмәй. Диетологтар әйтеүенсә, емеш-еләк менән йәшелсә - һәр кешенең өҫтәлендә булырға тейеш, тап улар иртә үлемде иҫкәртергә мөмкинлек бирә. Ә бөгөн бөтөн донъяла кешене калориялар, витаминдар менән туҡланырға саҡыралар, шуларға өҫтөнлөк бирәләр. Белгестәр көнөнә 300 грамм емеш-еләк, 400 грамм йәшелсә, шул иҫәптән ҡуҙаҡлыларҙы ла ҡулланырға кәңәш бирә. Борондан ата-бабаларыбыҙ ҙа белгән быны, ҡара ергә аяҡ баҫҡас та йыуаһын, ҡуҙғалағын, ҡымыҙлығын, шулай уҡ кесерткән кеүек үләндәрҙе лә ризыҡҡа тотона ла башлаған, һуңғараҡ еләк-емеше лә өлгөргән. Исмаһам, йәйге миҙгелдә йәшелсә, еләк ашап кинәнегеҙ, бер ыңғайы һаулығығыҙ ҙа нығынып ҡалыр.

■ Тормошобоҙ еңелләште хәҙер, өйҙән сыҡмай ғына онлайн рәүештә кейем-һалым, ризыҡ һатып алабыҙ. Эксперттар тиҙҙән кеше медицина хеҙмәттәрен дә онлайн ала башлаясаҡ, тип белдерә. Әле үк йыл һайын телемедицина сегменты 20 процентҡа үҫә. "Российская газета" яҙыуынса, Рәсәйҙә дистанциялы медицина консультациялары ла 40-50 процентҡа артасаҡ. Әйткәндәй, телевизорҙан медицина тауарҙарын башлыса 25-40 йәштәге аудитория һатып ала. Улар уҡ табиптар менән дә онлайн аралашыуға өҫтөнлөк биреүе бар. Законға ярашлы, табип пациентының сәләмәтлеге торошон дистанцион күҙәтергә хоҡуҡлы, тик быны өсөн улар күрешеп, табип диагноз ҡуйған булырға тейеш. Ситтән тороп ул дауалауҙы үҙгәртә, уның йоғонтоһон күҙәтә ала. Шулай уҡ закон беҙгә "икенсе фекер" хеҙмәте менән дистанцион ҡулланырға мөмкинлек бирә, мәҫәлән, операцияға әҙерләнгән мәлдә бер табип тарафынан ҡуйылған диагнозды икенсе белгестән дөрөҫләтеү уға инә. Шуныһы ла ҡыҙыҡ, интернет аша мөрәжәғәттәр күберәк гастроэнтеролог, дерматовенеролог, невролог, гинеколог белгестәргә. Уларҙан һуң отоларинголог, уролог, эндокринологтар килә. Психологтарға мөрәжәғәттәр был исемлектә 6 процент тирәһе. Ә бына педиатр менән терапевтарға пациенттар шәхсән күренергә тырыша.

■ Огайо университеты иҫәпләп сығарыуынса, уртаса статистик кешегә йыл һайын 3 аҙна отпуск талап ителә. Тап ошо ваҡыт эсендә көс йыйып, сәләмәтлекте нығытып өлгөрөп була. Һәм отпускыны диңгеҙ буйында, һис булмаһа, ҡаланан ситтә үткәреү дөрөҫ. 4 көн бер нәмә лә эшләмәйенсә ял итеү ҙә яҡшы һөҙөмтә бирә. Тикшеренеүҙәрҙә 30-60 йәштәге кешеләр ҡатнашҡан. Уларҙы 6 көнгә Калифорнияның бер курортына ял итергә ебәргәндәр. Һөҙөмтәлә, стресс һәм хәүефләнеү кимәле түбәнәйгән, иммун системаһы менән бәйле гендарҙың әүҙемлеге көсәйгән. Ҡайһы бер эксперттар әйтеүенсә, отпуск тап ошолай - аҙ көнлө, ләкин йыш булырға тейеш. Һәр 5-6 ай һайын 7-шәр көн ял дөрөҫ, ти улар. Сөнки 12 көн буйы ял итеүҙән кеше ялҡаулана ла, иммунитеты ла түбәнәйә.

РУХИӘТЕБЕҘ

**Хәйбулла районы Һаҡмар-Наҙарғол ауылының үр яғында, Һаҡмар туғайындағы ғәжәп күркәм урында 2019 йылдың 14 июнь көндө бер юлы ике бәйге үтте. Гүйә, ике ҡанатын ҡағып, Уралтау иңләп осҡан Аҡбуҙатты менеп, Уралбатыр менән Һомай килеп төштө. Йыйылған халыҡҡа фатиха биреп, ике илаһи ҡанат бүләк итте рухи батырҙарыбыҙ: сәсәнһүҙ оҫталарына - йыр-моң ҡеүәһе, ҡул эше оҫталарына - милли биҙәктәрҙе тергеҙеү ҡомары! Ҡупшы сәхнәлә Мөхәмәтйән йыраусы Ҡаҙаҡбаев хөрмәтенә Төбәк-ара асыҡ сәсәндәр бәйгеһе башланды, йәнәшәләге аулаҡ аласыҡтарҙа - Әсмә Усманова иҫтәлегенә "Гәләбаш тауы буйында" тип исемләнгән милли кейем оҫталары конкурсы теҙелеп китте.**

# ГӘЛӘБӘШТӘ...

## йыраусылар һәм милли кейем оҫталары йыйыны

Хәйбулла төбәгенең уникаль халыҡ ижады һандығы - милли ҡурсаулыҡ булыуы хаҡында Мөхәмәтйән олатай менән Әсмә инәй икеһе бер булып гел әйтә килде: беҙҙәге - ауыҙ-тел ижады, тәбиғәт, кешеләр яҙмышы, шәжәрә, йыр, ҡурай, бейеү, милли кейемдәр - мәңге лә бөтмәҫ бәрәкәт. Улар икеһе лә бер ниндәй ҡаршылыҡҡа, ауырлыҡҡа, ситләтеүгә ҡарамай, ошо хазинаны һаҡланы һәм мөмкин булғандың барыһын эшләп, белгәнен башҡорт халҡына тапшырҙы. Илдән алғанынды илгә ҡайтарыу бурысы менән йәшәнеләр. Был - уларҙың тарихи миссияһы булғандыр. Урал батыр ораны менән Һомай моңо кемгә генә ҡағылмай, ишетелмәй, кемде генә илһамландырып-байытмай, әммә бик һирәктәр генә был ҡотбәрәкәтте халыҡҡа өләшә.

Аҡъяр ауылы егет-ҡыҙҙары "Гәләбаш тауы буйында" уйынын башлай. Риүәйәттәге гәләбаш күҙ алдына килә. Бөгөн донъяның ике генә музейында - Дрезденда һәм Санкт-Петербургта һаҡланған башҡорт гәләбашы өлгөләре, емелдәп-сылтырап, Һаҡмар буйҙарын йәмләй.

"Һаҡмар буйында, Әбеш ауылы аръяғында, Төрткән яғында, бер бәләкәй тау бар - уны Гәләбаш түңе, тиҙәр. Борон шул тау башында ҡайындар менән уратылған аулаҡ аҡланда ҡыҙҙар йыйылып уйын ҡорған. Бай ҡыҙҙары үҙҙәренең гәләбашын ҡайынға элеп торған. Лыс көмөштән генә булғас, гәләбәш әллә ҡайҙан уҡ йылтырап күренә икән. "Селтәр элдем ситәнгә..." тигән таҡмаҡта ла шул биҙәүес хаҡында һүҙ бара бит - ҡыҙҙар ауыр көмөш тәңкәнән торған селтәр, һаҡал, гәләбаштарын ағасҡа, ситәнгә, кәртәгә элеп тороп та уйнаған. Күҙ алдында бит. Етмәһә, майҙанды ла йәмләй..." Был иҫтәлек һүҙҙәре - Әсмә инәй һөйләгәндәрҙән. Уның хыялы тормошҡа ашты - Хәйбулла районы ҡатын-ҡыҙҙары уның баласаҡ хыялын балҡытып торған гәләбашты - башҡорт ҡыҙҙарының баш кейемен тергеҙеп, Һаҡмар буйында уйын ҡорҙо.

Район мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Лариса Рәшит ҡыҙы Мәмбәтова менән өлкән методист, район "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Миңзифа Ибраһим ҡыҙы Ишемғоловалар Әсмә инәйҙең яҡты рухына бағышлап, был йыйынды Төбәк-ара асыҡ конкурс тип иғлан итте. Әбеш ауыл советы биләмәһе башлығы Таһир Мөғлөтдин улы  Юнысов бөтә тирә-яҡ ауыл оҫталарын аяҡҡа баҫтырып, йыйнаҡ сәхнә эшләтте, мәғәнәле эмблема, байраҡтар элдерҙе, аласыҡтар, аш-һыу, ял итеү урындары, тирмәләр ҡорҙорҙо. Ҡунаҡсыл һәм хәстәрлекле, ихлас хужалар килгән ҡунаҡтарҙың һәр береһенә күргәҙмәлек тыныс урын, ял итерлек шарттар булдырҙы. Иң матуры, әлбиттә, йырлап аҡҡан Һаҡмар буйы үҙе ине.

Арҙаҡлы йыраусы Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев репертуарынан оҙон көйҙәр, мөнәжәттәр, ҡобайырҙар башҡарыусылар Хәйбулла ауылдарынан ғына түгел, тирә-яҡ райондарҙан, хатта Өфөнән дә килгәйне. Танылған ҡурайсы Юлай Ғәйнетдинов етәкселегендәге талапсан баһалама комиссияһына ҡатнашыусыларҙы тыңлап, һәр береһенә лайыҡлы баһа биреү өсөн арыу уҡ түҙемлек, диҡҡәт һалырға тура килде. Ю. Ғәйнетдинов Мөхәмәтйән ағайҙың оло талант эйәһе булыуын, уны халыҡ-ара кимәлдә лә баһалауҙарын, Танимота тигән Япония ғалимының уны тыңлар өсөн генә Башҡортостанға килеүен һәм йыраусыны  Бөтөн донъя йыр фестиваленә саҡырып ҡайтыуын, 2000 йылда бергәләп Японияға сәйәхәт итеүҙәрен ентекләп бәйән итте. "Ошондай оҙон көйҙәрегеҙ йәшәй икән, милләтегеҙ ҙә йәшәйәсәк", - ти япон ғалимы Мөхәмәтйән ағай менән осрашыуҙың йомғаҡлау һүҙе итеп. Был хәҡиҡәттең бөгөнгө оҙон көй башҡарыусы йырсыларыбыҙ аңына һалыныуы ҡыуаныслы. Әлеге бәйгелә ҡатнашыусылар ҙа бөйөк йыраусының васыятына, мираҫына тоғролоҡ һаҡлауҙың төп талап булыуын яҡшы аңлаған булып сыҡты. Хәйбуллалар үҙҙәре Илдар Юнысов менән Камил Илембәтовты Мөхәмәтйән ағайҙың мираҫын дауам итеүселәр тип иҫәпләй. Былтырғы бәйгелә төп еңеүсе исеме лә үҙҙәренекенә - Камил Илембәтовҡа бирелгән. Әммә был юлы бәйгенең төп бүләктәрен дандары әллә ҡайҙарға таралған Баймаҡ районы Буранбай ауылы егеттәре - Рәмил Ҡотдосов менән Аралбаевтар яуланы һәм конкурстың кимәлен ысынлап та Мөхәмәтйән йыраусы кимәленә лайыҡ юғарылыҡҡа күтәрҙе...

Ә икенсе бәйгелә иһә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейемен ратҡан, аңлаған, ихлас күңелдән тергеҙергә, таратырға тотонған оҫта ҡуллылар - Учалынан (милли орнаменттар, кейемдәр, биҙәүестәр белгесе Азат  Салауат улы Ғарипов етәкселегендә), Йылайырҙан (Юлдыбай ауылында ағинәйҙәрҙе әйҙәүсе, биҙәүестәр һәм башҡорт кейеме өлгөләрен ижад итеүсе Миләүшә Моратова етәкселегендә), Ырымбур өлкәһенең Орск ҡалаһынан (әллә нисә йылдарҙан бирле күркәм милли кейем кейенеп, башҡорт мәҙәниәтен ололоҡлап-пропагандалап йөрөүсе фиҙакәр йәнле шағирә һәм һәүәҫкәр көйҙәр авторы Минзәлә Аҡҡошова етәкселегендә) ҡатнашты. Бәйгене шулай уҡ Бөрйәндән ( Иҫке Собханғолдан ҡашмау оҫтаһы Таңһылыу Ғимранова әйҙәүендә), Сибайҙан (милли кейемде ятыусы һәм үҙенсә генә зауыҡ менән кейеп йөрөп таратыусы Мәмдүҙә Илбәкова менән "Талир тәңкә " милли ке-







йемдәр әҙерләү ойошмаһының Сибай сәнғәт колледжындағы бүлексәһендә оҫтарған дүрт һылыу ҡыҙ), шулай уҡ Әбйәлилдән (Тәҙзимә Махиянова - Хәйбулла ягының ҡоҙағыйы, боронғо кейеҙ-ҡораманы, һаҡал-ҡашмауҙарҙы һаҡлаусы һәм тергеҙеүсе, Вәзәм ауылына килен булып төшкән талантлы һәм булдыҡлы Гөлназ Суринаның әсәһе) һәм Хәйбулла районының байтаҡ ҡына ауылдарынан йәмғеһе иллегә яҡын оҫта башҡорт ҡатындары күтәрмәләне. Сөбханаллаһ, әссәләмәғәләйкүм, иҫәнмеһегеҙ, тип улар сыуаҡ көндө, һылыу туғайҙы, бер-береһен сәләмләне!



Ҡырҡтан ашыу бай ырыулы башҡорт халҡының кейемдәре күп төрлө, атамалары ла һәр төбәктә үҙенсә. Шуға күрә уларҙы таныуға, дөрөҫ атамаһын белеүгә һәм тергеҙеүгә әлеге ваҡытта ныҡ иғтибар бирелә. Әҙәби телдә һәм махсус әҙәбиәттә, ғилми хеҙмәттәрҙә һәм халыҡ араһында осраған һәр бер исем-атама иҫәпкә алына, теркәлә, һүҙлектәр төҙөлә, киренән белгестәргә һәм бөтә халыҡҡа еткерелә. Атамалар менән бергә кейемдәр ҙә кире ҡайта, иҫкә төшә, элекке мәғәнәһе менән үҙ урынын ала. Яңы биҙәүес элементтары ла халыҡсан дөрөҫ атамаһы менән ҡулланылышҡа инә. Шуға күрә кейем-һалымдың, биҙәүестәрҙең дөрөҫ исемен беләләр, биҙәккә һалған һәр бер бөртөк мәрйен, ҡортбаш, тәңкә, таҫма, көмбәҙ, өрфөйә, ҡытай, гәрәбә, аҡыҡ, сулпы, ука, аҡташ, бәйғәмбәр борсағы - һәр нәмә ни өсөн ҡуйылғанын белеп-аңлап эшләргә тырышалар. Был яҡтан оҫталар бик яуаплы ҡарай.

"Гәләбаш тауы буйында" конкурсы алдына башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының баш кейемдәре - гәләбаш, ҡашмау, текә ҡалпаҡ, таҡыя өлгөләрен баһалау маҡсат итеп ҡуйылды. Шулай уҡ баш кейемен биҙәп торған сәсҡап (елкәлек, елкәсуҡ), сәсмау (сәсмәүер, ҡаралыҡ), әйәкте уратып ҡаплаған һағылдырыҡ (ҡаптырма,элмәк, эйәклек, ҡаплауыс, эйәкмәрйен), сикәнән төшөп торған сикәсуҡ (сикәһырға, сикәтәнкә) һәр милли кейемдә кәрәк була. Конкурстың йәме булған - һаҡал, селтәр, яға, түшелдерек, иҙеү, хәситә, алмиҙеү - шулай уҡ айырым баһаланды.

Баштан уҡ шулай һөйләшелде: бөгөн башҡорт милли кейемдәрен тергеҙеү өс йүнәлештә бара һәм өс төркөмгә бүлеп ҡарала: сәхнә кейеме (ҡурайсы, ҡумыҙсылар, йырсы, бейеүселәр кейеме, ансамбль, мифик һәм әкиәти образдарҙың костюмы), стилләштерелгән этник кейем (башҡорт милли орнаменты, биҙәүестәре, кейем тегеү-биҙәү үҙенсәлектәре менән таныулы, халыҡ араһында, көндәлек тормошта кейерлек), этнографик кейем (боронғо башҡорт ырыу үҙенсәлектәре һаҡланған, ҡомарткы булған һәм тарихи-фәнни яҡтан нигеҙләнгән, асыҡ танылып торған).

"Гәләбаш тауы янында" бәйгеһенә килгән оҫталарҙы берләштергән бер дөйөм һыҙатты әйтеп китмәй булмаҫ: улар бер-береһенән эшен ихтирам менән өйрәнә, һаҡсыл һәм изге ниәттә бер-береһенә бар белгәнен өйрәтә. Мин бигерәк тә Йылайыр оҫталарының һүҙен онота алмайым: "Беҙ - оло изге эш башлап торабыҙ, милли кейемдәребеҙгә кейенеү генә түгел, күҙ һалғандан уҡ йөрәктәребеҙгә һағыш һәм иркәлек тула ине, тулҡынланыуҙан ҡулдарыбыҙ ҡалтырап, ҡуҙҙәребеҙ йәшләнә торғайны... Башҡорт кейемен кейеү - оло дәрәжә, бәхет бит ул, ошо көндө күрҙек, Аллаһыға мең шөкөр, илебеҙ имен булһын! Халҡыбыҙға, балаларыбыҙға боронғо аҫыл кейемдәребеҙҙе бай итеп яңыртып кейҙереү - тормошобоҙҙоң йәме, мәғәнәһе һымаҡ булып китә хатта. Һеҙ беҙҙе маҡтамағыҙ, етешһеҙлектәребеҙҙе күрһәтегеҙ, үҙегеҙ күреп-белгәнегеҙҙе әйтеп китегеҙ."

Иң яҡшы тип табылған баш кейеме, биҙәүестәрҙе һайлаған баһамандар: Хәйбулла районы тыуған яҡты өйрәнеү музейы директоры, тарихсы Рәзилә Байгусҡарова, Сибайҙа һәм Хәйбулла яғында булып торған милли кейем һәм мөнәжәт байрамдарының даими иғәнәсеһе, Өфөлә "Башгосбланк"дәүләт унитар предприятиеһы генераль директоры, эшҡыуар Гөлсәсәк Ҡадир ҡыҙы Әлибаева, Учалы ҡалаһында уҡытыусы, милли орнамент һәм кейемдәр буйынса фәнни хеҙмәттәр авторы, рәссам Азат Салауат улы Ғарипов менән мин үҙем, баһалама рәйесе булараҡ, бергә ҡараныҡ. Бәйге ифрат алсаҡ, халыҡсан рухта барҙы: оҫталар иркенләп йөрөп фекер алышты, һәр күргәҙмә аласыға алдында күмәк кәңәш ҡоролдо, һәр кем үҙ эшенең ябай ғына түгеллеген белә. Милли кейем үҙенсәлектәрен асыҡларға тырышыу, һорауҙарға яуап алыу, бигерәк тә етешһеҙлектәрҙе күреү һәм төҙәтеү өсөн килгәйне улар. Республиканың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы күптән инде "Милли кейемдәге хаталарҙы төҙәтеү өҫтөндә эш" иглан итте, һәр оҫта үҙ эше өсөн тәғәйен яуап бирә, һүҙлек төҙөй, һәр элемент, орнамент исемен белә һәм аңлата - был уларға өй эше булараҡ бирелде.

Гран-при бүләген яулаған Светлана Ибраһимова Хәйбулла районы Ғәлиәхмәт ауылыныҡы. Уның яуыҡлы селтәр, ҡашмауҙары, биҙәүестәре республика кимәлендә билдәле, Санкт-Петербург, Мәскәү һылыуҙары ла яратып кейерлек өлгөлә эштәрҙең башы уның әсәһендә - Ғәлиәхмәт ауылында йәшәүсе Минзәлә Насированың алтын ҡулдарында һәм алдан күреүсән аҡылында. Заманалар булдыҡлы һәм хәстәрле кешеләргә оран ташлағас, ҡыҙыма бер һөнәр, эшләп тапҡан мал ҡото булыр, тип ошо боронғоса селтәр, ҡашмау эшләү серен өйрәтә Минзәлә, үҙе лә арымай-талмай булыша, ярҙам итә. Үҙенә күрә милли зауыҡлы, фәһемле ғаилә кәсебен шулай яйға һала улар.

Шулай итеп, гәләбаш буйынса бик ҡыҙыҡлы күренешле бәйге булды. Беренсенән, ниһайәт (!) гәләбәш бөтә боронғо йәме, дәрәжәһе, хоҡуғы менән башҡорт ҡатыны башына кейелде. Икенсенән, бөтә был ҡомарткыны иҫбатлап-юллап биргән Әсмә инәй Усманованың рухына бер оло тәһлил-тәсбих булды. Өсөнсөнән, музей экспонатынан, китап-каталогтарҙан өйрәнеп, үҙ тарихи хәтерен һәм этнографик белемен, тәжрибәһен, үҙ саялығын һәм һөйөүен ҡушып эшләгән гәләбаштар һәр кем күңеленә хуш килде. Гүйә, тау башына уйынға йыйылған ҡыҙҙар кеүек, һәр кем ерәңы гәләбаштарҙы сәләмләне, маҡтап теләктәр әйтте. Яугир, донъялыҡлы, уңған башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары "лыс көмөш тәңкәнән торған гәләбашты кейгән һәм кейәсәк" тигән уй һәр кемгә уйылды.

**Сәрүәр СУРИНА.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Әгәр ҡасандыр һөйәктәрегеҙ һынған йәки башҡа йәрәхәт алған булһағыҙ, уларға махсус күнекмәләр эшләгеҙ - ышҡығыҙ, ауыртҡан быуындарҙа усығыҙ менән ыуығыҙ.

Иртән, уяныу менән, көн һайын 1 аш ҡалағы алма һеркәһен 1 бал ҡалағы бал һәм бүлмә температураһындағы бер стакан һыуға болғап эсегеҙ.

Мотлаҡ иртәнге ашты ашағыҙ. Бер заман киң таралған, иртән ашамау модалы, тигән ҡараш дөрөҫ түгел һәм хатта, зыянлы. Әгәр ашағығыҙ килмәгәндә лә аҙ ғына булһа ла ашағыҙ, сөнки ул ашҡаҙан-эсәк трактын эшләтеп ебәрә. Иң яҡшы вариант - һоло бутҡаһы.

Оло йәштәгеләргә, ғөмүмән, йыш һәм аҙ ашарға һәм киске алтынан һуң ашамауҙы ныҡлы күҙәтергә кәрәк. Ошо ваҡыттан һуң ашаған барлыҡ ризыҡ шлакка әйләнәсәк. Әгәр һуң ятып, кисе алтынан һуң асығып китһәгеҙ, бер алма ашарға йәки бер стакан майһыҙландырылған ойоған һөт эсергә мөмкин.

Оло йәштәгеләрҙең туҡланыуында бер ни тиклем сикләүҙәр булырға тейеш. Айырым ашау принцибын ҡулланыу ҙа зыян түгел. Уны мотлаҡ барлыҡ пункттары буйынса үтәргә тимәгән, әммә иң мөһиме - аҡһым менән углеводтарҙы бергә ҡулланыуҙы сикләргә мөмкин. Аҡһым - ит, балыҡ, йомортҡа, бөшмәк, ҡуҙаҡлылар, баклажан, сәтләүектәр, көнбағыш. Углеводтар икмәктә, ярмаларҙа, макаронда, картуфта, шәкәрҙә, ҡайнатмала, балда, компотта бар. Шуға күрә бутерброд, картуф менән ит ашарға тырышмағыҙ. Бик ашағығыҙ килһә, уларҙы ике сәғәт айырма менән, айырып ашағыҙ.Ризыҡты бер тапҡыр ашау өсөн генә әҙерләгеҙ. Элекке көн бешерелгән щи организмығыҙға файҙа килтермәҫ. Аҙнаһына бер тапҡыр булһа ла бушаныу көнө талап ителә. Был ас тороу тигәнде аңлатмай. Асығыу һау-сәләмәт йәштәр өсөн генә ҡулай, ә оло йәштәгеләр араһында һаусәләмәттәр юҡ тиерлек. Бушаныу көнө - бер төрлө генә файҙалы ризыҡ ҡулланыу ул. Мәҫәлән, йә тик йәшелсә ашарға, йә киптерелгән емештәрҙән компот, йә бер көндә 1 килограмм алма ашарға, йә көн дауамында аҙ-аҙлап майһыҙландырылған ойоған һөт эсергә кәрәк.

**Иртәнге гимнастика өсөн Тибет медицинаһы түбәндәге күнегеүҙәр комплексын тәҡдим итә:**

1. Устарығыҙ менән сикәләрегеҙгә түнәрәк буйынса массаж эшләгеҙ - 30 тапҡыр.
2. Бармаҡтарығыҙ менән ҡолаҡтарығыҙҙы массажлағыҙ: һуҡ бармағығыҙ ҡолаҡ раковинаһында, баш бармаҡ ҡолаҡ артында булырға тейеш - 30 тапҡыр.
3. Маңлайҙы массажларға: уң ҡул, сәтәкәй бармаҡ ҡаш өҫтөндә булырлыҡ итеп ҡуйыла, һул ҡул уң ҡулдың өҫтөнә һалына һәм уңға-һулға 30 тапҡыр ышҡыла.
4. Бөгөлгән баш бармаҡтың кире яғы менән күҙҙең өҫкө ҡабағын 30 тапҡыр массажларға.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## 1 ИЮЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.45, 2.00 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 3.35 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 2.45, 3.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50, 1.00 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "25-й час". [16+]
23.20 "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
4.15 "Контрольная закупка". [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Ловушка для королевы". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Шаповалов". [16+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Боксер". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Наука 102. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**19.00, 22.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00, 5.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.15 Колесо времени. [12+]**
**0.15 Т/с "Следствие любви". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Отчаянная". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 2 ИЮЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.45, 1.55 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 3.30 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 2.40, 3.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50, 1.00 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "25-й час". [16+]
23.20 Премьера. "Камера. Мотор. Страна". [16+]
4.10 "Контрольная закупка". [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Ловушка для королевы". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Шаповалов". [16+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Боксер". [16+]**
**11.15 Республика Live. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 Дом у озера. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.30 С мотором... [12+]**
**20.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 "Честно говоря". [12+]**
**22.30 Дневник Международных детских игр. [6+]**
**23.15 Күстәнәс. [12+]**
**23.45 Замандаш. [6+]**
**0.00 Т/с "Следствие любви". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Заблудшая". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 3 ИЮЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.45, 2.00 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 3.40 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 2.45, 3.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50, 1.00 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "25-й час". [16+]
23.20 "Звезды под гипнозом". [16+]
4.20 "Контрольная закупка". [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Ловушка для королевы". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Шаповалов". [16+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Боксер". [16+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бала-саға. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**22.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**23.15 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**1.00 Т/с "Следствие любви". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Тамарис". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 4 ИЮЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.45, 2.15 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20, 1.25 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15, 3.45 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 3.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50, 0.25 На самом деле. [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "25-й час". [16+]
23.20 "Вечерний Ургант". [16+]
4.30 "Контрольная закупка". [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Ловушка для королевы". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Шаповалов". [16+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Боксер". [16+]**
**11.15 Д/ф "За ту весну, что навсегда настанет". [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Автограф. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**17.15 Точка зрения ЛДПР. [16+]**
**18.00 С мотором... [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**23.15 "Песня года". [12+]**
**23.45 Современник. [12+]**
**0.00 Т/с "Следствие любви". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Нэркэс". [12+]**
**5.15 Весело живем. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 5 ИЮЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.45, 3.00 "Модный приговор". [6+]
10.50 "Жить здорово!" [16+]
12.10, 17.00, 18.20 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00, 3.45 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.50 На самом деле. [16+]
19.50 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 "Три аккорда". [16+]
23.20 Х/ф Премьера. "Журналист". [18+]
1.25 Х/ф "Рокки-3". [16+]
4.30 "Контрольная закупка". [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 "Кто против?" [12+]
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Х/ф "Хозяйка большого города". [12+]
0.55 Х/ф "Секта". [12+]
4.05 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00 Д/ф "Между небом и Землей". [12+]**
**11.15 Д/ф "О мире, о войне, о победе". [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Йома". [0+]**
**12.30, 21.00 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Автограф. [12+]**
**14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью.**
**15.15 Алтын тирмә. [0+]**
**16.15 "Выше всех!" [6+]**
**16.30 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 У дачи. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 По сути дела... [12+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 Вечерний телецентр.**
**23.15, 4.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Т/с "Следствие любви". [16+]**
**2.00 Спектакль "Вишневая гора". [12+]**
**4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.45 Д/ф "Зеленый пояс Амура". [12+]**

## 6 ИЮЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Т/с "Фантазия белых ночей". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
9.00 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.10 Д/ф "Муслим Магомаев. Нет солнца без тебя..." [12+]
11.10 "Честное слово" с Юрием Николаевым. [12+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 "Муслим Магомаев. "Ты моя мелодия..." [16+]
16.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00 "Сегодня вечером". [16+]
20.35 Время.
20.55 Футбол. Суперкубок России-2019. "Зенит" - "Локомотив". Прямой эфир из Москвы.
23.00 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр. Финал. [16+]
0.15 Х/ф "Добро пожаловать на борт". [16+]
2.00 Х/ф "Рокки-4". [16+]
3.25 "Модный приговор". [6+]
4.10 "Мужское / Женское". [16+]
4.55 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.15 "По секрету всему свету".
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Выход в люди". [12+]
12.45 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
13.50 Х/ф "Пропавший жених". [12+]
17.55 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Там, где нас нет". [12+]
1.30 Х/ф "Кабы я была царица..." [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**8.45 Д/ф "Вся жизнь - мечта". [12+]**
**9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**9.30 "Физра". [6+]**
**9.45 "Перекличка". [6+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 Сыйырсыҡ. [0+]**
**10.30 "Городок АЮЯ". [0+]**
**10.45 Күстәнәс. [6+]**
**11.15 Хазина о Хазине. [0+]**
**11.45 Дневник Международных детских игр. [6+]**
**12.00 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия". [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**15.30 Специальный репортаж. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2019". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Следопыт. [12+]**
**22.30, 1.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**0.00 Т/с "Следствие любви". [16+]**
**2.15 Спектакль "Операция". [12+]**
**4.15 "Песня года". [12+]**
**4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.45 Весело живем. [12+]**
**6.00 Башҡорттар. [6+]**

## 7 ИЮЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.40, 6.15 Х/ф "Старшая сестра". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 "Жизнь других". [12+]
11.10 "Видели видео?" [6+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Премьера. "Живая жизнь". [12+]
15.00 Х/ф "Верные друзья". [0+]
16.55 Премьера. "Семейные тайны" с Тимуром Еремеевым". [16+]
18.30 Премьера. "День семьи, любви и верности". Праздничный концерт. [12+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Лучше, чем люди". Новые серии. [16+]
23.30 Х/ф Премьера. "Форма воды". [18+]
1.45 На самом деле. [16+]
2.35 "Модный приговор". [6+]
3.20 "Мужское / Женское". [16+]
4.05 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.10 Т/с "Сваты". [12+]
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.20 Смеяться разрешается.
12.40 Т/с "Золотая клетка". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.30 "Действующие лица с Наилей Аскер-заде". [12+]
1.25 Д/ф "Последний штурмовик". [12+]
2.20 Х/ф "Королева льда". [12+]
4.05 Т/с "Гражданин начальник". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 "Песня года". [12+]**
**10.00 Бирешмә. Профи. [6+]**
**10.45 Байтус. [6+]**
**11.00 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.15 Семь чудес родного языка. [0+]**
**11.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.45 "Ал да гөл. [6+]**
**12.00 Бай баҡса. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 Дороги жизни. [12+]**
**15.30 "Навруз-2019". [12+]**
**16.15, 4.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.45, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**17.15 "Торатау йыйыны". [12+]**
**19.00 Әлләсе... [6+]**
**19.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.00 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**20.30 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.00 Республика Live. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 "Байыҡ-2019". [12+]**
**0.15 Т/с "Следствие любви". [16+]**
**1.45 Спектакль "Скупой". [12+]**
**3.30 Автограф. [12+]**
**4.30 Д/ф "Млечный путь". [12+]**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Июль (Шәүүәл-зөлҡағиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 (28) дүшәмбе | 3:15 | 4:45 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 2 (29) шишәмбе | 3:16 | 4:46 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |
| 3 (30) шаршамбы | 3:17 | 4:47 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |
| 4 (1) кесе йома | 3:18 | 4:48 | 13:30 | 20:22 | 21:52 | 23:22 |
| 5 (2) йома | 3:19 | 4:49 | 13:30 | 20:22 | 21:52 | 23:22 |
| 6 (3) шәмбе | 3:20 | 4:50 | 13:30 | 20:21 | 21:51 | 23:21 |
| 7 (4) йәкшәмбе | 3:21 | 4:51 | 13:30 | 20:20 | 21:50 | 23:20 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*✓ Башҡаларҙан түгел, ә үҙеңдә көс һәм таяныс эҙлә. Үҙеңдең аҡыл көсөңдө үҫтер. Уға таянырға маташмаһаң, һин бер ваҡытта ла шәхес булараҡ үҫешә алмаясаҡһың.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ГЕРОЙ-ҠАЛАЛАР ҺӘМ ГЕРОЙ-ҠӘЛҒӘ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**25-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ифрад. Мәжитов. Ғәрәфә. Илсе. Аҡйор. Айыу. Мәрҫиә. Ашуғ. Аңлатма. Аҙым. Ауыл. Ағас. Онегин. Еҙнәй. Архив. Ритм. Алов. Нотоҡ. Әмәл. Оҙан.

**Вертикаль буйынса:** Аҙнабаев. Ғәйнуллин. Роттмайр. Мәкә. Ирәүән. Флаг. Фажиғә. Саман. Аша. Осло. Ҡыуыш. Хаят. Джобс. Оҫта. Ишемғолов. Ыҡ. Арена. Еләҫ. Сөләймәнов.

ҠОЛАҠ ҺАЛ!

## Бер ваҡытта ла зарланма һәм аҡланма

Аҡыллы бер әҙәм миңә ике төплө кәңәш бирҙе. Беренсеһе: бер ваҡытта ла зарланма. Сөнки башҡаларҙың да үҙ проблемалары баштан ашҡан. Зарланыу ул хәлде яҡшыртмай ҙа, төҙәтмәй ҙә, улар ярҙамында дуҫтарыңды ла арттырмайһың. Ҡәнәғәтһеҙлек энергияһы һүҙгә әйләнмәйенсә таралһын. Икенсе ҡағиҙә: бер нәмә лә аңлатма. Аңлатыу - ул үҙ-үҙеңде аҡларға маташыу, ундай хәбәрҙәреңде тыңларға бер кемдең дә ваҡыты ла, теләге лә юҡ.

## Ауырлыҡтар ҡулыңды һәлендермәһен

Тормошоңда килеп тыуған проблемаларҙан ҡулдарың һәленеп төшмәһен. Ситтән яҡлау эҙләүҙән дә насарыраҡ нәмә юҡ, үҙ аяғыңда ныҡлы торорға өйрәнергә кәрәк. Башҡаларҙан түгел, ә үҙеңдә көс һәм таяныс эҙлә. Үҙеңдең аҡыл көсөңдө үҫтер. Уға таянырға маташмаһаң, һин бер ваҡытта ла шәхес булараҡ үҫешә алмаясаҡһың. Ваҡ проблемаларҙы хәл итеүҙән башла, һәм күп тә үтмәҫ, һиндә үҙ-үҙеңә ышаныу, таяныу ғәҙәте барлыҡҡа килер.

## Башҡаларҙы ғәйепләмә

Йылдар үтеү менән һин уйсанлана бараһың, талапсанлығың кәмей. Ә һәр йәштә лә философ булып китергә мөмкин бит. Хискә түгел, аҡылыңа таянып фекерләргә өйрән. Шул саҡта башҡаларҙы ғәйепләмәйәсәкһең.

## Дуҫтарҙың төрлөһө була

Теге йәки был кеше менән дуҫлығың нисек үҫешер, әйтеүе ҡыйын. Ысынында иһә, ышаныслы дуҫтар бик аҙ. Тик һинән нимәлер алырға өмөтләнеп кенә дуҫлашҡан кешеләрҙе лә ситкә ҡаҡма. Дуҫтар бер-береһенә ярҙам итергә тейеш бит. Әгәр һиңә бүтәндәргә күп бирергә тура килә икән, яҙмышыңдың уңышлы булыуына, дуҫтарыңа ярҙам итә алыуыңа ҡыуан ғына. Бәлки, улар ҙа бер килеп йомартланыр.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# ИЮНЬ АЙЫНЫҢ ШИФАЛЫ ҮЛӘНДӘРЕ

## Айыу көпшәһе

(дягиль лекарственный)

Айыу көпшәһенең тамырһабағында эфир майы, кумариндар һәм фуранокумариндар, дуплау матдәләре, терпеноидтар, органик кислоталар, фитостериндар, ыҫмала, балауыҙ, шәкәр бар. Ә япрағында һәм сәскәһендә диосмин тигән флавоноид, емешендә - кумариндар күп.

Айыу көпшәһенең япрағы, һабағы, тамыры ла ашарға яраҡлы, шулай уҡ аш-һыу әҙерләүҙә йышыраҡ тәмләткес булараҡ ҡулланалар. Көҙ йыйылған емештәрен төрлө һурпаларға ҡушалар, настойка һәм еләк-емеш шараптарын тәмләтәләр. Айыу көпшәһе ҡушып әҙерләнгән аш-һыу аш һеңдереү процессын яҡшырта, витаминдар һәм башҡа файҙалы матдәләргә бик бай була. Дауаланыу өсөн сәскә атып өлгөрмәгән үләндең тамырһабағы тамырҙары менән әҙерләнә. Беренсе йылда үҫемлекте көҙ йыялар, икенсе йылда - иртә яҙ менән. Ҡаҙып алынған тамырһабаҡтары тупраҡтан яҡшылап таҙартып, һыуыҡ һыуҙа йыуып, һабағының төбөнән ҡырҡырға һәм арҡырыға ҡырҡалар. Үләнде яҡшы елләтелгән урында, өй башында, лапаҫ аҫтында йоҡа ғына итеп йәйеп киптерәләр. Яҡшы һауа торошо булғанда айыу көпшәһенең тамырһабағын йоҡа ғына итеп йәйеп, асыҡ һауала киптерергә лә була, тик ваҡыты-ваҡыты менән әйләндереп торорға кәрәк. Кипкән тамырҙы яҡшы ябылған ағас һауытта һаҡлайҙар.

Айыу көпшәһе ҡан әйләнешен яҡшырта, иммунитетты нығыта. Ул тирләтеү, бәүел сығарыу, тынысландырыу көсөнә эйә. Һыу-спирт настойкаһы ревматизм, подагра, артрит, радикулит ауырыуҙарын дауалауҙа файҙаланыла. Ҡытайҙа айыу көпшәһен ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙарын иҫкәртеү өсөн ҡулланалар һәм ул шифалы сифаттары буйынса женьшень тамырынан ғына ҡалыша, тип иҫәпләнә.

**Артрит.** Айыу көпшәһе тамырын онтап, өҫтөнә 1:10 нисбәтендә араҡы ҡойорға. Настойка менән быуындарҙы ыуырға.

**Йоҡоһоҙлоҡ.** 15 г киптерелгән айыу көпшәһе тамырына 1 стакан һыу ҡойоп ҡайнартырға, 10 минут ҡайнатҡандан һуң һыуытып һөҙөп алырға. Йоҡлар алдынан 1 ҡалаҡ эсергә.

**Бронхит.** 1) Ҡайнатма йоҡоһоҙлоҡтан арыныу өсөн әҙерләнгән рецепт буйынса эшләнә һәм көнөнә 3-4 тапҡыр берешәр ҡалаҡ эсергә кәрәк.

2) Тир сығарыу, бронхит булғанда ҡаҡырыҡ сығарыу, ларингит, шыма мускуллы ағзалар спазмаһына ҡаршы сара булараҡ ҡулланылған төнәтмәне түбәндәгесә әҙерләйҙәр: үләндең 8-10 г тамырһабағы һәм тамырҙарын термосҡа һалып, 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп 6-8 сәғәт төнәтәләр. Был дауаны ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә.

**Хроник гастрит.** 1 ҡалаҡ киптереп ваҡланған айыу көпшәһе үләнен 250 мл һыуҙа 5 минут ҡайнатып, 2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Хроник гастрит, йүтәл, хроник панкреатит булғанда бер сирек стакан төнәтмәгә бал ҡушып эсәләр.

**Шәкәр диабеты.** 1) 3 ҡалаҡ киптереп ваҡланған айыу көпшәһе тамырһабағы һәм тамырҙарына 1 стакан һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатырға. 20 минут төнәтергә һәм көнөнә 2-3 тапҡыр ашарҙан алда ярты стакан эсергә.

2) Айыу көпшәһенең тамырһабағы һәм тамырҙарын киптереп, киле, миксер йә ҡәһүә тартҡыста онтаҡлайҙар. Был онтаҡты ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр 0,5 г күләмендә ашайҙар. Ул шәкәр диабетынан ғына түгел, эс сәнскәндә, эсәктәр күпкәндә, гастрит, бөйөр һәм бәүел ҡыуығы ауырыуҙарынан да ярҙам итә.

**Быуындар һыҙлағанда.** Киптерелгән йәки яңы йыйылған айыу көшәһе тамырһабағы һәм тамырҙарын ваҡлап, 1:10 нисбәтендә өҫтөнә 70 процентлы спирт ҡойорға. Ҡараңғы урында өй йылыһында 14 көн тоторға. Һөҙөп алып быуындар һыҙлағанда, невралгик һәм мускулдар ауыртҡанда, шәкәр диабетын дауалауҙа ҡулланалар.

***Иҫкәртеү:** айыу көпшәһенән әҙерләнгән дауаларҙың зыян килтергән осраҡтары күҙәтелмәгән. Шулай уҡ тире аллергияһы булған кешеләр ҡулына күпертке сығыуы ихтимал, был осраҡта һаҡ булырға кәрәк.*

✓ *Донъя киң тип таралма, таралған тарыны тауыҡ сүпләй.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



*БЕР ФОТО ТАРИХЫ*

# ҺУҒЫШ ЙЫЛДАРЫ БАЛАЛАРЫ

**"Киске Өфө" гәзитенең һәр һанын яратып уҡып барам, рәхмәт һеҙгә! Ҡайһы бер мәҡәләләрҙе уҡып, оҙаҡ уйланып йөрөйөм, көйәләнеп тә кителә, күҙҙәргә йәш эркелә, тик бер нәмә лә эшләп булмай: беҙ, һуғыш йылы балалары, уның бөтөн ауырлыҡтарын өлкәндәр менән бергә күтәрештек; әсәйҙәребеҙ, өләсәй-ҡартәсәйҙәребеҙ ирҙәрен, улдарын, атай-ағайҙарын, ҡустыларын, туғандарын юғалтыу ҡайғыһын беҙгә, балаларына баҫып йыуанды.**



Минең дә атайым һуғышта ятып ҡалды. 1941 йылда киткән, 1943 йылдың февралендә хәбәрһеҙ юғалды тигән ҡағыҙ килгән. Мин үҙем 1938 йылғы, атайымды төштә күргән кеүек ике күренештә генә хәтерләйем: береһендә аяғына силғау урап, итекме, быймамы кейә ине. Ә мин иркәләнеп уның арҡаһына атланғанмын. Икенсе иҫләүем буйынса күмәкләшеп сәй эсәбеҙ. Ниңәлер илашалар. Мин атайымдың алдында ултырам, шул килеш йоҡлап киткәнмен...Иртән тороуыма, атайым өйҙә юҡ ине инде... Ул йылдарҙа, нишләптер, кешене һуғышҡамы, ҡайҙа - төнөн алып китер булғандар. Шулай итеп, өс йәшемдә генә мин атайһыҙ тороп ҡалғанмын. Мин хәҙерге Баймаҡ районы Һәмән ауылы ҡыҙы булам. Беҙҙең урамды ни өсөндөр "ҡаҙаҡ урамы" тип йөрөтәләр ине. Тиҫтерҙәрем - 6 ҡыҙ, 1 малай бер урамда бер туғандар кеүек үҫтек. Һуғыш барыбыҙға ла уртаҡ яҙмыш та әҙерләп ҡуйған шулай: барыбыҙҙың да атайҙары һуғышҡа киткән һәм береһе лә әйләнеп ҡайтманы...

Әсәйҙәр эштә, ә беҙ, балалар, ер ҡарҙан асылыу менән ҡуян тубығы эҙләп ҡырға сығып китәбеҙ. Ашарға яраҡлы үләндәр, ашлыҡ башаҡтары менән тамаҡ туйҙырабыҙ, өйгә лә алып ҡайтабыҙ. Минең өлкән йәштәге өләсәйем булды. Ул йыуа, балтырған, ҡымыҙлыҡ, кәзә һаҡалы кеүек төрлө үләндәрҙе йыуып, турап, беҙгә өйрә бешерә лә, ҡатыҡлап ашата торғайны. Ҡыҫҡаһы, аслыҡты ла, яланғаслыҡты ла елкәбеҙҙә етерлек татыныҡ. Һыуыҡ өйҙә тешебеҙ тешкә теймәй өшөп таң аттырыуҙарҙың иҫәбе-һаны булманы. 11-12 йәштән колхозда эшләй башлаһам да, был йылдар документҡа индерелмәгән, бары тик 15 йәштән колхозсы булараҡ иҫәпләнәм. Ә бит эшләмәгән эш ҡалманы: һарыҡ та, бәрәс тә ҡараным; трактор артынан һабан да һөрәбеҙ; сәсәбеҙ. Көҙ уңыш йыябыҙ, комбайн артынан ҡалған башаҡтар йыябыҙ; төнгөлөккә - иген таҙартыу. Эш өҫтөнә эш, ҡул ҡаушырып йөрөргә форсат юҡ ине. Хәҙерге балаларға ҡарайым да уларҙың ҡайһы бер ярамаған ҡылыҡтарын күреп, йәнем әрней: ни эшләргә белмәй, барлыҡтан да кеше ҡоторор икән, тип аптырайым.

Әйткәндәй, һуғыш йылдары балаларына бөгөнгө көндә лә хөкүмәт тарафынан бер ниндәй ярҙам юҡ. Миҙал биреп сыҡҡан булдылар. Тик унан бер ниндәй файҙа ла юҡ. Исмаһам, берәй төрлө ташламаһы менән файҙаланып булһа икән. Теге йылдарҙа беҙҙе яҡшы, етеш тормоштан һуғыш мәхрүм итһә, бөгөн, тыныс йылдарҙа ла пенсиянан пенсияға һуҡыр тиндәрҙе һанап, мәхрүмлектә йәшәргә мәжбүрбеҙ. Ошо категорияға ҡараған халыҡ һаны ла бик аҙ ҡалып килә инде. Исмаһам, тормош-көнкүрешебеҙҙе яҡшыртырҙай берәй ҡарар сығарылһын ине беҙҙең турала ла. Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына табан китеп барыуыбыҙ бит.

1959 йылда мин Әбйәлил районы Ишҡол ауылына килен булып төштөм, хәҙер ҙә ошо ауылда йәшәйем. Һеҙгә бер фоторәсем һалып ебәрәм, баҫып сығарһағыҙ, ундағы кешеләрҙең балалары, туғандары ҡарап, бер ҡыуаныр ине, сөнки бөгөнгө көндә фотолағы апайҙарҙың береһе лә был донъяла юҡ. Был фотоға беҙ, Ишҡол ауылы ветерандарының ҡатындары һәм балалары, Бөйөк Еңеүҙең 30 йыллығын байрам иткән аш мәжлесендә Ҡыҙыл йылғаһы буйында төшкәйнек. Баҫып торғандар рәтендә һулдан иң ситтә аш бешереүсе - ул мин, ошо хат авторы (аҡ алъяпҡыста). Ветеран ағайҙар һәм олатайҙар икенсе төркөмдә ултырғайнылар, уларҙың фотоһы миндә булмай сыҡты.

Хоҙай Тәғәлә, насар ваҡытта, аслыҡ-яланғаслыҡта интегеп йәшәнең, тип, йәшәтәлер инде мине, тип тә ҡуям. Бала саҡ ауыр булһа ла, йәшлек матур үтте: йырлашып эшкә барабыҙ, йырлашып эштән ҡайта инек. Беҙ, ҡыҙҙар, йыйнаҡ булдыҡ, егеттәребеҙ тыйнаҡ булды. Әле ҡартайһам да (миңә 81 йәш) һаман йәшәге килә бит; ерҙең аҫтынан өҫтө ҡәҙерле. Илдәр тыныс, донъялар имен торһон, тип теләйем. Тыныс тормоштоң ҡәҙерен беләйек, балалар.

**Нажиә инәйегеҙ ФӘРИТОВА.**
**Әбйәлил районы**
**Ишҡол ауылы.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Май һәм июнь айҙарында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Архангел районы** Архангел ауылынан Айгөл Сәмиғуллина, **Ҡырмыҫҡалы районы** Алайғыр ауылынан Венера Мансурова, Хәйбулла районы Байғусҡар ауылынан Мөнирә Моратова, **Стәрлебаш районы** Иҫке Ҡалҡаш ауылынан Фәүҡәт Ҡотлошин, **Өфө районы** Шамонин ауылынан Люциә Исхаҡова, Зәйтүнә Абдуллина, Роза Абдуллина, Рәйлә Ишкилдина, Фәриҙә Мөрсәлимова, **Әбйәлил районы** Салауат ауылынан Мәрхәбә Ноғоманова, Үтәгән ауылынан Таңбикә Йәһүҙина, **Баймаҡ районы** Ҡолсора ауылынан Фәйрүзә Баязитова, **Ауырғазы районы** Төрөмбәт ауылынан Миңлегөл Ибракова, **Федоровка районы** Бала Сытырман ауылынан Мәүсилә Үтәҡолова, **Өфө ҡалаһынан** Наилә Усманова, Юнир Вәлиев, **Ейәнсура районы** Яңы Павловка ауылынан Ринат Әлмөхәмәтов һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Ныҡлы сәләмәтлек, бәрәкәтле тормош, ҡот, ырыҫ, бәхет теләйбеҙ үҙегеҙгә һәм яҡындарығыҙға! Йылдар дауамында һыналған тоғро дуҫтарыбыҙ араһында һеҙҙең дә булыуығыҙға бик шатбыҙ һәм рәхмәтлебеҙ. Артабан да бергә ҡалайыҡ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АҠЫЛЛЫЛЫҠ...
### һаҡалға ҡарамай

Донъя киң тип таралма, таралған тарыны тауыҡ сүпләй.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һәр ҡыйынлыҡтың сиселеше бар. Ауырлыҡ шунда: ул сиселеште табырға кәрәк.

**(Эвви Неф).**

Сәйәси кампания - ул милләттең йөрәк тибешен ауыҙ асып тыңлау сәнғәте.

**(Фил Тьюсет).**

Юл насар булған һайын, күҙгә нығыраҡ сaң тула.

**(Михаил Ганин).**

Һорауыңды кире ҡағыуҙарын теләмәһәң... һорама ла ҡуй.

**(Джон Драйден).**

"Шулай тип әйтәләр" тигән һүҙҙәр артына бөйөк ялған йәшеренгән.

**(Д. Маллох).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ҡарт вафаты алдынан улын саҡырып алған да былай тигән: "Улым, мин һинең бәхетле булыуыңды теләйем. Бәхетле булыу өсөн ил гиҙ, хыялыңды нисек тормошҡа ашырырға икәнен әйтерҙәр", - тигән. Атаһы үлгәс, улы донъя гиҙеп сығып киткән. Бына ул бер йылғаға етә һәм яр буйында ябыҡ, ас, ҡарт ҡына бер ат йөрөгәнен күрә. "Һин ҡайҙа китеп бараһың, егет кеше?" тип һорай ат. "Бәхет эҙләп китеп барам, - ти егет. - Бәлки, һин уның ҡайҙалығын беләһеңдер?" "Йәш сағымда мине барыһы ла иркәләне, ашатты, эсерҙе, эшләтмәне, башҡалар хаҡында уйлап та бирмәнем, - ти ат. - Бына хәҙер ҡартайҙым, башҡаларҙың миндә бер эше лә юҡ. Шуға ла һиңә кәңәшем шул: йәшлегеңдә бөтә эште лә эшлә. Башҡаларҙың шатлығы менән шатлан. Хәстәрлектәрҙән ҡурҡма. Шул саҡта бар бәхет тик һинең эргәңдә булыр". Егет артабан китә һәм юл буйында бер йыланды күрә. "Ҡайҙа киттең, егет?" тип һорай йылан. "Бәхет эҙләп китеп барам". "Бына мин дә үҙемдең ағыуым менән ғүмер буйы ғорурландым, - ти йылан. - Минән барыһы ла ҡурҡа, тип уйланым. Юҡ, ҡурҡмайҙар, ә нәфрәтләнәләр. Һәр береһе мине үлтерергә теләй. Шуға ла мин хәҙер барыһынан да ҡасам. Һиндә лә бар ундай ағыу - ул һинең телең. Ҡара, телең берәүҙе лә сәбәпһеҙгә саҡмаһын. Ул саҡта һиңә берәүҙән дә ҡасырға тура килмәҫ һәм һин бәхетле булырһың..." Егет артабан китә һәм ҙур ҡошҡа тап була. Ҡош уның ҡайҙа китеп барыуы менән ҡыҙыҡһына. Егеттең яуабына ҡаршы ул ҡош шулай ти: "Һин күптән ил гиҙәһеңдер. Йөҙөңдө саң баҫҡан, кейемдәрең һәләмәгә әйләнгән. Кешеләр һинән йөҙ бора. Бәхет тә һинең эргәңдә туҡтап торорға теләмәҫ. Шуның өсөн һин тирәңдә бар нәмәнең матур булыуына өлгәш. Ул саҡта бәхетеңде лә күрерһең".**

**Шул һөйләшеүҙән һуң егет кеше өйөнә әйләнеп ҡайтҡан. Хәҙер инде ул бәхет эҙләп ҡайҙалыр ситтә йөрөргә түгел икәнен ныҡлап аңлаған".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 27 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 517